ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 июнь (һөтай) 2017

№23 (753)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт балаһының теле...** ни өсөн урыҫ телендә асыла? 3



**Кешеләр...** тормош мәғәнәһен табһын 6



**Йәштәргә ярҙам итә алмаһаң...** ҡамасаулама ла ҡуй! 8-9



**Донъябыҙҙы аҡлаусылар булайыҡ -** сираттағы саҡырыу шулай яңғыраны 12-13



**ТВ-программа** 14

***Ваҡытлыса ғына булһа ла тереләрҙең үлгәндәр тураһында яҙғандарын уҡыуҙан туҡтағыҙ ҙа, күптән үлгән кешеләрҙең тереләр тураһында яҙғандарын уҡығыҙ әле.***

***(Г. Честертон).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Өфөлә йәшәһәм, бәхетле булыр инем", тип хыялландыңмы? Өфөлә йәшәүең менән бәхетлеһеңме?

***Асҡар НАҒАЕВ, Өфө дәүләт сәнғәт институты студенты, "Өфөнән, һөйөү менән!" фильмында төп ролде башҡарыусы:*** Дөрөҫөн әйткәндә, мин үҙем Өфөлә тыуһам да, өс йәшемдән алып тыуған ҡаламды күреү, унда ҡайтыу хыялы менән йәшәнем, сөнки ғаиләбеҙ менән баш ҡаланан Норильскиға күсеп киткәндә миңә өс кенә йәш ине. Мин ул ваҡыттарҙы әҙерәк иҫләйем: Өфө урамдарындағы телефон будкалары күҙ алдымда тора, ә ҡала нисектер бәләкәйерәк тә, күңелһеҙерәк тә һымаҡ ине. Ун биш йылдан ашыу ваҡыттан һуң тыуған ҡалама әйләнеп ҡайттым бына. Тик уны хәҙер танырлыҡ та түгел! Мегаполистарҙан һис тә ҡалышмай: күккә ашҡан күп ҡатлы офис бинаалары, торлаҡ йорттар ҡалҡып сыҡҡан. Баш ҡалабыҙ яҡты, йәшеллеккә, сәскәләргә күмелгән, урамдар киң, иркен. Ә таҙалығы, ҡала кешеләренең ягымлығы яғынан мин Өфөнө үҙем йәшәп киткән Норильск менән бер ҙә сағыштыра алмаҫ инем. Етмәһә, минең кеүек велосипедта йөрөргә яратыусылар өсөн айырым юл бүленгән. Ҡыҫҡаһы, дуҫтарың менән осрашып, һөйләшеп ултырыр, ял итер урындар бик күп. Быларҙың күбеһен мин фильм төшөргәндә лә күрҙем. Хәҙер Өфөнөң үҙәк урамдарының береһендә йәшәгәс, көн дә һоҡланам ҡалабыҙ матурлығы менән. Өфөгә ҡайтыуым менән бик бәхетлемен. Бында ҡайтыуымдың төп маҡсаты - уҡыу. Белем алып, актер һөнәре серҙәренә төшөнөү. Әйткәндәй, талантлы режиссер Айнур Асҡаровтың "Өфөнән, һөйөү менән!" фильмында ҡатнашыу минең өсөн бик ҙур бәхет, тормошомдоң уңышлы бер ваҡиғаһы булды. Фильм геройы Урал да бит Өфөнө бик ярата, ошонда ҡалғыһы, үҙенә рухташ дуҫтар тапҡыһы, кешеләргә файҙа килтереп, мәғәнәле тормош менән йәшәгеһе килә. Шул хыялы хаҡына ул хатта яратҡан өләсәһенең теләгенә ҡаршы килеүҙән дә ҡурҡып тормай. Әйе, Аллаһ бирһә, яҡшы итеп уҡыуҙы тамамлағас, мин дә баш ҡаламда ҡалырға, ошонда эшләргә теләр инем, әгәр эш урыны булһа. Әлегә - баш ҡалабыҙҙа һәм, ғөмүмән, Башҡортостанда йәшәүсе бөтөн яҡташтарыма уңышлы көндәр, тормоштарында шатлыҡ-ҡыуаныстар теләйем. Бөтәгеҙгә лә ҡайнар сәләмдәр һәм һөйөү менән - Өфөнән мин булырмын!

***Зөһрә КОТЛОГИЛДИНА, шағирә, журналист:*** Минең өсөн Өфө тыуған ҡалам кеүек. Беренсенән, ошонда килеп төйәкләнеүемә ярты быуат самаһы (47 йыл!) ваҡыт үтеп тә киткән. Икенсенән, тыуып-үҫкән еремдә күҙ төбәп кенә ҡайтып төшөрлөк ата йорто булмағас, ошо йорт йылыһын ғүмер буйы баш ҡалам алыштырҙы, тиһәң дә булалыр. Бында мине республикабыҙҙың иң ҙур уҡыу йортонда белем алыу, абруйлы, билдәле яҙыусыларыбыҙҙы күреү, гөрләп торған студент тормошонда ҡайнау хыялы һәм, иң мөһиме - баш ҡаланың ижад тормошона ҡушылып китеү теләге әйҙәне. Бәхетлемен: хыялдарым тормошҡа ашты. Университеттың "Шоңҡар" әҙәби түңәрәгендә сыныҡыу алып, ҙур-ҙур яҙыусылар менән осрашып танышыу, аралашыу бәхете тейҙе. Уҡыуымды тамамламаҫ борон уҡ "Башҡортостан пионеры" (әле "Йәншишмә") республика балалар гәзитенә эшкә саҡырып алдылар. Әҙәбиәтебеҙҙең танылған, данлыҡлы әһелдәре - Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Кәтибә Кинйәбулатова һәм башҡа яҙыусыларыбыҙ менән аралашыу ошо гәзиттә 40 йыл эшләү дәүеренәсә дауам итте.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ҠОЯШЛЫ ҠАЛА

***Өфөләрҙән ҡояш сығалыр ул -***
***Яҡтылығы алыҫ тарала.***
***Кешеләрҙәй, нурлы сырайлы,***
***Булалыр ул тик сал ҡалалар.***

***Бында башҡорт артҡан һайын, гүйә,***
***Көләсләнә йөҙө ҡаланың.***
***Ихласлыҡҡа биҙәк булам тиеп,***
***Шул ҡаланы мин дә һайланым.***

***Бында башҡорт артҡанғалыр шулай***
***Бик йыш килә төрлө ҡунаҡтар.***
***Улар беҙгә байрам ғәме өҫтәп,***
***Ҡанатланып ҡайтҡан һымаҡтар.***

***Туған телдең моңо иркәләгәс,***
***Урамдарҙың йөҙө яҡтыраҡ.***
***Майҙандар киң һәм аяҙ булғанға***
***Ҡурай моңо аҡты бик йыраҡ.***

***Уйсан убаларҙа - көләс сырай,***
***Һағышы ла яҡты ҡаланың.***
***Бер яратҡан бәндәһеләй, Өфө -***
***Ярат҅ҡанылыр ул Алланың.***

***Төндәренең унын үҙ нуры бар,***
***Гел йондоҙло кеүек көндәре.***
***Хыялымды ысын иткән ҡалам,***
***Аяҙлана һиндә өндәрем.***

**Лариса АБДУЛЛИНА.**




12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# СӘБӘЛӘНМӘЙЕК!

***Мәүлиә САФИУЛЛИНА, Рәсәйҙең мәғариф алдынғыһы, БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** Бөгөнгө заман һил, тыныс булһын өсөн иң тәүҙә һәр бер кеше үҙен тынысландырырға, әйләнә-тирәлә булған ваҡиғаларҙың айышына төшөнөргә тейештер. Тыныс булыу, тигәндән, кемдәрҙер был төшөнсә аҫтында бер нәмә лә эшләмәй, битараф ҡалыуҙы аңлайҙыр. Әммә беҙгә бөтә нәмәне сабыр ғына, сәбәләнмәй генә ҡабул итеп өйрәнергә кәрәк. Борон ата-бабалар тап шундай тыныс холоҡло, әммә кәрәк саҡта йыйылып, ғауғаламай, эште тиҙ генә хәл итерлек көскә эйә булған. Үҙ көстәренә ышанғандар, заман ҡуйған һәр һынауға әҙер торғандар. Бөгөн күптәр бер-бер хәл булһа, тота ла: "Бөттө былай булғас, ни эшләргә?" - тип аптыранып ҡала. Бөттө, тиһәң, ысынлап та бөтә. Уның урынына, килеп тыуған проблеманы хәл итеү өсөн нимә эшләй алам, кемдән кәңәш һорайым, тип уйларға кәрәк һәм ҡул ҡаушырып ултырмау мөһим. Фекерҙәрҙе тәртипкә килтерергә, тормош һынауҙарын, көрсөктәрҙе, эш урынында килеп тыуған ауырлыҡтар, ғаиләгә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә кешегә төрлө сығанаҡтарҙан тупланған белеме ярҙам итә. Был үҙебеҙҙең туған телдә сыҡҡан ваҡытлы матбуғат, тарихи материалдар, китаптар һәм башҡа сығанаҡтар булыуы мөмкин. Башҡортса гәзит-журналдар уҡыуҙың файҙаһын унда алдыҡ һүҙ булмауында, еңел-елпе хәбәрҙәр баҫылмауында күрәм. Ә бит хәҙер беҙҙең арала уҡырға теләмәү көслө, шуға берәүҙәр телевизор йә интернет аша, йәки кемдеңдер ауыҙынан ишетелгән, телдән-телгә күсеп йөрөп үҙгәргән мәғлүмәтте ҡабул итә. Туған телебеҙгә лә зыян килә, йәш балалар башҡортса уҡымай, башҡорт, рус һәм инглиз йә башҡа телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙе ҡушып, үҙҙәренә әллә ниндәй аралашыу лөғәте төҙөп алды, тиһәк тә яңылыш булмаҫ. Уларға оло быуын кешеләре өлгө күрһәтергә бурыслы, тәү сиратта бөтә эш ғаиләнән башлана бит инде.

"Халҡыбыҙҙың тарихи тамырҙары бик тәрәндә, үҙебеҙ теләйбеҙме, юҡмы, уйлайбыҙмы, юҡмы, тарих ебенән күскән мәғлүмәттәр ата-бабаларыбыҙҙан бирелгән көс-ҡеүәт, ихтыяр һәр беребеҙҙә бар. Ошо рухи көстө кешелә уята белергә кәрәк", - тип ҡабатларға яратам. Бының өсөн даими рәүештә ғаиләнән башлап, йәмғиәт кимәленә тиклем эшләргә кәрәк. Сөнки донъяны рәткә һалыу ниәтендә һүҙ һөйләп кенә артыҡ бер нәмә лә ҡыйратып булмай. "Ҡөрьән"дәге бер хәҙистә лә кеше үҙе белгән белемде үҙ эсендә йомоп ҡалдырырға тейеш түгел, башҡаларға еткерергә бурыслы икәнлеге тураһында яҙылған. Беҙ ҡулдан килгәнсә был эште атҡарырға тырышабыҙ, өйҙә балалар һәм ейән-ейәнсәрҙәр менән туған телдә аралашабыҙ, үҙебеҙҙең йолалар, тарих, мәҙәниәткә ылыҡтырабыҙ. Әбйәлил районы Рәхмәт ауылы халҡы менән күмәкләп йәштәргә тәрбиә биреү, тамырҙарын иҫтә тотһон өсөн төрлө осрашыуҙар, фекер алышыуҙар, ҡорҙар йыябыҙ. Йәштәр барыһын да күреп үҫергә, ололар башҡорт кешеһе ниндәй булыуын күрһәтеп йәшәргә тейеш. "Мин башҡорт!" тип әйтер алдынан ошо һүҙҙәрҙе дәлилләрлек ниндәй эштәр башҡарыуың, холоҡ-фиғелең ҡайһылай икәнен уйлап алырға кәрәк. Башҡортлоғобоҙҙоң сағылышы туған телебеҙҙе, тарихи тамырҙарҙы яҡшы белеү, заман ауырлыҡтарын тыныс ҡабул итә алыу, балаларға дөрөҫ тәрбиә биреү булһын!

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Өфөлә йәшәһәм, бәхетле булыр инем", тип хыялландыңмы? Өфөлә йәшәүең менән бәхетлеһеңме?

**(Башы 1-се биттә).**

Китаптарым баҫылып сығып тора. Үҙ илеңдә үҙ телеңдә китаптар сығарыу, бер уйлаһаң, үҙе ҙур бәхет. Баш ҡалабыҙ йылдан-йыл яҡшы яҡҡа үҙгәрә, матурлана; йәйге осорҙа күҙ яуын алырлыҡ сәскәләргә күмелә. Бик уңайлы, фонтандар атып торған ял итеү урындары күбәйҙе. Мин үҙем, мәҫәлән, йәшерәк саҡтарҙа Октябрь проспекты буйлап популяр йырҙа йырланған Өфө йүкәләре араһынан йәйәү йөрөргә ярата инем. Ғөмүмән, Өфө - иҫ киткес йәшеллек ҡалаһы, әллә күпме төрлө ағас һәм ҡыуаҡ төрҙәре үҫә баш ҡала урамдарында. Ирекһеҙҙән күңелгә шиғыр юлдары килә. Әйткәндәй, яңыраҡ бер йырсыбыҙ Өфө тураһында яҙылған шиғырымды көй яҙырға тип һорап алды. Шул шиғыр юлдарына һалынған минең Өфөгә булған һөйөү һүҙҙәрем. Өфө - йәшлек ҡалаһы, тиелә унда. Сөнки йәштәр бында республиканың төрлө мөйөштәренән ҡанатланып уҡырға, эшләргә килә. Өфө - бәхет ҡалаһы, сөнки әлеге йәштәр бында мөхәббәттәрен осратып, ғаилә ҡора. Өфө - тарих ҡалаһы. Унын мең ярым йыллыҡ тарихын асып, боронғо Өфө ҡалаһын танытып китте мәшһүр ғалимыбыҙ Нияз ағай Мәжитов. Өфө - дуҫлыҡ ҡалаһы. Унда йөҙҙән ашыу төр милләт халҡы йәшәй. Шөкөр, бер ниндәй милләт-ара аңлашылмаусылыҡтар юҡ, булмаһын да. Сөнки ҡалабыҙ ҙа, эскән һыуыбыҙ, һулаған һауабыҙ ҙа, хатта байрамдарыбыҙ ҙа уртаҡ беҙҙең, сөнки барыбыҙ ҙа - өфөләр. Баш ҡалабыҙҙы ла бөтәбеҙ берҙәй үк күреп яратабыҙ, унын менән ғорурланабыҙ.

***Зәки ӘЛИБАЕВ, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе, филология фәндәре кандидаты:*** Әйе, Өфө ҡалаһы беҙҙе үҙенең балҡып янған уттары, тарихи урындары, һәйкәлдәре, рухи үҫеш өсөн бик күп мөмкинлектәре менән бәләкәйҙән үҙенә тартып, ылыҡтырып торған бер маяҡ һымаҡ ул. Әле мин аңлайым: юғары маҡсаттар, күңел бейеклегенә ынтылыу булған ул бала саҡ хыялы. Ҙур, матур ҡалалар, заманса мегаполистар күп донъяла, тик баш ҡалабыҙ символы булған Салауат Юлаев һәйкәле һәм шул юғарылыҡты күңел түребеҙҙә йәшәтеүсе Өфө ҡалаһы - ул берәү генә, һәм ул һин ҡайҙа ғына йөрөһәң дә: сит илдәрҙе гиҙәһеңме, тыуған ауылыңды һағынып ҡайтаһыңмы - һәр саҡ үҙенә тартып, саҡырып тора.Икенсенән, Өфө үҙенең боронғолоғо, тарихи һәм бөгөнгө ҡиммәттәре, бай мөмкинлектәре менән халҡыбыҙҙы берләштереп, рухиәтебеҙ үҫешенә туҡтауһыҙ йоғонто яһап тороусы күңел мәккәбеҙ ҙә ул. Бөтөн бөйөк шәхестәребеҙҙе үҫтереп, ҡанат ҡуйыусы ла бит Өфө. Баш ҡалабыҙҙың донъя кимәлендә танылыу яулай барыуында уларҙың да өлөшө ҙур.

Әйткәндәй, бына әле генә, 1 июндә, РФ Президенты В. Путин VI Бөтөн донъя фольклориадаһын баш ҡалабыҙ Өфөлә үткәреү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Был да һуңғы йылдарҙа Өфөбөҙҙөң донъя кимәлендәге саралар үҙәгенә әүерелә барыуын таныусы сираттағы оло ваҡиғаларҙың береһе буласаҡ. Ҡайһы саҡ ишетелә биреп ҡуйыуынса, башҡа милли төбәктәрҙәге кеүек, баш ҡалабыҙға милли стилдәге биҙәлеш һәм архитектура өлгөләре етешмәй, ләкин быға ҡаршы мин шулай тип әйтер инем: миллилек - ул тышҡы билдәләр, милли атрибутика ғына түгел бит. Унын ҡарауы, Өфө ҡалаһы үҙенә генә хас милли ерлеге, ошо ерлектән һут алыусы башҡорт рухиәте, башҡорт мәҙәниәте, башҡорт ҡурайы, башҡорт балы, башҡорт матбуғаты, башҡорт китабы кеүек бренд кимәлендәге хазина һәм ҡаҙаныштары менән дан тота. Шуға өҫтәп, мин баш ҡаланың быуындар бәйләнешен ялғап тороусы ролен дә билдәләп китер инем. Ошонда уҡып, белем алып, эшләп йөрөйөм - хыялым тормошҡа ашты. Ғаилә ҡороп, дүрт бала үҫтерәбеҙ. Улар инде бөтәһе лә төп өфөлө - баш ҡаланың тиң хоҡуҡлы граждандары булып үҫеп килә. Һәм бындай ғаиләләр байтаҡ баш ҡалабыҙҙа. Башҡорт ғаиләләре күберәк булған һайын, ҡалабыҙҙың милли ерлеге, рухиәте, бәҫе лә арта ғына барыр, тип ышанам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

● Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе - үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә онлайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Унын өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vip-ishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфө ҡалаһы буйлап эш сәфәре барышында Затон биҫтәһендә Спорт әҙерлеге үҙәген төҙөү барышы менән танышты. Республиканың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта һөйләүенсә, төҙөлөп ятҡан комплекс Рәсәйҙә ошондай төрҙәге берҙән-бер ҡыйыҡлы үҙәк буласаҡ. Бында төрлө инвалидлыҡ төрҙәре менән спортсы-паралимпиясыларҙың күнекмәләре өсөн шарттар булдырыласаҡ. Үҙәктә Рәсәй һәм халыҡ-ара ярыштарҙы ҡабул итеү, төрлө спорт төрҙәре буйынса күнекмәләр үткәрергә мөмкин буласаҡ.

✓Ошо көндәрҙә Өфөләге "ВДНХ-Экспо" комплексында барған Халыҡ-ара экология форумында Рәсәйҙә геопарктар булдырыуҙы тикшерҙеләр. Уны ойоштороу урыны итеп Салауат йәки Бөрйән районын һайлауҙары мөмкин. Рәсәй Сит ил эштәре министрлығы ҡарамағындағы Рәсәй Федерацияһы ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияһының яуаплы секретары Григорий Орджоникидзе илдәге беренсе геопарк Башҡортостандың Салауат районындағы Янғантауҙа урынлашасағын әйтте.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Саксония Ландтагының рәсми делегацияһы (Германия Федератив Республикаһы) менән осрашты. Делегацияны Саксония парламенты ағзаһы, Үҙәк һәм Көнсығыш Европаның Парламент форумы президенты, Саксония Ирекле дәүләтенең дәүләт юстиция министры Себастьян Гемков етәкләй. Осрашыу барышында яҡтар хеҙмәттәшлектең перспективалы, шул иҫәптән сәнәғәт, энергетика, ауыл хужалығы, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау өлкәһендәге, шулай уҡ мәҙәни үҙ-ара эш итеү йүнәлештәрен тикшерҙе.

✓Ҡырым Башҡортостанға Евпаториялағы балалар шифаханаларының береһен тапшырасаҡ, тип хәбәр итте республика Башлығы Рөстәм Хәмитов. "Яңыраҡ ҡына Ҡырым Республикаһы етәкселеге менән ошо турала һөйләшеп килештек, - тине Рөстәм Хәмитов. - Уны йүнәтеп, яңыртып, тәртипкә килтерәсәкбеҙ һәм ошо шифаханала йыл һайын 5 мең самаһы бала һаулығын нығыта аласаҡ. Һис шикһеҙ, беҙ быға аҡсаны йәлләмәйәсәкбеҙ, сөнки ул бик мөһим эш. Шифахана йыл әйләнәһенә эшләйәсәк".

✓ *Беҙ заманында олатай-өләсәйҙәрҙең әкиәттәрен тыңлап үҫтек. Ул әкиәттәр әле булһа ла хәтерҙә. Хәҙер ейән-ейәнсәрҙәренә әкиәт һөйләүселәр бармы икән? Булһа ла, бик һирәктер. Бына мин дә уларға әкиәт һөйләмәйем.*



УЙЛЫҒА - УЙ

# БАШҠОРТ БАЛАҺЫНЫҢ ТЕЛЕ...

## ни өсөн урыҫ телендә асыла?



**Был ниндәй ғәжәп хәл - ниндәй генә дәүерҙә йәшәмәйек, тел мәсьәләһе гел көнүҙәк урында. Баш иҫән булһа, тел һаҡланыр әле, тип уйлай инем ошоғаса. Хәҙер был йәһәттән фекерем үҙгәрҙе. Һан яғынан һаҡланһаҡ, хатта арта барһаҡ та, башҡорт телендә һөйләшеүселәр күҙгә күренеп кәмей бара.**

Мин тик башҡорттарҙан ғына торған ауылда йәшәйем. Өйҙә лә башҡортса һөйләшәбеҙ. Өс ҡыҙ тәрбиәләп үҫтерҙек. Икәүһе - тормошта, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ бар. Фатирҙары булһа ла, өлкән ҡыҙымдың ғаиләһе беҙҙә йәшәй, сөнки кейәү вахта ысулы менән Себер яҡтарында эшләп йөрөй. Ғаиләләрендә ун һәм биш йәшлек ул, ике йәшлек ҡыҙ үҫтерәләр. Ошо балаларға ҡарап, ни эшләп башҡорт балаһынын теле урыҫ телендә асылғанын аңланым, шикелле.

Беҙ заманында олатай-өләсәйҙәрҙең әкиәттәрен тыңлап үҫтек. Ул әкиәттәр әле булһа ла хәтерҙә. Хәҙер ейән-ейәнсәрҙәренә әкиәт һөйләүселәр бармы икән? Булһа ла, бик һирәктер. Бына мин дә уларға әкиәт һөйләмәйем. Атай-әсәйҙәре, донъя көтәм, тип ашыға, күп нәмәгә өлгөрмәй, балалар тәрбиәләргә ваҡыттары бик әҙ ҡала. Был осраҡта өйҙөң иң түрендә ултырған телевизор власты үҙ ҡулына ала. Яҡшыға ла, яманға ла ул өйрәтә. Хәҙер иң төпкөл ауылдарға ла күп каналлы телевидение, интернет үтеп инде. Һәр кем үҙе теләгән каналдан тапшырыу ҡарай. Балалар, әлбиттә, йәнһүрәт ярата. Улар шул ҡәҙәре уйлап, һөйләшә белмәгән бәләкәй генә баланың да күңелен арбарлыҡ итеп төшөрөлгән. Балаға һорау бирәләр, төрлө яуаптарын күрһәтәләр, предметтарҙың исемдәрен, төҫтәрен, формаларын ҡабатлаталар. Ҡыҫҡаһы, кескәйҙәребеҙ шул йәнһүрәт персонаждары менән һөйләшә, аралаша, төрлө ваҡиғаларҙа ҡатнаша, уйнай, көлә, шул телдә һөйләшергә өйрәнә. Биш йәшлек ейәнем беҙ белмәгән нәмәләр хаҡында һөйләп шаҡ ҡатыра. Үҙе һаҡау, ярты хәбәрен урыҫса аңлата, инглиз һүҙҙәрен дә ҡушып ебәрә, сит телдә һанап та күрһәтә. Ике йәшлек ейәнсәремдең теле урыҫ һүҙҙәре ҡушып асылды, урыҫса-башҡортса тәтелдәп йөрөй. Ә ун йәшлек ейәнем таҙа итеп башҡорт телендә һөйләште, сөнки ул ваҡытта күп каналлы телевидение килеп етмәгәйне әле. Был хәл беҙҙең ғаиләбеҙҙә генә икән тип уйлар инем, эштәге аралашҡан иптәштәрҙең дә шул уҡ проблема икәнен белә-күрә йөрөйөм. Хатта ҡайһы берҙәренең мәктәпкә бармаған балалары тик урыҫ телендә генә һөйләшә.

Күрше ауылдан килеп эшләп йөрөгән китапханасының, һөнәре буйынса башҡорт теле уҡытыусыһының улының урыҫ телендә һөйләшеүенә аптырап, "Үҙең уҡытыусы булып эшләгәнһең, ни өсөн улыңды урыҫ телендә һөйләштерәһең?" - тинем. "Үҙенән үҙе шулай һөйләшергә өйрәнде лә ҡуйҙы. Шул телевизор эше инде", - ти. Йәғни, был беҙҙең ғаиләнең генә түгел, бөтөн халҡыбыҙҙың бәләһе булып килеп сыға.

Мәләүез ҡалаһында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлағанда яҡташыбыҙ, шағир, БДУ профессоры Фәнил Күзбәковтың сығышы иҫтә ҡалған. "Телебеҙ бик ауыр хәлдә. Мәҫәлән, һәр кем ауырыу әсәһен оҙағыраҡ йәшәтер өсөн төрлө дауа, саралар ҡулланырға тырыша бит. Беҙ ҙә телебеҙҙе ҡотҡарыр өсөн төрлө саралар табырға тейешбеҙ", - тигәйне ул. Профессорҙың фекерен хуплап, шуны әйтмәксемен. Эйе, телебеҙ ысынлап та ныҡлы ауырыу кисерә. Һәр бер ауырыуҙы уңышлы дауалар өсөн дөрөҫ диагноз ҡуйырға кәрәк, сөнки тәүҙә ауырыуҙы булдырған сәбәптәрҙе асыҡлау мөһим. Әлеге осраҡта телевидениенан барған көслө "мәғлүмәти һөжүм" беҙҙең файҙаға түгел. Улар һөйләшә белмәгән баланың да телен урыҫ телендә аса. Элек ҡала балаларында ғына булған тел проблемалары ауыл ерҙәренә лә күсте. Туған телгә һөйөү тәрбиәләүҙә милли гәзит, журналдар, мәктәп, балалар баҡсаһы, төрлө йәмәғәт ойошмалары бик күп көс һала. Тик был саралар ғына етмәй. Заманабыҙ ҙур тиҙлектә алға елә, нанотехнологиялар, фәнни асыштар осоро. Шулай булғас, яңы алымдарҙы, фән ҡаҙаныштарын ҡулланмайынса, телебеҙҙе һаҡлау, үҫтереү ауыр буласаҡ. Самолетта осҡан кешене ат арбаһында ултырып ҡыуып етеп булмағаны көн кеүек асыҡ.

Алда әйтеп киткән "мәғлүмәти һөжүмде" тик түбәндәге юл менән генә кире ҡағып булалыр, тип уйлайым. Әйтәйек, башҡорт теленә дөрөҫ тәржемә ителгән ошо уҡ йәнһүрәттәр каналын асыу. "Тамыр" каналы бар ҙа инде, тиеүселәр булыр. Һүҙ юҡ, "Тамыр" каналы бик изге эш эшләй, тик был тапшырыуҙар ғына етмәй. Сөнки ундай тапшырыуҙар иртәнән-кискә ҡәҙәр бер туҡтауһыҙ барырға тейеш. Тамсы ла тама-тама ташты тишә. Заманында торғонлоҡ йылдары тип аталған осорҙа балаларҙы, үҫмерҙәрҙе төрлө ойошмалар үҙҙәренә йәлеп итеп, тәрбиә эше алып барылды. Әле уларҙың береһе лә юҡ. Мәғарифта, башҡа өлкәләрҙә барған реформалар ҙа башҡорт телен үҫтереүгә ныҡ аяҡ сала икәнен аңлайым. Ошондай буталсыҡ осорҙа бөтөн ижади көстәрҙе туплап, уйлап эшләнелгән башҡортса тапшырыуҙар урындағы телевидение, радио аша тәүлек буйына барырға тейеш, тигән фекерҙәмен. Был тапшырыуҙар урыҫ, инглиз телендәге программаларға конкурент булырлыҡ итеп эшләнергә тейеш. Һәм тағы шундай фекер: ни өсөн юғары уҡыу йорттарында уҡыған буласаҡ филологтарыбыҙға, журналистарыбыҙға телде өйрәнеү генә түгел, ә телде һаҡлап ҡалыу йүнәлешендә диплом эштәре яҡламаҫҡа, файҙалы тапшырыуҙарҙы, сценарийҙарҙы, йәнһүрәттәрҙе, фильмдарҙы башҡорт теленә тәржемә итмәҫкә? Был ижади эш телебеҙҙе һаҡлауға бер аҙым булыр ине.

Эйе, бөтөн нәмә аҡса менән баһаланған ҡатмарлы осорҙа йәшәйбеҙ. Тик тыуған ил менән туған телдең хаҡын баһалап булмай. Минең тәҡдимдәрем дә матди сығымдар талап итә. Унан ҡалһа, төрлө-төрлө бюрократик кәртәләр ҙә килеп тыуа. Тик был йәһәттән халҡы, теле өсөн янып көйгән шәхестәребеҙ, милләттәштәребеҙ нимә уйлай икән? Ошо турала гәзит биттәрендә фекер алышһаҡ ине. Ятып ҡалғансы, атып ҡал, ти халыҡ мәҡәле лә. Һуң булып ҡуймаҫ элек телебеҙҙе ҡулланыу даирәһен киңәйтеү кәрәк түгелме беҙгә?

**Урал МӨХӘМӘТШИН.**
**Мәләүез районы**
**Иштуған ауылы.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ

# ҺЫНАЛҒАН ДУҪ УЛ...

**Тәүге тапҡыр был баҫманы ҡулыма алғанда студент инем. 15 йыл эсендә һөнәри яҡтан да үҫеш кисерҙем, донъяға ҡарашым да үҙгәрҙе, әммә "Киске Өфө" менән дуҫлығым ғына шул килеш ҡалды. Иң ҡыуандырғаны, был гәзиттең үҙенең маҡсаттарына тоғролоғо һәм бөгөнгө көндә лә күптәрҙең яратҡан баҫмаһы булып ҡалыуы.**

Һәр яңы мәғлүмәт һиңә фәһем бирергә тейеш. Шулай булмаһа, уның ҡыҙығы юғала. "Киске Өфө" биттәрендә башҡорт халҡы тарихы буйынса яңынан-яңы ҡыҙыҡлы мәҡәләләр баҫылыуын көтөп алам. Күпме шәхестәребеҙҙең исемен танытты ул беҙгә. Ул ғына ла түгел, хатта халҡыбыҙҙың көнкүреше, йолаларын да онотоп барабыҙ бит. Гәзиттә уҡыйһың да, ысынлап та, был әйбер шулай атала, был әйбер шулай яһала ине бит әле, тип уйлайһың.

"Әсәйем лөғәте" рубрикаһы оло бер табыш, унда башҡорт теленең күпме матур ынйылары бер епкә теҙелә. Ҡоштарҙың, үләндәрҙең атамаһын башҡортсалап әйтеп һирәк һөйләшәбеҙ шул хәҙер. Традицион кәсептәребеҙгә ҡағылған тематик һүҙҙәр тураһында әйтеп тораһы ла түгел, онотоп бөтөп барабыҙ. Ташҡа баҫылған хәтерҙә лә ҡала, киләсәктә лә уны асып ҡарап ебәреп була. Ошо юҫыҡта эшегеҙҙе дауам итһәгеҙ ине.

Күркәм эштәр башҡарып, башҡорттарҙы данлап йөрөүсе замандаштарыбыҙ тураһында уҡырға яратам. Уҡытыусы булһынмы ул, табипмы, тағы әллә ниндәй заманса һөнәр эйәһеме - гәзит уҡыусыға уларҙың эшмәкәрлеге бик ҡыҙыҡлы. Үҙебеҙҙең халҡыбыҙға ғына хас дауалау алымдарын белеп ҡалдыҡ хәҙер. Юғиһә, ниндәй ауылға ғына барма, халыҡ рус телендә сыҡҡан "ЗОЖ" гәзитен алдырып, уларҙың һәр һанын йыйып бер була ине бит.

Ниндәй генә рубриканы алып ҡарама, һәр береһенән үҙеңә ниндәйҙер фәһем алаһың. Хатта "Алдар менән Ерәнсә" рубрикаһынан да. Һәр халыҡтың шаяртыуында ла уның холоҡ-ҡылығы асыҡ ярылып ята. Башҡорттоң ихласлығын, эскерһеҙлеген таныйым уларҙа. Шуға ла ошо юлдан тайпылмаһын ине киләсәктә лә "Киске Өфө". Һыналған дуҫлығыбыҙ артабан да нығыныр, тип ышанам.

**Ләйсән ХӘСӘНОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Яҡтыкүл" курорты биләмәһендә матур йолаға әйләнгән сара - Курорт һабантуйы була. Быйыл байрам 17 июндә ойошторола. Байрам майҙанында "Металлург-Магнитогорск" тау саңғыһы үҙәгендә күркәм Этноауыл асыла. "Яҡтыкүл батыры" исеменә билбау көрәше еңеүсеһен һайлау ҡаралған. Тамашасылар үҙҙәре лә спорт ярыштарында һәм халыҡ уйындарында ҡатнаша ала. Кисен Курорт һабантуйы барышында тәүге тапҡыр "Уралым" заманса этник музыка фестивале була. Ул 2020 йылғы Бөтә донъя Фольклориадаһына әҙерлек сиктәрендә үткәрелә.

✓14 июндә Өфөләге Иван Якутов исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркында балалар һәм үҫмерҙәр вандализмы күренештәрен иҫкәртеү, үҫмерҙәрҙең милли һәм мәҙәни мираҫҡа, тарихи ҡиммәттәргә ҡарата вәхшиҙәрсә мөнәсәбәтенә кире ҡараш формалаштырыу маҡсатында флешмоб үткәрелә. Сара барышында "Йәштәр вандализмға ҡаршы!" асфальтта рәсем яһау конкурсы, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының художество-графика факультеты студенттары ҡатнашлығында граффити буйынса оҫталыҡ дәресе ойошторола саҡ.

✓Башҡортостандың Мәсетле районында Төбәк-ара ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр конкурсы уҙҙы. Гран-приға Өфөнән Заһир Зәйнетдинов лайыҡ булды. Конкурсҡа нигеҙ һалған һәм уның иҫтәлегенә бағышланған Роберт Заһретдиновтың ҡыҙы ла үҙенең призын булдырған. Айһылыу Заһретдинова еңеүсегә көмөш ҡумыҙ тапшырҙы. Бәйгелә 152 кеше - Башҡортостан, Саха (Яҡут), Татарстан, Хакасия республикалары, Һамар һәм Свердловск өлкәләре, Пермь крайы вәкилдәре ҡатнашты.

✓Өфөнөң Совет районында 16-21 июндә йылылыҡ селтәре участкаһында капиталь ремонт эштәре уҙғарыу менән бәйле Красноводская һәм Степан Злобин урамдары араһында ("Аркада" сауҙа үҙәге ҡаршыһында) Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин урамы буйлап транспорт хәрәкәте тулыһынса ябыла. "Өфө инженер селтәрҙәре" муниципаль унитар предприятиеһы ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтар өсөн ғәфү үтенә һәм автомобиль водителдәренән ошо участканы урау юлын алдан хәстәрләүҙәрен һорай.

**"Башинформ"дан.**

***✓ Мәҙәниәттәрҙең үҙ-ара ҡушылыуы Көнсығыш һәм Көнбайышты ғына түгел, ә бөтә донъя халыҡтарын берләштерә ала. Бер-береһенең ҡаҙаныштары менән танышып кешеләр мәҙәни тормошон байыта һәм ҡитғаларҙы яҡынайта.***

БАШ ҠАЛАМ



# ДОНЪЯНЫ... матурлыҡ ҡотҡарырмы?

**Баш ҡалала әленән әле вандализм акттары күренеп ҡала. Шуның бер төрө - клумбаларҙағы сәскәләрҙе урлау. Ошо көндәрҙә Пушкин һәм М. Кәрим урамдарынан 200 төп сәскә ҡаҙып алынған. "Матурлыҡ донъяны ҡотҡарыр" тиһәк тә, матурлыҡты күрмәүселәр ҙә бар икән арабыҙҙа. Ошо ваҡиға айҡанлы һорауҙарыбыҙҙы Башҡортостан юлдаш телевидениеһы журналисы, "Бәхетнамә" тапшырыуының алып барыусыһы Миңзиә КАСПРАНОВА-РӘХМӘТУЛЛИНАға төбәнек.**

**➔ Яҙ етһә, ҡала хеҙмәттәре төрлө төҙөкләндереү, сәскәләр ултыртыу эшен башлай. Улар ҡалаға йәм биреп ултыра. Ошо матурлыҡты күрәһеңме, әллә күҙеңә лә салынмайҙармы?**

- Өфөлә эшләһәк тә, ҡала янындағы ауылда йәшәгәс, Өфө урамдарына һирәк сығырға тура килә. Ләкин торған һайын уның матурыраҡ, сағыуыраҡ була барыуы күҙгә ташлана. Сәскә түтәлдәре йәйғор төҫтәрендә балҡып, күҙҙе ҡамаштыра. Ниндәйе генә юҡ сәскәләрҙең! Клумбалар эсенә урынлаштырылған төрлө композициялар - ҡурай, һыуһар, бал ҡорто, күбәләктәр айырыуса йәмле. Халыҡ улар эргәһендә фото төшмәйенсә китмәй. Шулай уҡ ҡала урамдарында төрлө һәйкәлһындар ҡуйылғанына иғтибар итәм. "Рәсәй" урамында ат етәкләгән башҡорт уҙаманы һынын күреп ҡыуандым. Шөкөр, баш ҡала урамдарына ла йәйләп милли орнаменттар элементтары, милли образдар инә бара.

**➔ Ләкин арабыҙҙа йәшәгән кешеләрҙең фантазияһы һәм эшһөйәр ҡулдары тыуҙырған ошо матурлыҡты юҡҡа сығарыусылар, сәскәләрҙе йолҡоп алыусылар йәки ҡаҙып, үҙҙәренә күсереп ултыртыусылар табыла. Ундайҙарҙың ҡылығын нимә тип аңлатырға һәм ниндәй яза бирергә мөмкин?**

- Бер һүҙ менән әйткәндә, был вандализм һәм уғрылыҡ тип атала. Ундайҙарҙы мотлаҡ ҡулдарынан эләктереп, фотоға төшөрөп, фотоларын ҡала урамдарына элеп сығырға кәрәк, тип уйлайым. Элек "Ҡармаҡ" тигән шундай гәзиттәр сығарылған бит. Һәм ҙур суммала штраф түләтеп, ҡала урамдарын таҙартыу буйынса мәжбүри эштәргә йәлеп итеү кеүек яза бирер инем. Бындай яза Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодекста ла ҡаралған. Ҡулдары менән эшләгәндәр икән, иңдәре менән күтәрһендәр әйҙә.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

КӨНАУАЗ

# ДОНЪЯ КИМӘЛЕНДӘ ЛӘ...

## байрам ойоштора беләбеҙ



**Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин "VI Бөтә донъя фольклориадаһын уҙғарыу тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы.**

Документта Халыҡ-ара фольклор фестивалдәр һәм традицион сәнғәт ойошмалары советының ҡарарына ярашлы, 2020 йылда Рәсәй Федерацияһының VI Бөтә донъя фольклориадаһын уҙғарыу хоҡуғына эйә булыуы билдәләнә. Указға ярашлы, Өфө был ҙур сараны үткәреү урыны буласаҡ. Халыҡ-ара сараның ҙур мәҙәни әһәмиәткә эйә булыуы менән бәйле, Рәсәй Хөкүмәтенә VI Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты булдырырға ҡушылды. Ул иһә, үҙ сиратында төп саралар планын әҙерләргә һәм раҫларға тейеш.

Указ менән Фольклориадаға әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу менән бәйле сығымдар федераль ҡаҙнала Рәсәй Мәҙәниәт министрлығына тәғәйенләнгән бюджет ассигнованиелары сиктәрендә финансланасағы билдәләнгән. Башҡортостан Хөкүмәте Фольклориадаға әҙерләнеүҙе һәм уны уҙғарыуҙы тәьмин итеү, шул иҫәптән ошо маҡсатҡа Башҡортостан Республикаһы ҡаҙнаһының бюджет ассигнованиелары һәм бюджеттан тыш сығанаҡтар иҫәбенә сығымдарҙы финанслау буйынса саралар ҡабул итергә тейеш. Документҡа ярашлы, Рәсәй Федерацияһы субъекттарының дәүләт власы органдарына VI Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнеүҙә һәм уны уҙғарыуҙа ҡатнашырға кәңәш ителгән.

- Фольклориаданың Башҡортостанда - Европа менән Азия тоташҡан ерҙә үтеүе символикаға эйә. Мәҙәниәттәрҙең үҙ-ара ҡушылыуы Көнсығыш һәм Көнбайышты ғына түгел, ә бөтә донъя халыҡтарын берләштерә ала. Бер-береһенең ҡаҙаныштары менән танышып, үҙ рухи йолаларының күркәм һәм үҙенсәлекле булыуын асыҡлап, кешеләр мәҙәни тормошон байыта һәм ҡитғаларҙы яҡынайта, - тип билдәләне республика Башлығы Рөстәм Хәмитов. - VI Бөтә донъя фольклориадаһын Өфөлә уҙғарыу тураһындағы ҡарар Башҡортостандың милләт-ара берҙәмлек, халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ үҫешенә, шуның менән Рәсәй берҙәмлеген нығытыуға ла индергән өлөшөн баһалау ул. ШОС һәм БРИКС саммиттары кеүек халыҡ-ара кимәлдәге ҙур сараларҙы уҙғарыу тәжрибәһенә эйә булған Башҡортостан ошо яуаплы бурысты, һис шикһеҙ, үтәй аласаҡ.

Бөтә донъя фольклориадаһы Фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары халыҡ-ара советының рәсми саралар өлөшө булып тора. Ғәҙәттәгесә, унда 60-80 илдән өс меҥ самаһы артист ҡатнаша. Тәүге Фольклориада 1996 йылда Голландияла, икенсеһе - 2000 йылда Японияла уҙғарыла. Венгрия өсөнсө Фольклориаданы үткәреү урыны була. 2012 йылда Көньяҡ Кореяла дүртенсе Бөтә донъя фольклориадаһы уҙа. 2016 йылда Бөтә донъя фольклориадаһы Мексикала гөрләй. 2015 йылда 45-се Бөтә донъя конгресында һәм Халыҡ-ара фольклор фестивалдәр һәм традицион сәнғәт ойошмалары советының генераль ассамблеяһында 2020 йылда Фольклориаданың Башҡортостан Республикаһында уҙғарылыуы иғлан ителгәйне.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# РӘСӘЙ - МИНЕҢ ТАРИХЫМ!



**Башҡортостанда, илебеҙҙең баш ҡалаһынан һуң икенсе булып "Рәсәй - минең тарихым!" Бөтә Рәсәй проекты тормошҡа ашырыла һәм Рәсәй көнө алдынан ВДНХ-ның Өфө павильонында шул уҡ атамалағы тарихи парк асыла.**

7000 квадрат метр майҙанды биләйәсәк экспозиция 500 берәмек мультимедиа техникаһынан тора һәм панорама рәүешендә илдең 1000 йылдан ашыу тарихын сағылдырасаҡ.

Башҡортостандың беренсе төбәк итеп һайланыуы юҡҡа түгел, сөнки республика етәкселеге белем биреү проекттарына етди иғтибар бирә, үҫешкән конгресс инфраструктураһына эйә, уның үҙенсәлеге булып күп милләтлелек һәм күп конфессиялылыҡ тора.

Өфөләге күргәҙмәлә Рәсәй менән Башҡортостан тарихтарының тығыҙ бәйләнеше төп урында торасаҡ. Унда видеопроекцион коллаждар башҡорт халҡының күп быуатлыҡ тарихы тураһында бәйән итәсәк, Өфө Кремлененең яңы 3D-реконструкцияһы, Башҡорт иленең тәбиғи байлыҡтары һәм башҡа бик күп нәмәләр күрһәтеләсәк. Бигерәк тә башҡорт батырҙарының ҡаһарманлығына айырым иғтибар биреләсәк. Төбәктең күп динлелеге, атап әйткәндә, православие менән ислам тарихы ла төп урында торасаҡ.

Тиҙҙән бындай мультимедиалы тарихи парктар Санкт-Петербургта, Төмәндә, Волгоградта, Ҡаҙанда һәм башҡа ҡалаларҙа асыласаҡ. Уларҙа дүрт экспозиция: "Рюриковичтар", "Романовтар", "1914 - 1945: Бөйөк тетрәнеүҙәрҙән Бөйөк Еңеүгә", 1945 йылдан бөгөнгә тиклем осор урын аласаҡ.

Ойоштороусылар күргәҙмәне Рәсәй тарихы буйынса "тере" дәреслек тип атай, экспозиция материалдары РФ Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән.

**Проекттың Ойоштороу комитеты.**

# БЕҘ БЫСРАТАБЫҘ, УЛАР ТАҘАРТА



**8-10 июндә "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығының Морат туғайында "Тарихи-мәҙәни мираҫты музейлаштырыу: тәғлимәт һәм ғәмәл" тип исемләнгән халыҡ-ара симпозиум үтте.**

Башҡортостан Республикаһының мәҙәни мираҫ объекттарын, шул иҫәптән, археологик ҡомартҡыбыҙ Шүлгәнташ мәмерйәһендә тәүтормош кешеләре төшөргән һүрәттәрҙе һаҡлауға, музейлаштырыуға һәм үҫтереүгә арналған инде

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың Күп функциялы үҙәктәре 8 июндән халыҡҡа яңы дәүләт хеҙмәтен күрһәтә башланы. Күп функциялы үҙәк офистарында милеккә һалым түләү өсөн документтар алырға мөмкин. Шулай уҡ бурыстарҙың барлығын-юҡлығын бушлай белергә була.

✓Башҡортостандың 25 районында яҙғы сәсеү тулыһынса тамамланды, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығында. Әле 37 мең гектар ерҙә сәсергә ҡалған, ниғеҙҙә, ҡарабойҙай һәм кукуруз. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, бөгөнгә 2,12 миллион гектар майҙанда сәсеү эштәре башҡарылған, был 98 процент тәшкил итә.

✓Быйыл йәй Башҡортостанда 98 ҡала яны лагеры асыла, унда 48 мең бала ял итә ала. Әлеге ваҡытта шуларҙың 28-е эшләй, дүрт мең бала ваҡытын күңелле һәм файҙалы итеп үткәрә. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: ҡала ситендәге лагерҙа ял итеү арзанға төшмәй. Анығыраҡ әйткәндә, барыһы өсөн дә түгел. Әгәр бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә хаҡтың 90 проценты түләнһә, ҡалғандарға ни бары 50 проценты ғына ҡаплана. Әгәр лагерь ведомствоға ҡараһа, бында эш биреүселәр күп осраҡта сығымдарҙы үҙ өҫтөнә ала.

✓Берҙәм дәүләт имтиханының тәүге һөҙөмтәләре 13 июндән һуң иғлан ителә, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Мәғариф министрлығында. Имтихан һөҙөмтәләре буйынса апелляцияны ике эш көнө эсендә бирергә мөмкин. Уҡыусылар рус теленән йыйған балдарын 26 июндә беләсәк, 20 июндән һуң ҡабаттан тапшырыуҙар башлана.

✓Өфөлә 11-се тапҡыр ҡаланың "Баш ҡала ҡаҙанышы" төп йәмәғәт премияһын тапшырҙылар. Уға мегаполистың иң вайымлы кешеләре лайыҡ булды. Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, лауреаттарҙы ҡотлап, баш ҡала үҙенең уңыштары һәм ҡаҙаныштары өсөн төрлө йәштәге, һөнәрле, социаль статуслы өфөләргә бурыслы булыуын билдәләне. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, был конкурсҡа 2006 йылда Ҡаланы үҫтереү йәмәғәт фонды үҙҙәренең эше менән баш ҡаланы үҫтереүгә булышлыҡ иткән өфөләргә ярҙам итеү маҡсатында нигеҙ һалған. Премиялау попечителдәр, социаль яҡтан әүҙем бизнес, меценаттар аҡсаһына ғына уҙғарыла.

✓ *Йәкшәмбе көнө Салауат районында "Салауат йыйыны" фольклор байрамында улар башҡорт милли уйындары һәм йыр-моңо менән танышасаҡ.*

*АФАРИН!*

# МӘҘӘНИ БАЙРАМ...

## донъя халыҡтарын йыйҙы



**Республикала "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале бара. Унда быйыл 11 илдән 200-гә яҡын ҡунаҡ ҡатнаша. 6 июндә старт алған сара 12 июнь көндө Өфөлә ҙур Гала-концерт менән тамамланасаҡ.**

Фестиваль республиканың 5 районында үтәсәк, төрлө илдәрҙән килгән ижади коллективтар Дыуан, Ҡыйғы, Мәсетле райондарында һабантуйҙарҙа, Төбәк-ара ҡумыҙсылар һәм өзләүселәр, "Ҡыйғыр юлы" I Төбәк-ара фестивалдәрендә, "Һомай" Республика милли костюмы конкурсында ҡатнашып өлгөрҙө. Бөгөн уларҙы Балаҡатай районы ҡаршы алды, унда ҡунаҡтар Төбәк-ара рус йыры һәм таҡмағы байрамын күҙәтәсәк. Йәкшәмбе көнө Салауат районында "Салауат йыйыны" фольклор байрамында улар башҡорт милли уйындары һәм йыр-моңо менән танышасаҡ. "Был фестиваль хәҙер 20 йылдан ашыу үтә һәм беҙ йыл һайын башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәтен бөтөн республика халҡына күрһәтергә тырышабыҙ", - тине журналистар менән осрашыуҙа Республика халыҡ ижады үҙәге генераль директоры урынбаҫары Нәфисә Тулыбаева.

Быйылғы фестивалдә тамашасылар беренсе тапҡыр Колумбия, Иран, Шри-Ланка, Сербия, Мексика мәҙәниәте менән дә танышасаҡ. Мәҫәлән, Колумбияны "La Cuarta" музыкаль төркөмө күрһәтә, улар үҙ репертуарында латин жанрҙары - сальса, антиль музыкаһы, колумбия фольклоры, регги һәм электрон музыканы берләштергән. Мексиканың Мехико штаты фольклор балеты ла бөтөн донъяла билдәле коллектив. Һиндостан, Ҡаҙағстан, Ҡытай, Көньяҡ Африка Республикаһы мәҙәниәте фестивалдең тамашасыларына таныш. Көньяҡ Африканың "Tswelelopele Ka Lekgotla La Botaki Le Setso" тип аталған бейеү ансамбле коллективы журналистар менән осрашыуҙа ла ҡатнашты. "Цуцубе" бейеүе төрлө йолаларҙа ҡулланыла: ямғыр саҡырғанда, бала тыуғанда, һунарҙа, шулай уҡ ата-бабаларыбыҙға рәхмәтебеҙҙе белдереү билдәһе лә. Башҡортостанда туҡтауһыҙ ямғырҙар яуа, был бейеү ярҙамында ямғырҙы туҡтатып торорбоҙ", тип шаярттылар улар һәм республика халҡына ҡояшлы аяҙ көндәр вәғәҙә иттеләр. Был сарала Ҡытайҙың Төньяҡ Шэньси төбәгенән килгән Мей Хай арт-төркөмө лә булды. Төркөм 2005 йылдан эшләй, уға шәхси эшҡыуар нигеҙ һалған. Коллектив боронғо йырҙар, бейеүҙәр, йолалар тергеҙеү менән шөғөлләнә. Уларҙың сығыштары ла үҙҙәренең халҡының фольклорына таянып төҙөлгән. Был коллективтарҙың һәр береһе үҙ милли сәнғәтен сит яҡтарҙа танытыу йәһәтенән күп эшләй. Һиндостандың "Ритмы" халыҡ ижады халыҡ-ара клубының да төп бурысы был. Уларҙың иң билдәле бейеүе - бхаратнатьям. Ул иң боронғо бейеүҙәрҙән һанала. Элек ҡатын-ҡыҙҙар ғына бейеүсе булған, хәҙер улар араһында ир-егеттәр ҙә бар. Көньяҡ Кореяны Ян Чан хи бейеү төркөмө күрһәтәсәк. Тыныслыҡ бейеүе - Кореяның матди булмаған мираҫы тип иҫәпләнә, бейеүҙең нигеҙендә һалмаҡ хәрәкәттәр ята. Тап ошо бейеүҙә милли кейемдәге корей ҡатын-ҡыҙының бөтөн гүзәллеге күренә. Улар шулай уҡ барыһына ла билдәле елпеүес менән бейеүҙе лә күрһәтәсәк. Быйылғы "Берҙәмлек" фестивале 2020 йылда Башҡортостанда үтәсәк Бөтөн донъя фольклориадаһына әҙерлек тә. Шуға ла ул CIOFF - Фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары халыҡ-ара советы яҡлауы аҫтында үтә.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

өсөнсө тапҡыр уҙғарылған Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау буйынса дәүләт идараһы, Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге дәүләт бюджет учреждениеһы һәм БР-ҙың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты тарафынан ойошторолған халыҡ-ара симпозиумда Башҡортостан, Рәсәй һәм сит ил ғалимдары ҡатнашты. Симпозиум алдынан Өфөлә Европа ғалимдары, мәмерйәләр һүрәттәрен тергеҙеү белгестәре ҡатнашлығында матбуғат кәңәшмәһе үтте. Унда Европа реставраторы Антон Эудаль Гийаме, Францияның Монтиньяк ҡалаһындағы боронғолоҡ музейының ғилми етәксеһе Ален Далис һәм мәҙәни проекттарҙы яҡлау буйынса белгес, Францияның Понт Д-Арк музей-мәмерйәһе хеҙмәткәре Давид Хугат баш ҡала журналистары менән осрашты. Европанан килгән белгестәр үҙҙәренең тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Симпозиум тамамланғас, 10-26 июндә сит ил ғалимдарынан торған экспедиция Шүлгәнташ мәмерйәһенә төшөрөлгән бөгөнгө граффитиҙарҙы юйыу буйынса эш башлаясаҡ, тиелде кәңәшмәлә. Был экспедицияны Европаның Ласко, Шове, Руфиньяк, Арси-сюр-Кюр (Франция), Суэва дель Пендо һәм башҡа мәмерйәләрҙең таштарына яҙылған һүрәттәрҙе һаҡлау тәжрибәһе булған Антон Эудаль Гийаме етәкләйәсәк. Гийаме әфәнде хәбәр итеүенсә, был комиссия мәмерйә залдарындағы барлыҡ хәҙерге граффитиҙарҙы ла юйырға самалай. "Бары тик иң төпкө залдағы хәҙерге яҙмалар ғына, ул залдарға ла кеше аяғы баҫыуын дәлилләп торһон өсөн, юйылмаясаҡ", - тине реставратор.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*



# БАЙРАМ ИТӘ БАШ ҠАЛА!

**12 июнь баш ҡалала Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуға 443 йыл тулыуҙы билдәләү менән бер рәттән, башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевтың тыуыуына 263 йыл тулыу һәм Рәсәй көнө билдәләнәсәк.**

Байрамға арнап, муниципаль китапханаларҙа тематик күргәҙмәләр, әҙәби күҙәтеүҙәр, осрашыуҙар ойоштторола, музейҙарҙа яңы экспозициялар, Өфөгә һәм өфөләргә бағышланған фотокүргәҙмәләр асыла. Мәғариф учреждениеларында уҡыусыларҙың һәм педагогтарҙың концерттары үтә. Художество галереяларында һәм күргәҙмә залдарында төрлө күргәҙмәләр ойоштторола, баш ҡала кинотеатрҙары яңы репертуар әҙерләгән. Шулай уҡ бик күп спорт саралары, һабантуй, Шәжәрә байрамдары уҙасаҡ, ижади коллективтарҙың концерты күрһәтеләсәк, Дуҫлыҡ монументына һәм Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һалыу тантанаһы уҙасаҡ.

Ҡала көнөнә арналған саралар быйыл да традиция буйынса В. И. Ленин исемендәге майҙанда үтәсәк. 12 июндә сәғәт 12-лә унда "Һинең менән ғорурланам, баш ҡалам!" тип аталған балалар концерты күрһәтелһә, шулай уҡ "Оҫталар ҡалаһы" күргәҙмәһендә һөнәрселәр, халыҡ кәсептәре һәм декоратив-ҡулланма сәнғәте оҫталарының, балалар ижадының күргәҙмәһе ойоштороласаҡ.

Киске сәғәт 5-тә "Берҙәмлек-Содружество" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестиваленең гала-концерты күрһәтеләсәк. Унда Ҡытай, Эстония, Көньяҡ Корея, Сербия, Һиндостан, Көньяҡ Африка, Шри-Ланка коллективтары, "Ирәндек" халыҡ коллективы сығыш яһаясаҡ.

Салауат Юлаев майҙанында сәғәт көндөҙгө 2-лә "KFC Battle" спорт һәм музыка фестивале үтәсәк. Унда тотош Уралдың һәләтле балалары һәм шоу-бизнес йондоҙҙары Егор Крид, Саша Шерман ҡатнаша.

ВДНХ-ЭКСПО-ла "Рәсәй - минең тарихым" тарихи паркы асыласаҡ. Был интерактив проект илебеҙҙең үткәненә мауыҡтырғыс сәйәхәттән ғибәрәт. Паркты булдырыусылар Рәсәй тарихын мөмкин тиклем ысынбарлыҡҡа тап килтереп сағылдырыу өсөн барыһын да эшләгән. Рәсем, графика, скульптура, декоратив-ҡулланма сәнғәте һәм Башҡортостандың билдәле оҫталарының фотографиялары ҡуйылған "Арт Уфа - 2017" Икенсе художество форумы ла баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн ҡыҙыҡлы ваҡиға буласаҡ. Күргәҙмә 30 июлгәсә дауам итәсәк. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим һәйкәле алдында беренсе тапҡыр Яҙыусылар берлеге ойошторған Шиғриәт байрамы үтәсәк.

Байрам саралары ҡаланың барлыҡ райондары майҙандарында гөрләйәсәк. Төнгө сәғәт 11-ҙә сағыу салют күкте балҡытасаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тыныс йоҡлар өсөн

❖ Тиҙ йоҡлап китер, йоҡо тәмле булһын өсөн кискеһен яҙыу-һыҙыу, күп уҡыу менән мауыҡмаҫҡа кәрәк.

### Ауыҙ эсе сирҙәренән

❖ Ауыҙ эсе, теш ҡаҙнаһы, теш ауыртмаһын өсөн бүлмә температураһындағы һыу менән оҙаҡ итеп ауыҙҙы сайҡатыу кәрәк.

❖ Ашағас, йоҡо алдынан 1 стакан һыуға 1 балғалаҡ тоҙ һалып, оҙаҡ ҡына ауыҙҙы сайҡағыҙ.

❖ Баш бармаҡ менән имән бармаҡ киҫешкән урынды боҙ менән ышҡығыҙ, ипләп кенә шул урынға 4-5 минут массаж яһағыҙ. Шул саҡта был ауырыуҙар ҙа булмаҫ.

### Һыу ингәндә

❖ Йәй етте, халыҡ тиҙҙән һыу инә башлай. Һыуға инеп сыҡҡас, ҡояшта тормаҫҡа, һыу быуға әйләнә, тәндә тоҙ ҡала, тирене киптерә.

❖ Тәнегеҙ ҡояшҡа тиҙ бирешһә, тәүге һыу инеү көндәрендә ҡомлоҡта 15 минуттан да артыҡ булырға тырышмағыҙ.

❖ Һыу ингәс һөртөнә торған таҫтамалығыҙ йомшаҡ булһын, тире аша төрлө микробтар инеүсән була.

### Шәкәр ауырыуы

❖ Һәр сир, шул иҫәптән шәкәр ауырыуы ла йыл миҙгеле һайын ныҡ һиҙҙерә. Был сирҙән бер аҙ ял итеү өсөн ҡуҙаҡлы көйө ноҡот (фасоль һ.б) борсағын, шыршы еләге япрағын, дегәнәк тамырын 30-ар грамм алып, 200 мл ҡайнар һыуҙа 2 сәғәт төнәтергә һәм ашар алдынан көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Ябығыу өсөн

❖ Ауыҙҙағы ризыҡты иң кәмендә 25 тапҡыр сәйнәгеҙ, ашҡаҙанға ла, ауыҙ ҡыуышлығына ла файҙалы.

❖ Ҡунаҡҡа барыр алдынан өйҙә сейлебешле 2 йомортҡа ашағыҙ, аппетитты баҫа.

❖ Ашап туйғас, сәй менән тәм-том ашамағыҙ, эремсек кенә ашағыҙ.

❖ Ябығам тип көнө буйы ас торорға ярамай. Асыҡмаҫ өсөн эремсек йәки картуфтан ғына төрлө ризыҡ әҙерләп ашағыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Минең өсөн рухи үсеш - һәр кешенең асылында сағыу нур булыуын, һәр кеше камил тәбиғәтле икәнен аңлауҙа. Рухи үсеш - ул аҡыл туплау, тормош мәғәнәһен аңлау, кешеләргә хеҙмәт итеү.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Хәҙисә

Майсур Мөхәммәттең риза булыуын Хәҙисәгә килеп әйтә. Хәҙисә Мөхәммәтте саҡырып ала ла уның кеүек кешене ире сифатында күрергә теләүе тураһында әйтә. Мөхәммәт шатланып риза булыуы, үҙенең Хәҙисәгә булған күптәнге һөйөү тойғоһон, тик, ярлы булғанлыҡтан, был турала һүҙ башларға баҙнат итмәүе тураһында һөйләй. Улар туй көнөн билдәләйҙәр.

Мөхәммәт үҙенең олаталарынан рөхсәт һорай. Ул ваҡытҡа Әбд-әл-Мотталибтың дүрт кенә улы иҫән була - нәҫел башлығы Әбү Талиб; Хашим нәҫелдәре араһында иң байы булған Әбд-әл-Узза; көсө, тәүәккәллеге һәм батырлығы менән ғәрәп донъяһында дан алған Хәмзә һәм Зәмзәм шишмәһен һаҡлаусы Ғәббәс. Әйткәндәй, Ғәббәс олатаһы Мөхәммәттән ике йәшкә генә өлкән була. Олаталары Мөхәммәттең ҡарарын хуплай. Хәмзә олатаһы Мөхәммәт менән бергә Хәҙисәнең атаһына ҡыҙын яусыларға бара.

Хәҙисәнең атаһы тәүҙә был никахҡа ҡаршыраҡ була, тик Хәҙисә уға яусылар килер алдынан уҡ үҙ ҡарарынан тайпылмаясағы һәм атаһына барыбер рөхсәт бирергә тура киләсәге тураһында ҡәтғи рәүештә әйтеп ҡуя. Һәм атаһына рөхсәт бирергә тура килә.

Туй Хәҙисәнең йортонда уҙғарыла. Мәжлес бик матур үтә, унда ике яҡтың да бөтөн туғандары ҡатнаша. Мөхәммәт, шулай уҡ Хәлимәләрҙе лә туйына саҡырып, һыйлап, ҡырҡ һарыҡ бүләк итеп ҡайтара.

Мөхәммәт менән Хәҙисә араһында мөнәсәбәт бик йылы һәм ихлас була. Улар бер-береһен бик ныҡ ихтирам итә, бер-береһенә тулыһынса ышана. Мөхәббәт тойғолары саф була. Мөхәммәт һәр ваҡыт үҙ принциптарына тоғро ҡала. Шуларҙың береһе - нисек кенә ауыр булмаһын, кеше һәр ваҡыт тик дөрөҫөн һөйләргә тейеш, тигән инаныу. Дөрөҫөн һөйләү иһә - ҡылған эштәрендә генә түгел, ниәттәрендә лә йәшермәү. Тағы ла бер принцип - үҙ ғаиләңә тоғролоҡ. Ят ҡатынға мөхәббәт хисе йәки енси теләк тулы ҡараш ташлау ҙа ғаиләңә ҡарата хыянат, тип һанай ул.

Эштәр менән йөрөгәндә, Мөхәммәт ҡатынына ҡасан ҡайтырын һәр ваҡыт әйтеп китә. Ваҡытында ҡайтмаһа, Хәҙисә хеҙмәтселәрен уны эҙләргә ебәрә торған була. Хәҙисә көнләшмәй, Мөхәммәткә тулыһынса ышана, тик һәр ваҡыт уның өсөн борсола һәм хәүефләнә. Хеҙмәтселәр иһә, Мөхәммәтте тапҡас, уны өйгә саҡырмай, ә ҡайтып, Хәҙисәгә уның имен-һау булыуы тураһында хәбәр итә.

Ҡырҡ йәшен тултырған Хәҙисә өсөнсө иренән бала таба алырына ышанмай. Тик юҡҡа ғына ҡурҡа. Тәүҙә малайҙары тыуа. Уға Әл-Ҡасим тигән исем ҡушалар. Тик ул ике йәшендә үлә. Унан һуң Хәҙисә дүрт ҡыҙ таба - Рухия, Зәйнәб, Өммөгөлсөм һәм Фатима. Шунан һуң тағы ике ул тыуа - Әбдаллах менән Таһир. Тик был малайҙар ҙа бик иртә донъя ҡуя.

Ул үҫтерә алмауына Мөхәммәт бик көйөнһә лә, ҡыҙҙарын ихлас яратып тәрбиәләй. Өсөһө Мәккә ҡалаһының бай һәм абруйлы кешеләренә кейәүгә сыға, ә Фатима ата өйөндә тороп ҡала.

**(Дауамы бар).**

ӨФӨ БАШҠОРТО

# КЕШЕЛӘР...

## тормош мәғәнәһен тапһын

**Баш ҡалала үҫкән милләттәштәр араһында төрлө һөнәр кешеләрен осратырға мөмкин. Ә бына кеше күңелен аңлаусылар, уларға рухи һәм шәхси үҫеш йәһәтенән ярҙам итеүселәр, моғайын, бик һирәктер. Бының өсөн тәү сиратта кешеләрҙе яратырға, улар күңелен аңларға, проблемаларын асылың аша үткәрергә, уларға камиллашыу һәм үҫеш юлын күрһәтеү кәрәктер. Сираттағы әңгәмәсебеҙ, кешенең шәхси үҫеше һәм был тормоштағы тәғәйенләнеше буйынса эксперт, психолог, ҡатын-ҡыҙҙар курстарын һәм консультацияларын ойоштороусы, педагогия фәндәре кандидаты Гөлнәзирә ЙӘНТҮРИНА - нәҡ ана шундайҙарҙан.**



**➔ Бала саҡтағы хәтирәләр - иң яҡтыһы һәм иң сағыуы, улар кешене ғүмер буйы оҙата бара. Үҙегеҙҙең бала сағығыҙҙағы Өфөнө нисек итеп хәтерегеҙҙә һаҡлайһығыҙ. Ғөмүмән, баш ҡалалағы бала саҡ ниндәй ул?**

- Минең бала сағым бай һәм сағыу хәтирәләргә тулы, сөнки атай-әсәйем театрҙарға, башҡа мәҙәни, шулай уҡ төрлө сараларға йөрөргә яратты. Шуға күрә, беҙ бала саҡта уҡ тулы мәҙәни программа күреп, шул мөхиттә ҡайнап үҫтек. Ул ғына ла түгел, шәхсән үҙем бик күп түңәрәктәргә йөрөнөм: музыка мәктәбенә, баскетбол, теннис, бадминтон. "Мираҫ" коллективында бейеү менән етди шөғөлләндем. Шулай ҙа иң сағыу хәтирәләрем ғаилә менән бәйле. Һәр ял көндәре өйөбөҙҙә ғаилә концерттары үтте. Атайым, республикала билдәле шәхес, биология фәндәре докторы Сәфәрғәле Йәнтүрин һәм ағайым Урал ҡурайҙа, әсәйем Вилүрә Зиннәт ҡыҙы мандолинала уйнай, ә мин бейейем, төрлө күренештәрҙе сәхнәләштерәм, пародиялар яһайым. Атайым халыҡ йырҙарын өйрәтә. Беҙ йыш ҡына ғаилә ансамбле менән төрлө сәхнәләрҙә, телевидениела сығыш яһай инек. Ҡыштарын иһә һәр ял көндәре саңғыла шыуҙыҡ. Теләйбеҙме, юҡмы, әммә был яҙылмаған ҡағиҙә ине. Өйҙә тик башҡортса ғына һөйләштек һәм был традиция әлегәсә дауам итә. Атай-әсәйем телгә, милли мәҙәниәткә һөйөү тәрбиәләй алған һәм шуға ла ағайым да, мин дә, һеңлем дә, ҡайҙа ғына йәшәһәк тә, барыбер ҙә илһөйәр, телһөйәр булып ҡалабыҙ.

**➔ Тел төбөгөҙҙән аңлашылыуынса, һеҙ тәбиғәтте бик ныҡ яратаһығыҙ. Мегаполиста һуңғы йылдарҙа йәшелләндерәү эштәре бик әүҙем бара, ҡала хакимиәте башлығы ла төп маҡсаттың ҡала эсендәге парк түгел, ә парк эсендәге ҡала булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Һеҙ ошо үҙгәрешәте тояһығыҙмы?**

- Атайым эколог булғанлыҡтан, өйҙә һәм тәбиғәттә уның талап-кәңәштәрен аныҡ үтәнек. Хатта бала саҡта ихатала "Йәшел патруль" ойоштороп, уның капитаны ла булдым әле. Ғөмүмән, тәбиғәт менән бәйләнешебеҙ бала саҡтан килә һәм әле лә дауам итә. Олимпик паркты, "Юность" бассейнын яратам. Был урындар минең өсөн көс сығанағы булып тора. Баш ҡала эсендәге үҙгәрештәр, әлбиттә, күңелгә бик яҡын. Ә инде парк эсендәге ҡала идеяһын хупларға һәм ошо ваҡыттың еткәнен көтөргә генә ҡала.

**➔ Атайығыҙ тураһында шундай итеп һөйләйһегеҙ, тимәк, һеҙҙең ғаиләлә лә, башҡорттарҙа борон-борондан килгән атай абруйын һаҡлау йолаһы - беренсе урында тора?**

- Ысынлап та, атай абруйы көслө һәм уның һүҙе һәр кем өсөн ҡанун. Мин ҡыҙ кеше булараҡ, уны инандырырлыҡ итеп нисек әйтергә, ниндәй һүҙҙәр табырға тип уйлана торғайным һәм был минең өсөн дипломатияға беренсе аҙымдарым булғандыр. Ғөмүмән, беҙҙең ғаилә нигеҙендә ир-атҡа ихтирамлы ҡараш йәшәй. Шуның өсөн ағайым да иң-иңе. Ғөмүмән, беҙҙә ғаилә культы ҙур урында тора. Бәлки, шуғалыр ҙа, барыбыҙ ҙа ныҡ татыу һәм дуҫбыҙ, һәр саҡ бер-беребеҙгә ярҙам итәбеҙ. Атай-әсәйем - ике һоҡланғыс көслө, сағыу, һәләтле шәхестәр. Атайым көслө рухлы, һәр саҡ позитив, барыһына ла ярҙам итергә тырышыусы кеше. Уны барыһы ла ярата, һәм ул беҙҙең өсөн аҡыл, нәзәкәт һәм һиҙгерлек өлгөһө булып тора. Әсәйем - тәбиғәте менән фиҙаҡәр. Ул шул тиклем асыҡ һәм бар көсөн кем өсөндөр сарыф итергә тейеш. Бөтөн нәмәне йөрәгенә яҡын ҡабул итә. Атай-әсәйемә беҙҙең хаҡта хәстәрлек күргәндәре, терәк булғандары, аҡыллы кәңәштәре, ярҙамдары өсөн мең рәхмәтлемен. Ә ағайым менән һеңлем - улар Аллаһы Тәғәлә бүләге! Ғаиләлә татыулыҡ, тыныслыҡ, бер-берең тураһында хәстәрлек булғанда ғына тормош түңәрәк була. Шундай ғаиләлә тыуыуым менән дә бәхетлемен, тип әйтә алам.

**➔ Һеҙ үҫкәндә баш ҡалала башҡортса белем алыу мөмкинлеген биргән мәктәптәр ул тиклем күп түгел ине. Шулай ҙа белем үрҙәрен ниндәй мәктәптә яуланығыҙ?**

- Баш ҡаланың 20-се мәктәбендә (хәҙер Ф. Мостафина исемендәге Башҡорт ҡала гимназияһы) уҡыным. Ул замандарҙа мәктәп бөтөнләй икенсе ине. Беҙ, уҡыусылар, белем усағында үҙебеҙҙе хужа итеп тойҙоҡ. Ҡайһы берҙә, хатта малайҙар дәрес ҡалдырһа, улар менән һөйләшеүҙе уҡытыусылар миңә йөкмәтә торғайны. Ниңәлер егеттәр мине тыңланы. Бәлки, улар менән ихтирамлы һөйләшкәнгәлер. Ғөмүмән, мәктәп йәшенән ирек һөйөүсән булдым. Әгәр миңә ихтирамһыҙ мөнәсәбәт күрһәтһәләр, ундай кешеләрҙе тыңламай инем.

**➔ Бик йыш Башҡортостандан ситтә, хатта сит илдәрҙә булаһығыҙ. Башҡорттарҙың менталитеты башҡаларҙан нимәһе менән айырыла?**

- Эйе, бәхеткә күрә, сәфәрҙә бик күп йөрөйөм. Сит илдәрҙә лә дуҫтарым бик күп. Ситтә йәшәүҙең үҙенең ыңғай һәм кире яҡтары бар, әммә менталитеттарҙы сағыштырыуы бик ауыр. Донъя бик ҙур һәм киң, шуға унда төрлө менталитеттар, төрлө милләттәр мотлаҡ булырға һәм улар бер-береһен ҡабатламаҫҡа тейеш. Шулай ҙа халҡыбыҙҙың турайып баҫыуын, элекке рухын кире ҡайтарыуын, рух азатлығына өлгәшеүен һәм үҙ-үҙенә ышаныуын бик теләр инем. Бының өсөн рухи үҫеш кәрәк. Рухи үҫеш тигәндә күптәр динде күҙ алдына килтерә. Минең өсөн рухи үҫеш - һәр кешенең асылында сағыу нур булыуын, һәр кеше камил тәбиғәтле икәнен аңлауҙа. Рухи үҫеш - ул аҡыл туплау, тормош мәғәнәһен аңлау, кешеләргә хеҙмәт итеү. Халҡымдың ғәфләт йоҡоһонан, битарафлыҡтан уянып, аңлы рәүештә йәшәй башлауын, аңда ҡалыплашҡан сикләүҙәрҙән арынып, мөмкинлектәр, муллыҡ, үҫеш алдында азат булыуын бик теләйем. Был, моғайын, һәр башҡорттоң хыялылыр. Мин ошоға нисек өлгәшеү юлын беләм. Тәү сиратта, был тормошҡа ни өсөн килгәнеңде аңлау кимәлен күтәрергә кәрәк. Ике вузда эшләгәнемдә миңә шул тиклем ауыр ине. Унда минең мөмкинлектәрем сикләнде, күңелем киңлек, ирек талап итте. Бөгөн, шөкөр, үҙем ятраҡан һәм күңелем тартҡан эш менән шөғөлләнәм. Был - минең тәғәйенләнешем: кешеләргә үҙҙәрен асырға, үҙҙәренә ышанырға, тормош мәғәнәһен табырға, ауыр хәл-тороштан лайыҡлы сығырға ярҙам итәм. Йөҙләгән кеше тормошон үҙгәртте. Шуға ла үҙ өҫтөңдә эшләү һәм тормошоңдо үҙгәртеү мөмкинлектәре тураһында тулы ышаныс менән һөйләйем. Бөгөн хатта Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында ғына түгел, Болгарияла, Швейцарияла семинарҙар үткәрәм.

**➔ Швейцария тигәндән, һеңлегеҙ Айһылыу шунда йәшәй һәм йыл һайын бөтөн ғаиләгеҙ менән унда һабантуй ойоштороуҙа һәм үткәреүҙә ҡатнашаһығыҙ...**

- Һеңлем ут бөрсәһе бит ул, шуға сит илдә лә уның һабантуйҙар ойоштороуына аптырайһы түгел. Ә беҙ уға ярҙам итеү өсөн ғаиләләребеҙ менән Башҡортостандан барабыҙ. Быйыл мин генә, ваҡыты семинар менән тап килеп, бара алманым, ә атай-әсәйем, ағайымдар унда. Барыбыҙ ҙа илһөйәрлек рухында тәрбиәләнгәнбеҙ һәм ҡайҙа ғына булһаҡ та башҡорт мәҙәниәтен пропагандалап, төрлө саралар үткәрәбеҙ һәм үткәрәсәкбеҙ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Волга һәм Көньяҡ Урал далаларында йәшәүсе ҡыпсаҡтар, бәшәнәктәр, һуңынан половецтар, һуңғы сиктә бер халыҡты - башҡорттарҙы тәшкил итә.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БАБИЧТЫҢ ДУҪТАРЫ

## Төхвәт Ченәкәй

**Икенсе хат.**

*Исҡужин! Мин 19 августа ғына юлға сыға алам. Мин кеҫәнән 170 һум аҡсаны алдырып, туҡталып ҡалдым. Яңынан юллыҡ аҡса йыйыр өсөн йүгерергә тура килде. Мин әле һау, Ҡаҙандан һин киткәндәгесә. Хәҙер мин Һамар арҡылы туп-тура һиңә адрес биргән ауылға, колхозға ҡайтам. Сентябрҙең 3-дә генә унан китәм. Әгәр һин керһәң, һинең менән элегерәк китергә мөмкин булыр. Һин Ырымбур - Пермь юлы менән үткәндә Чернотрок* (Черный Отрог - **Г.С.**) *ыстанцияһына төшөп ҡал да, Никитинский тигән ауылға мине һорап бар. Беҙҙең ауылды, Никитинскийҙы, татарса Эрәдүт* ("Редут" һүҙенән, Һаҡмар сиге буйында урынлашҡан казактар йәшәгән ауылдарҙың күбеһенә хәрби манерҙа редут һүҙен өҫтәп әйткәндәр - **Г.С.**) *тип йөрөтәләр. Ыстанцияла беҙҙең ауыл кешеләре йәки күрше ауылдар күп була. Шуларға 2-3 һум биреп, ултырып ҡайтып була. Һин беҙгә керер китергә тырыш. Беҙҙең ауыл бик ҡыҙыҡлы, күңелле татар ауылы. Унда иң элек төҙөлгән колхоз бар. Ауыл халыҡ әҙәбиәтенә бик бай. Ултырған урыны Суҡ буйы. Бер аҙ ҡунаҡ булырһың. Килеп уҙып китмә. Бәлки, Ҡаҙанға бергә ҡайтырға тура килер. Мин был хатта башҡа турында яҙмайым. Һинең Бабич турында һәм башҡа турындағы эштәрең менән ҡыҙыҡһынам. Шуның өсөн һинең менән юлда осрашаһы килә. Һау бул. Тиҙ күрешкәнсә. 7.08.1934.*

*Адрес: Саракташ*
*Сред. Волжский край*
*дер. Никитинской.*
*Ченакаю Т. Г. Был адрес менән сентябрь башынаса хат яҙырға йәки мине осратырға була".*

Аңлауығыҙса, Шәйехзада Бабичтың шиғырҙарын туплауҙа Төхвәт Ченәкәй Зәбих Исҡужинға ҙур ярҙам күрһәтә. 1935 йылдың аҙағында йәш ғалим Бабич ижады буйынса диссертацияһын тамамлай. Әммә ғилми хеҙмәт төрлө ҡаршылыҡтарға осрап, яҡланмай ҡала. 1936 йылдың ноябрендә Зәбих Исҡужин вафат була. Төхвәт Ченәкәй 1935 йылда Ҡаҙанды ҡалдырып, Үзбәкстанға китә. Үзбәкстан Төхвәт Ченәкәй өсөн һуңғы төйәккә әйләнә. Алыҫ юлға сығыр алдынан Шәйехзада Бабичтың ижадын өйрәнеүсе йәш дуҫына иҫтәлеккә тип фото-



рәсемен һәм рәсеме артына шиғырын да яҙып ҡалдыра ул.

*Ғүмер тарихына күңел һалып,*
*Уйлап торһон иптәш Исҡужа!*
*Атылып осҡан аҡсарлаҡтар кеүек,*
*Яҡты көндәр бигерәк тиҙ уҙа.*
*Аҙ булһа ла йәшлек ағымында*
*Бергә үҫтек, бергә эшләнек,*
*Шул көндәрҙән ҡалған шәүлә булып*
*Күренеп торһон ошо иҫтәлек.*

Шулай итеп, 1934 йылдың йәйендә яҙылған хаттар хатты яҙыусынан да, хаттың эйәһенән дә ғүмерлерәк булып сыҡты. Улар яңы быуаттың яңы уҡыусыларын тапты.

## Ҡасим Ғирфанов

Шәйехзада Бабичтың дуҫтарының береһе - Ҡасим Ғирфанов. Тарихсы, тәржемәсе, публицист, шағир. Улар "Ғәлиә" мәҙрәсәһендә бер осорҙа уҡыйҙар. Мәҙрәсәлә уҡығанда уҡ үҙен көслө тарихсы итеп танытҡан Ҡасим Ғирфановтың публицистикала ла ҡәләме шыма була. Бабич мәҙрәсәне 1916 йылда тамамлай, ә Ҡасим Ғирфанов уҡытыу процесы менән риза булмаған шәкерттәр хәрәкәтенә ҡушылып китеү сәбәпле, 1913 йылда мәҙрәсәнән ҡыуыла. 1914 йылда ваҡытлы матбуғат өсөн күп кенә материалдар әҙерләй, ләкин унының мәҡәләләре цензура аша үтә алмай, шунлыҡтан баҫылмайҙар. Ошо уҡ йылдың йәйендә Өфөнө ташлап, тыуған ауылына, Ҡаҙан губернаһының Чистополь өйәҙе Иҫке Үтәмеш ауылына ҡайта.

Шәйехзада Бабич менән улар һуңғы тапҡыр Силәбелә осраша. Бабич Силәбегә 1918 йылдың йәйендә Башҡорт Хөкүмәте менән бергә килә, ә Ҡасим Ғирфанов ошо ҡалала башта уҡытыусы булып эш башлай, аҙаҡ революция тулҡындарына ҡушыла. Ул осорҙоң иң аяныслыһы шул: ҡасандыр "Ғәлиә"лә бер осорҙа уҡыған шәкерттәр, әҙәбиәткә бер осорҙа килгән талантлы шағирҙар фронт һыҙығының төрлө яғына барып эләгәләр. Силәбелә осрашҡан ике дуҫтың береһе аҡтар яғында һуғышҡан Башҡорт Хөкүмәте ағзаһы, икенсеһенә ҡыҙылдар идеологияһы яҡын булып сыға.

Шәйехзада Бабич менән осрашырҙан алда Ҡасим Ғирфанов Силәбелә Сәғит Мерәсов менән күрешә. Сәғит Мерәсов уға ҡаланан китергә тәҡдим итә һәм башҡа исемгә яңы паспорт алып бирергә мөмкинлеге бар икәнен дә белдерә. Аҙаҡ унының менән осрашырға Шәйехзада Бабич килә. Ҡасим Ғирфановтың шәхси архивында һаҡланған ҡайһы бер документтар Вилданов фамилияһына бирелгән. Тимәк, был фамилия менән документты уға Сәғит Мерәсов эшләп бирә. Илдә барған буталсыҡ хәлдәрҙә бер-береңде һаҡларға тырышыу, моғайын, ошо аҙымдарға этәргәндер.

1925 йылдан Ҡасим Ғирфанов ҡабат үҙ фамилияһына ҡайта. Башҡортостан Совет партия мәктәбендә уҡыта. Ижад итә, тәржемә эше менән шөғөлләнә. Мәҡәләләренең күбеһе Сәғит Мерәсов мөхәррирлегендә сыҡҡан "Башҡорт аймағы" журналында баҫыла. Ошо журналдың 1928 йылғы 5-се номерында Башҡорт Хөкүмәтенең Советтар яғына сыҡҡандағы рәсми документтарын үҙенең "Башҡорт ғәскәрҙәренең Советтар яғына сығыуҙары мәсьәләһе тирәһендә" тип аталған мәҡәләһендә бирә. Мәҡәләлә бирелгән 8 рәсми документтың "РСФСР Хөкүмәте вәкилдәре һәм Башҡортостан Хөкүмәте вәләкәтенең 1918 йылдың 18 февралендә булған ултырышының протоколы" айырыуса иғтибарға лайыҡ. 1932 йылда Сталин исемендәге КУТВ (Коммунистический университет трудящихся Востока) аспирантураһын тамамлай. 1933 йылдың июлендә Башҡортостан Милли-мәҙәни фәнни-тикшеренеү институтының директор урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. 1937 йылда Урта Азияға сығып китә. 1946 йылда тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта.

**Гөлсәсәк САЛАМАТОВА,**
**филология фәндәре кандидаты,**
**З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты.**

**(Аҙағы. Башы 22-се һанда).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔1768-1781йылдар - Ырымбур губернаторы Иван Андреевич Рейнсдорп идара иткән. Ябай һалдаттан генерал-поручик званиеһына тиклем хеҙмәт иткән. Тәүәккәллек сифаттары етешмәгәнлектән, 30 меңләп ҡалмыҡ тирмәһенең Ҡытайға күсеүенә юл ҡуя, башланып киткән Пугачев хәрәкәтенән баҙап төшә, шулай ҙа Ырымбурҙы һаҡлап ҡала ала һәм ғүмеренең ахырына тиклем Екатерина Икенсенең ышанысы менән файҙалана. Әбей батша 1780 йылда уны Ырымбур һәм Өфө өлкәләрен үҙ эсенә алған Ырымбур наместничествоһы генерал-губернаторы итеп тәғәйенләй.

➔1769-1771 йылдар - Уралда П.С. Паллас, И.И. Лепехин һәм И.П. Фальк етәкселегендәге Академик экспедициялар эшләгән. Ғалимдар Уралдың тәбиғәт шарттары һәм тәбиғи ресурстары тураһында ҡиммәтле материалдар туплаған, улар күп томлы хеҙмәттәрҙә баҫылып сыҡҡан.

➔1769 йыл - Е. Демидовтың Ҡағы заводы төҙөлә.

➔1769 йылдың 13 феврале - рус яҙыусыһы И.А.Крылов тыуған, бала сағы Ырымбурҙа үтә.

➔1770 йыл - Ырымбурҙан 150 км самаһы урында, Ағиҙел ярында старшина Юлдаш Ҡотлин ташкүмер ятҡылығы таба.

➔1770-1771 йылдар - Урал арьяғында йәшәүсе ҡалмыҡтар баш күтәрә. Уларҙың восстаниеһын баҫтырыу өсөн батша хөкүмәте башҡорттарҙы файҙалана. Баш күтәреүселәрҙе эҙәрләп, башҡорттар Ҡытай сигенә тиклем барып етә.

➔1772 йыл - Е. Демидовтың Өсән заводы төҙөлә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Ҡыпсаҡтар

Бөйөк күсенеү халыҡтары араһында (һундар хәрәкәте) ҡыпсаҡтар мөһим урынды алып торған. Беҙҙең эраның 155 йылдары тирәһендә Урал алдын биләгән төрки телле хунну ҡәбиләләренең II-IV быуаттарҙа урындағы башҡа ҡәбиләләр менән аралашыуы һөҙөмтәһендә күсмә халыҡ - һундар барлыҡҡа килә. "Һундар" атамаһы хунну халҡының көнбайыш тармағын билдәләр өсөн ҡабул ителгән. Ҡобанлыҡ йылғаһы атамаһы боронғо төрки атамаларҙың береһе булып иҫәпләнә. Бында һундар ҡағанатының, ҡыпсаҡтарҙың тәүге йәшәгән урыны. Һөҙөмтәлә икһеҙ-сикһеҙ территория фарсы һәм ғәрәп яҙыусылары тарафынан Дәште Ҡыпсаҡ, йәғни "Ҡыпсаҡ далаһы" тип атап йөрөтөлә. Грум-Гржимайло ҡыпсаҡтарҙы бом ҡәбиләһенең динлин тармағы тип һанаған. 630 йылда ҡыпсаҡтарҙың бер өлөшө ҡаңлылар менән ҡушылып, ҡомандар йәки половецтар (һары ҡыпсаҡтар) барлыҡҡа килә (Г..Е.Грум-Гржимайло, 1926, 59-сы бит). Башҡорт халҡы барлыҡҡа килеүендә Ҡыпсаҡ хандың улы Ылағ бей (Ылаш бей) вариҫтары ҡатнаша. Башҡорттар составындағы ҡара ҡыпсаҡтар урта быуаттарҙағы Уран Тоҡсаба вариҫтарына барып ялғана.

Халыҡтарҙың Бөйөк күсенеүе дәүеренән Дәште Ҡыпсаҡ (Ҡыпсаҡ, половец далалары) һәм унының ҡағанаттары башлана. Бында ҡыпсаҡтар ҡаңғарҙар (ҡаңлылар) менән ҡушылып, көнсығышта ҡыпсаҡтар, Европала - ҡомандар, Руста половецтар тип аталған халыҡты барлыҡҡа килтерә. Боронғо заманда ҡыпсаҡтар көнсығыш Төрөк ҡағанаты составында була. Улар Енисей йылғаһы башынан Днепрға һәм Днестрға тиклем, Ҡаҙағстандың төньяҡ-көнбайышын, Себерҙең көньяҡ-көнбайышын һәм көньяҡ Уралды биләй. Иртыш буйы далаларында йәшәгән ҡыпсаҡтар ҙа X быуатта көньяҡ Уралға йүнәлә. Көньяҡ Уралда улар уғыр ҡәбиләләре менән ҡушылып, Башҡорт иленең көнбайышында тороп ҡала. Уларҙы урыҫтар бәшәнәктәр тип атаған. Г.Е. Грум-Гржимайло мәғлүмәттәре буйынса ҡыпсаҡтар "башҡа төркиҙәрҙән динле, ҡыйыу, етеҙ хәрәкәте, матур һындары, матур йөҙҙәре һәм мәрхәмәтле булыуҙары" менән айырылған.

Үҙаллы этномәҙәни берәмек булараҡ ҡыпсаҡтар VIII быуаттың уртаһында телгә алына. Был ваҡытта улар көньяҡ Уралда һәм Волга аръяғы далаларында сәйәси хакимлыҡҡа эйә була. Был территориялар тулыһынса ҡыпсаҡтар ҡарамағында була. Ҡыпсаҡтар бында нығынғандан һуң көнбайышҡа һәм төньяҡ-көнбайышҡа йүнәлеш ала.

Грек яҙыусылары бәшәнәктәрҙе патцинактар ("бәжднәктәр") йәки пачинактар тип атаған, ә боронғо урыҫ йылъяҙмаларында "бәшәнәктәр Урал башҡорттары ерҙәрендә элек-электән йәшәгән" (С. Ғәлләмов). Көнбайыш яҙыусылары (Дитмар Брунон) бәшәнәктәрҙе Pezineigi и Pezenegi; Польша хроникаларында - Piecinigi, Pincenakili; венгр сығанаҡтарында Bessi, Bysseni, Picenati, Besenyo тип атаған. Ғәрәп яҙыусылары бәшәнәктәр илен Бәшнәк тип яҙған. Әл Бәкер һөйләүенсә, унының төньяғында Kifd-jak (Ҡыпсаҡ) ере, көньяҡта Хазар, көнсығышта Гузия, көнбайышта славяндар йәшәгән. Константин Багрянородный яҙыуынса, "бәшәнәктәр тәүҙә Волга һәм Яйыҡ йылғаһы буйында йәшәгән... Уздар хазарҙар менән берләшеп, бәшәнәктәргә һөжүм итеп, үҙ еренән ҡыуып ебәрә. Волга һәм Көньяҡ Урал далаларында йәшәүсе ҡыпсаҡтар, бәшәнәктәр, һуңынан половецтар, һуңғы сиктә бер халыҡты - башҡорттарҙы тәшкил итә.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Ни өсөн беҙ Бөйөк Ватан һуғышында шундай ҙур юғалтыуҙар кисергәнбеҙ, әммә еңеп сыҡҡанбыҙ? Сөнки һәр кем аңлы рәүештә үҙенең тыуған төйәге өсөн көрәшкән. Әгәр илһөйәрлектән яҙһаҡ, әлбиттә, юғалып ҡаласаҡбыҙ.***



**Хәбәр ителеүенсә, "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире, шағир, журналист Азамат Рәмил улы ЮЛДАШБАЕВ менән З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының кафедра мөдире, Башҡортостан Республикаһының Ҡурайсылар берлеге рәйесе Артур Борхан улы ҒАЙСАРОВ күптән түгел 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына арналған "Ҡаһармандар эҙе буйлап" автомобиль сәйәхәтендә булып ҡайттылар. Әңгәмәбеҙ ошо сәйәхәт тәьҫораттары тураһында һәм… ул турала ғына ла түгел.**

# ЙӘШТӘРГӘ ЯРҘАМ ҡамасаулама ла

**Азамат Рәмил улы, һеҙҙе заман менән бергә атлаусы йәмәғәт эшмәкәре, тип тә беләбеҙ. Ә һеҙ үҙегеҙҙе кем тип тояһығыҙ?**

**А. Юлдашбаев:** Сәйәхәтсе типтер, моғайын. Мин - юлсы, мосафир. Ни өсөн тигәндә, беҙ, кешеләр, бөтәбеҙ ҙә - мосафирҙар: был тормош буйлап сәйәхәт менән үтәбеҙ, сәфәр ҡылабыҙ. Асылда, тыуым - юлдың, сәфәрҙең тәүге аҙымы булһа, ауыл осондағы ҡайынлыҡҡа тиклемге һуңғы юлыбыҙ иһә - ер йөҙөндә үткән аҙаҡҡы сәйәхәтебеҙ. Башланмыштан ахыр юлға тиклем туҡтауһыҙ сәфәр ҡылабыҙ. Ә инде сәфәрҙең эстәлеген нимә менән тултырыу - һәр кемдең үҙ ихтыярында, үҙ ҡарамағында. Беҙ уны эшмәкәрлек, һөнәр, уҡыу, хеҙмәт итеү менән, йә булмаһа, телевизор ҡарап ултырыу менән тултыра алабыҙ.

**Артур Борхан улы, юғарыла һанап киткән вазифаларығыҙҙан тыш, һеҙҙе талантлы ҡурайсы тип тә беләбеҙ. Ә һеҙ үҙегеҙҙе кем тип тояһығыҙ?**

**А. Ғайсаров:** Ҡурайсы тип тоям, әлбиттә. Азамат Рәмил улы менән килешәм. Ысынлап та, беҙ - юлаусы һәм юлыбыҙҙы ни менәндер тултырабыҙ. Мин юлымды ҡурай моңо менән байытам. Ҡурай сәнғәтен һаҡлау, ниндәйҙер кимәлдә уны камиллаштырыу юлында булыу һәм йәштәргә ошо мираҫты ҡалдырыу, уны яңы кимәлгә күтәреү - төп маҡсатым. Бәлки, беҙҙең тырышлыҡтар, киреһенсә, ҡасандыр яуланған һәм йылдар һуҙымында юғалтылған юғары кимәлгә табан хәрәкәт кенәлер?..



**Күптән түгел һеҙ оло сәфәрҙән ҡайтып төштөгөҙ. Бөгөнгө осрашыуыбыҙҙың төп маҡсаты ла ошо сәфәрҙән алған тәьҫораттар тураһында һөйләшеү ине...**

**А. Юлдашбаев:** Эйе, әле генә сәфәр эсендәге бер сәфәрҙән, йыраҡ юлдан, Волга-Дон ярҙарынан ҡайттыҡ. Башта шуны әйтәйем әле: ҡәбер янында ҡурай уйнау йолаһы элек булғанмы, юҡмы, белмәйем. Әммә беҙ үҙебеҙгә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы үткән юлдан үтергә һәм ошо юлдағы 9 туғандар ҡәберлегендә туҡтап, имам доға уҡығандан һуң мотлаҡ ҡурай уйналырға тейеш, тигән маҡсат ҡуйғайныҡ. Воронеж өлкәһенең Деев утарында совет яугирына ҡуйылған һәйкәл эргәһендә ҡурай тыңлап торғанда, бер уй башыма килде: ҡасандыр батша, туҡтауһыҙ ихтилалға күтәрелгәндән һуң, ҡорал эшләмәһендәр, тип, башҡорттарға тимерселекте тыйған. Батшаның ахмаҡлығы инде был. Ул беҙҙең төп ҡоралды белмәгән. Әгәр ҙә шул ваҡытта ул тимерселекте лә, үҙе тыйған башҡа нәмәләрҙе лә ҡалдырып, ҡурайҙы ғына тыйған булһа ла, бөгөн башҡорт булмаҫ ине. Шуға күрә, милләтебеҙҙең төп ҡоралдарының береһе ул ҡурай. Ҡурай, беренсенән, быуындан-быуынға милли хәтерҙе, икенсенән, рухты, өсөнсөнән, халҡыбыҙҙың ҡеүәтен еткереүсе. Ҡеүәт тигәндәй, ҡурай уйнағанда, иғтибар иткәнһеңдер, Артур, уның тауышын ишетеп, беҙ, башҡорттар ғына үрә баҫманыҡ, хатта казактар ҙа "смирно" баҫып торҙо. Бына ҡурайҙың ҡеүәте ниндәй! Тимәк... Ярай, беҙ ҡурайҙы беләбеҙ, "Урал" йырының барлыҡҡа килеү тарихын да легендаларҙан ишеткәнебеҙ бар, "Урал" йыры беҙҙең өсөн - гимн. Тик казактар быны белмәй бит. Әммә улар ҙа ҡурайҙың тылсымлы көсөнән, тылсымлы моңонан әҫәрләнә, улар ҙа, ниндәйҙер кимәлдә, беҙгә рухташ милләт. Казак атамандарының "смирно" баҫыуы ҡиммәт. Бөгөн беҙ рух тураһында, милләт тураһында, илһөйәрлек тураһында һөйләшәбеҙ икән, ҡурайҙы һис кенә лә шул төшөнсәләрҙән айырып ала алмайбыҙ.

**А. Ғайсаров:** Ысынлап та, кем өсөндөр ҡурай биш тишекле көпшә генә. Ә беҙҙең милләт өсөн ул - рух сығанағы. Ул үҙе - илаһи моң. Ҡурайҙа ниндәй генә сит көй башҡарылмаһын, ул көй һәр кемдең, айырыуса, ҡурайҙы ишетеп үҫкән башҡорт кешеһенең күңеленә ятышлы моңға әүерелә. Ҡурай шул яғы менән көслө лә. Уның көсөн мин тап шул үҙенсәлегендә күрәм. Тәү ҡарашҡа, ул ябай ғына уйын ҡоралы. Ҡурайҙа уйнарға өйрәнеү ҡәҙимге кешегә бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Әммә беҙҙең халыҡта булған ген арҡылымы, әллә беҙ белмәгән башҡа сәбәп арҡаһындамы, был музыка ҡоралы ниндәйҙер рухи көскә эйә. Уны, бәлки, һүҙ менән дә аңлатып булмайҙыр... Ҡурай - ул ҡорал, әммә музыка ҡоралы ғына түгел.

Бөгөн һүҙ алып барылған сәфәргә мине лә саҡырыусыларға, уны ойошторорға ярҙам иткән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына оло рәхмәтлемен. Был сәфәр минең өсөн асыш, тетрәнеүҙәр аша алынған тәжрибә, иңемә оло бурыс йөкмәү булды. Ошо юлда халҡыңдың, ата-бабаларыңдың илде һаҡлау өсөн меңәрләп ҡорбан биреүенең бар бөйөклөгөн һәм фажиғәһен тағы ла нығыраҡ аңлағандай булдым. Республикабыҙҙан меңәр саҡрымға алыҫайған һайын, сит яҡтарҙа халҡыбыҙ ҡалдырған эҙҙәргә яҡыная барыуымды тойҙом.

**Был сәфәрҙең ҡурайыбыҙ тураһында шундай ғәжәп һыҡымталар яһатырлыҡ ваҡиғалары менән дә иҫтәлекле булғанын ишеттек. Ә шулай ҙа авто-сәйәхәттең тәүге маҡсаты был булмағандыр?**

**А. Юлдашбаев:** Сәфәргә сығыр алдынан ҡуйылған маҡсат хәҙер, йөрөп ҡайтҡандан һуң, бер ҡатлы ғына булып тойола. Башта Еңеүҙең 72-се йыллығына, легендар дивизияның яуға инеүенең 75 йыллығына арнап, яу үткән ерҙәрҙе күреп ҡайтырға ғына уйлағайныҡ. Волгоградҡа етеү менән маҡсатыбыҙ бөтөнләй үҙгәреүен аңланыҡ. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт итеп, яуҙа ятып ҡалған яҡташтарыбыҙҙың, милләттәштәребеҙҙең исемдәрен барлау, тергеҙеү һәм уларҙы халҡыбыҙ хәтеренә яңынан ҡайтарыу беҙҙең төп маҡсатҡа әүерелде. Йылдар һуҙымында "Шаймуратов генерал"ды йырлап йөрөһәк тә, барыбер ҙә дивизияның яҙмышын бар тулылығында аңлап, кисереп етмәгәнбеҙ, күңел аша үткәрмәгәнбеҙ икән. Беҙ дивизияла нисә кеше һуғышҡаны тураһында күп һөйләйбеҙ, кемдәр ҡатнашҡанын, нисә герой сыҡҡанын да беләбеҙ. Әммә кисерештәребеҙ, тәьҫораттарыбыҙ барыбер тулы түгел. Дивизия тураһында бөтә сығанаҡтарҙы өйрәнеп, уҡыған булһам да, мин дә бер мәғлүмәтте белмәгәнмен. Ул мәғлүмәтте Дон, Волга ярҙарында асыҡланым. Чугунка балкаһы менән унан өҫтәрәк урынлашҡан Санеев балкаһы араһында булғаныбыҙҙа урындағы халыҡ вәкилдәре тарих һөйләй башланы. Башҡорттар түгел, тарихсылар түгел - урындағы халыҡ. "Ошонда ҡарағыҙ. Бына - балка. Ошонда һыбайлылар торған, ошонан дошман самолеттары килгән. Меңәрләгән кеше ҡырылған", - тинеләр... Меңәрләгән кешенең ҡырылыуы - бер. Нисек кенә аяныслы яңғырамаһын, һуғыш булғас, ҡорбандары була инде. Әммә ана шул ҡырылған кешенең нисәүһе билдәле урында ерләнгән? Нисә ҡәберлектә исемдәр күрһәтелгән? Шул уҡ Алексеев утарында 50-ләп фамилия бар. Шуларҙың нисәүһелер мосолман фамилияһы. Лобачёвта 300 кеше ерләнһә лә, 44-енең генә фамилияһы күрһәтелгән. Ростов өлкәһе Обливская ауылында фамилиялар күберәк - 80 самаһы... Ҡалғандарының исем-аты ҡайҙа һуң? Шуға күрә сәфәр барышында маҡсат үҙгәрҙе: бөгөн 112-се башҡорт кавалерия дивизияһының Белая Калитва менән Обливская араһындағы яуҙар ваҡытында ҡалған һәр бер яугирының исемен асыҡларға тейешбеҙ.

**А. Ғайсаров:** Һәр ауыл-ҡалала хәбәрһеҙ юғалғандарҙың исемлеге бар. Кешенең хәбәрһеҙ юғалыуы, бер яҡтан, сәйер күренеш. Кеше энә түгел дә инде, тип уйлап та ҡуяһың. Хәбәрһеҙ юғалған һалдаттар ерләнгән урындарҙа булыу, фажиғәнең масштабын аңлау миңә тетрәндергес тәьҫир итте. Йыл һайын Бөйөк Еңеүгә арналған митингыларҙа теге йәки был тораҡ урында нисә кешенең Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыуы, уларҙың нисәүһе кире әйләнеп ҡайтыуы, нисәүһе һәләк булыуы, күпмеһе хәбәрһеҙ юғалыуы тураһында әйтелә. Ләкин был ҡот осҡос мәғлүмәттәр беҙҙең өсөн ниндәйҙер һан ғына булып ҡабул ителә. Беҙ яу үткән урындарға барып, ата-бабаларҙың ни өсөн хәбәрһеҙ юғалыуын күрҙек. Уларҙың билдәләнмәгән килеш туғандар зыяратына ерләнеүен белдек. Күпме әсәләр хәбәрһеҙ юғалған улдарының ҡайтыуын көтөп ала алмаған. Күпме ватандаш хәбәрһеҙ юғалған атай-олатайҙарының, туғандарының ҡайҙа ерләнгәнлеген әле булһа белмәй йөрөй... Яугирҙарыбыҙҙың исемдәрен мәңгеләштерергә тейешбеҙ!

*АРТУР ҒАЙСАРОВ:*

*Мине ундағы халыҡтың битараф булмауы аптыратты. Суворов әйткәнсә, һуғыш һуңғы яугир ерләнгәндән һуң ғына тамамлана. Улар өсөн һуғыш, ысынлап та, бөтмәгән. Улар һуғышты ныҡ хәтерҙә тоталар. Деев утарында кеше йәшәмәй. Утар 30 йыл элек үк бөткән. Юл да юҡ. Әммә беҙ күргән стела һәм исемлек тә, һалдат һәйкәле лә - ҡараулы, тәрбиәләнгән. Былар барыһы ла урындағы халыҡтың яугирҙарға мөнәсәбәтен күрһәтә. Улар, бында ерләнгән кешеләрҙең туғандары бер мәл килер тип, һаман көтә.*

**А. Юлдашбаев:** Военкоматтарҙа һуғышҡа алынған һәр кем тураһында мәғлүмәттәр бар. Юғалған һалдаттар тураһында мәғлүмәттәрҙе асыҡлауҙың яңы алгоритмдары ла билдәле. Беренсенән, һалдаттың һуңғы хаты, йә "ҡара ҡағыҙы" ҡайҙан килгән? Әлеге мәлдә ул яҡта йәшәгән Владимир Буйдаков тигән яҡташ егет 1 йыл эсендә архивтан 500 кешенең награда ҡағыҙҙарын "күтәргән". Награда тултырыла, ҡайһы һуғыш өсөн, ҡайһы яу өсөн награда биреү ҡарала. Әгәр награда ҡағыҙына "Һәләк булғандан һуң бирелде" тип теркәлгән икән, тимәк, хәбәрһеҙ юғалған һалдаттың ерләнгән урыны ошонда, тигән һүҙ.

Мөмкинлектән файҙаланып, өндәшкем килә: һәр кемдең Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған туғаны барҙыр. Яугирҙарҙың ейәндәре, бүләләре, зинһар, беҙҙең менән бәйләнешкә сыҡһындар. Мәхмүт Сәлимов менән бәйләнешкә сыҡһындар. Военкоматтар менән... Тапһындар мәғлүмәт. Бөгөн һәр кем үҙенең туғаны тураһында мәғлүмәт табыу мөмкинлегенә эйә. Иң мөһиме, Обливскаяла, Морозовскиҙа урындағы халыҡ, урындағы етәкселек, хакимиәт башлыҡтары - бөтәһе лә ярҙам итергә ризалар. "Беҙ һәр бер һәйкәлгә исемдәре асыҡланған яугирҙарҙы өҫтәп яҙасаҡбыҙ. Туғанығыҙҙың ошонда ерләнгәнен иҫбатлағыҙ ғына", - тиҙәр. Бына, илһөйәрлек тураһында һөйләшәбеҙ, ә бит шул уҡ патриотизм ул Ҡыҙыл майҙан, йә Ирәмәлгә булған мөнәсәбәт түгел дә инде. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда һәләк булған олатайыңдың ҡәберен табып, уны

✓ ***Башҡорт - үҙенең башҡортлоғон, казак - үҙенең казаклығын, сыуаш - үҙенең сыуашлығын, мари үҙенең марилығын онотһа, улар кемгә әйләнә? Үҙенең тамырҙарын, нәҫелен, тыуған ерен, тарихын белмәгән маргиналға әйләнә.***

# ИТӘ АЛМАҺАҢ... ҡуй!

## АЗАМАТ ЮЛДАШБАЕВ:

*Бөгөн башҡорт йәштәрендә күҙәтелгән рухи күтәренкелек беҙҙең милләттә күптән булғаны юҡ ине. Бәлки, 1919 йылдан бирле булмағандыр. Башҡорт йәштәренең бөгөнгө рухи күтәренкелеге ул, моғайын, 100 йылға бер тапҡыр күҙәтелә торған күренештер. Улар уҡымышлы, белемле, зиһенле һәм, беҙҙең быуындыҡылар һымаҡ, ике ҡатлы стандарттар менән эш итмәйҙәр. Улар үҙҙәренең фекерен ярып әйтә белә. Иң мөһиме, улар ниндәйҙер графаға билдә ҡуйыр өсөн, исем өсөн эшләмәй, улар аныҡ эштәр менән шөғөлләнә.*



барып күреп, уның рухына доға уҡыу ҙа - илһөйәрлек...

Беҙҙең өсөн был маршрут нимәһе менән әһәмиәтле булдымы? 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы Обливскаяла иң ҙур юғалтыуҙар кисергән. Был - иң ҡурҡыныс факт. Обливская тигән бәләкәй генә станицаға беҙҙекеләр 1 ай инә алмайҙар. Унан Сталинградты көнбайыш менән бәйләп торған, фашистарҙың Сталинградҡа көс һәм ҡорал ташыған тимер юл үтә... Шуға күрә был станицаның әһәмиәте ҙур булған.

**А. Ғайсаров:** Мине ундағы халыҡтың битараф булмауы аптыратты. Суворов әйткәнсә, һуғыш һуңғы яугир ерләнгәндән һуң ғына тамамлана. Улар өсөн һуғыш, ысынлап та, бөтмәгән. Улар һуғышты ныҡ хәтерҙә тоталар. Деев утарында кеше йәшәмәй. Утар 30 йыл элек үк бөткән. Юл да юҡ. Әммә беҙ бөгөн башҡорт йәштәрендә күҙәтелгән рухи күтәренкелек беҙҙең милләттә күптән булғаны юҡ ине. Бәлки, 1919 йылдан бирле булмағандыр. Башҡорт йәштәренең бөгөнгө рухи күтәренкелеге ул, моғайын, 100 йылға бер тапҡыр күҙәтелә торған күренештер. Улар уҡымышлы, белемле, зиһенле һәм, беҙҙең быуындыҡылар һымаҡ, ике ҡатлы стандарттар менән эш итмәйҙәр. Улар үҙҙәренең фекерен ярып әйтә белә. Иң мөһиме, улар ниндәйҙер графаға билдә ҡуйыр өсөн, исем өсөн эшләмәй, улар аныҡ эштәр менән шөғөлләнә.

Әле һүҙ барған сәфәргә йәштәрҙән Артур Ғайсаров, Эдуард Дилмөхәмәтов, Алмаз Бәширов, Айбулат Ишназаровтар барҙы. Мин уларҙың барғандағы, ҡайтҡандағы йөҙҙәрен күрҙем. Беләһегеҙме, улар ирҙәр булып ҡайтты. Һәм ошо сәфәрҙән һуң улар күргән стела һәм исемлек тә, һалдат һәйкәле лә - ҡараулы, тәрбиәләнгән. Былар барыһы ла урындағы халыҡтың яугирҙарға мөнәсәбәтен күрһәтә. Улар, бында ерләнгән кешеләрҙең туғандары бер мәл килер тип, һаман көтә.

**Илһөйәрлек төшөнсәһе, тәү ҡарашҡа, ябай ғына һымаҡ. Шулай ҙа һәр кем уны үҙенсә аңлай. Ә һеҙҙең өсөн илһөйәрлек нимәнән башлана?**

**А. Юлдашбаев:** Битараф булмауҙан. Ғәмһеҙлектән ҡотолһаң, моңһоҙлоҡтан арынһаң - шунан. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы эҙенән барып, шул ерҙәрҙә бер генә батырҙың исемен билдәләп, ташҡа яҙҙырыу ҙа илһөйәрлекте күтәреү ул. Илһөйәрлек бит ул 9 Майҙа түшеңә "Георгий таҫмаһы" тағып үтеү түгел. Илһөйәрлек - ул ниндәйҙер хеҙмәт, ниндәйҙер аҙым, ниндәйҙер тәүәккәллек, ниндәйҙер проект булырға тейеш.

Илһөйәрлекте күтәреүҙең икенсе яғы бар - һуңғы йылдарҙа Рәсәй халыҡтарының, милләттәрҙең, әйтәйек, башҡорттоң, мариҙың, сыуаштың, яҡуттың, һәр береһенең милли үҙаңы күтәрелә. Был бит илһөйәрлек менән туранан-тура бәйле. Ошо сәфәребеҙҙә казактар менән һөйләшкәндә лә шундай фекергә килдек: "Казактар казак булып ҡалғанда, башҡорттар башҡорт булып ҡалғанда, илһөйәрлек күпкә юғарыраҡ буласаҡ". Сөнки башҡорт - үҙенең башҡортлоғон, казак - үҙенең казаклығын, сыуаш - үҙенең сыуашлығын, мари үҙенең марилығын онотһа, улар кемгә әйләнә? Үҙенең тамырҙарын, нәҫелен, тыуған ерен, тыуған төйәген, тарихын белмәгән маргиналға әйләнә. Ә маргиналдың илһөйәрлек тойғоһо булыуы мөмкин түгел. Бөгөн быны бөтәһе лә аңлай. Быны, ниһайәт, юғары даирәләге федераль үҙәктә лә аңлаһындар ине. Һәр бер милләт үҙенең ҡайһы милләт вәкиле булыуын белеп, үҙенең милли үҙаңын, милли мәҙәниәтен, милли асылын һаҡлап ҡалғанда ғына илһөйәрлек, патриотлыҡ буласаҡ.

**А. Ғайсаров:** Рәсәйҙең көсө ошо милләттәрҙең күплегендә һәм һәр береһенең үҙе йәшәгән ер өсөн йәнен бирергә әҙер тороуында, йәғни илһөйәрлегендә бит инде. Ни өсөн беҙ Бөйөк Ватан һуғышында шундай ҙур юғалтыуҙар кисергәнбеҙ, әммә еңеп сыҡҡанбыҙ? Сөнки һәр кем аңлы рәүештә үҙенең тыуған төйәге өсөн көрәшкән. Әгәр ҙә маргиналға әйләнеп, ил бөтөнлөгөн тотоп торған илһөйәрлектән яҙһаҡ, әлбиттә, юғалып ҡаласаҡбыҙ.

**А. Юлдашбаев:** "За Родину! За Сталина!" тип ҡысҡырып яуға күтәрелгәндәр. "За Сталина!" тигәне аңлашыла. Ә "За Родину!" тигәндә һәр кем үҙенең бәләкәй тыуған ерен күҙ алдына килтергән. Башҡорттар - Ағиҙел өсөн, Урал өсөн, Торатау өсөн күтәрелһә, казактар - Дон өсөн, яҡуттар үҙҙәренең тундраһы өсөн күтәрелгән.

**Азамат ағай, һеҙ йәштәр менән аралашаһығыҙ, йәштәр өсөн тәғәйенләнгән күп ҡыҙыҡлы проекттарҙың ойоштороусыһы ла булып тораһығыҙ. Ошо тәжрибәгеҙ менән уртаҡлашмаҫһығыҙмы?**

**А. Юлдашбаев:** Аллаһы Тәғәләнең шундай хикмәте булды: йәштәр миңә, минең даирәгә үҙҙәре ынтыла башланы. Әлеге көндә минеке һымаҡ булып тойолған күп проекттар минеке түгел. Улар Артур Батыршиндың, Тимур Ямаловтың, Эдуард Дилмөхәмәтовтың, Алина Ғәлиеваның, Артур Ғайсаровтың һәм башҡаларҙың башланғысы. Уларҙың һәр береһенең үҙ эше бар. Мин уларға саҡ ҡына кәңәш биреп, саҡ ҡына юл күрһәтеп ебәрә генә алам... Иң мөһиме, уларҙы "Һеҙҙең ҡулдан бар эш килә!" тип ышандырырға кәрәк. Бөгөн йәштәр менән ниндәйҙер бейеклектән танау буйлатып ҡарап һөйләшергә ярамай. Тиң, бер "телдә" һөйләшергә кәрәк. Әгәр ҙә һеҙ: "Йәштәр ниндәй?" - тип һораһағыҙ, мин былай тип яуап бирәм: бер нәмәгә лә битараф булмаясаҡ. Ниндәйҙер сер, тәжрибә юҡ бында. Бары тик йәштәргә ышанырға һәм уларҙың идеяларын тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирергә кәрәк. Йәштәргә ярҙам итә алмайһың икән, бер генә девиз булырға тейеш: "Йәштәргә ҡамасаулама!"

**А. Ғайсаров:** Был күтәрелеш ҡурай сәнғәтендә лә күренә, сөнки, 2000 йылдан башлап, халыҡ музыкаһына, традицион музыкаға ҡарата ҡараш ҡырҡа үҙгәрҙе. Быға тиклем беҙ сәнғәттә күп темаларҙы, идеяларҙы сит илдән, урыҫтарҙан алдыҡ, хәҙер ҡурай сәнғәте яҡшы үҫеш алды. Ҡурайсылар, тигәндә, мин, ғөмүмән, башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнаусыларҙы күҙ уңында тотам. Элек ҡурайсылар - ҡурайсы, думбрасылар - думбрасы ине. Хәҙерге көндә беҙҙең шундай берәмегебеҙ бар - Башҡортостан Республикаһының Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры. Ул да беҙҙең мәҙәниәтебеҙҙең матур күрһәткесе. Халыҡтың үҙенең милли музыка ҡоралдарынан торған оркестры бар икән, беҙҙең халыҡ рухи яҡтан үҫешкән, тигән һүҙ.

**А. Юлдашбаев:** Шул уҡ ваҡытта, "Ҡурайсы" төркөмө, "Арғымаҡ", "Заман", "Йатаған" этно-төркөмдәре бар. Беҙҙә бит ул тиклем этно-төркөмдәр булғаны юҡ ине. Әле яңыраҡ Азат Биксуриндың симфоник оркестр менән эшләгән проектын ҡараным. Симфоник оркестр менән ҡурай - төптө яңы күренеш

**А. Ғайсаров:** Этно-төркөмдәргә ҡаршы килеүселәр ҙә бар. Әммә был беҙҙең үҫештең күрһәткесе. Әгәр ҙә ҡурай сәнғәтен үҫтергәнбеҙ, таратҡанбыҙ икән, уны бер сиктә тотоу дөрөҫ булмаҫ ине.

**А. Юлдашбаев:** Дөрөҫ юлдабыҙ. Шунан һуң, глобалләшеү, урбанизация тигән процестарҙы ла иҫтән сығарырға ярамай. Быға тиклем ҡурай ул ҡурай, этно, боронғо, архаик музыка ҡоралы тип ҡаралһа, боронғоса кейенеп, тирмә эргәһендә генә уйнала торған ауыл музыка ҡоралы тип ҡабул ителһә, хәҙер ул цивилизация кимәлендә тормошҡа ашҡан, күтәрелгән һәм шул кимәлдә булырға тейешлеге иҫбатланған музыка ҡоралы. Шул уҡ ваҡытта ҡурайға иғтибар итеүселәр ҙә ишәйә бит. Ҡайһы милләт Ла Скала опера театрында үҙ музыкантын милли кейемдә сығыш яһата алғаны бар әле? Беҙ Ла Скаланың тарихында бер генә кешегә - Роберт Юлдашевҡа ғына фракһыҙ сәхнәгә сығырға рөхсәт ителеүе менән маҡтана алабыҙ! Шуға күрә, был бит танылыу. Ҡабатлап әйткәндә, ҡурай ул - ҡорал, ул рухи ҡорал, милләтте туплай торған, күтәрә торған инструменттарыбыҙҙың береһе.

Һорауығыҙға әйләнеп ҡайтҡанда, тәжрибәләр кәрәк ул. Шул уҡ йәштәрҙең тәжрибәләре... Хәҙер мин, әйтәйек, 53 йәшлек "бабай" булып: "Улай ярамай, беҙ йәш сағыбыҙҙа ҡурайҙы улайтып уйнамай инек", - тип ултырһам, ул һүҙҙәрҙән файҙа булмаҫ ине. Заман үҙгәрә. Яңы талантлы йәштәр килә. Бабич 19-20 йәшлек сағында "Тулҡын" ойошмаһының манифесын ҡабул итә һәм унда, беҙ һөрһөгән күңелдәрҙе аҡтарып, яңыны тыуҙырырға тейешбеҙ, тигәнерәк (ғәфү, яттан һүҙмә-һүҙ иҫләмәйем, әммә мәғәнәһе шулай) фекер әйтә. Бөгөн йәштәр үҙҙәренең манифесы менән килергә тейеш. Донъябыҙ йәштәр ҡулында. Беҙ, өлкәндәр иһә, яңы заманды иҫке аҡыл менән тыуҙырмайҙар икәнен аңларға, йәштәргә ҡамасауламаҫҡа тейешбеҙ.

**А.Ғайсаров:** Шул уҡ ваҡытта эштә лә, тормошта ла быуындар бәйләнеше өҙөлмәҫкә тейеш. Быуындар бәйләнеше өҙөлөүөн күрҙек, уның эҙемтәләрен үҙ иңебеҙҙә татыныҡ. Хәҙер ул хаталарға юл ҡуймайыҡ.

**А.Юлдашбаев:** Ҡабатлап әйтәм: рухи күтәрелешкә (мин бында революция, ихтилал тураһында һүҙ алып бармайым), ижтимағи аңды үҙгәртергә һәләтле, үҙ һүҙенде, үҙ фекеренде йөрөтөр кеше булыр өсөн йәш булырға кәрәк. Бабичтар заманын алығыҙ, Салауат Юлаевтар заманын алығыҙ, 60-сы йылғыларҙы алығыҙ... Нисә йәш булған уларға?..

**Йәштәр тураһында фәһемле һүҙҙәр әйттегеҙ, ә шулай ҙа дөйөмләштереп ҡуйыйыҡ әле: бөгөнгө йәштәр өсөн иң мөһиме нимә?**

**А. Юлдашбаев:** Мәғрифәтселек. Бөгөн Аҡмулла заманындағы нео-мәғрифәтселек, яңы мәғрифәтселек осоро. Бөгөн төп инвестиция, милли инвестиция - ул мәғрифәтселек. Донъяуи белем алыу. Донъяуи кимәлдә конкурентлыҡҡа һәләтле белгес булыу. Һин үҙенде мескенлегендән, бахырлығындан арынып, донъяуи хеҙмәт баҙарында шведтар менән, немецтар менән, японлар менән бер тиң торорға тейешһең. Ҡайҙалыр, ниндәйҙер вакант вазифаға конкурс иғлан ителде икән (Рәсәйҙең ҡайһы ғына төбәгендә, донъяның ҡайһы ғына илендә булһа ла), шунда еңеп сыға алырға тейешһең. Ә "Атайым шылтыратыр, ярҙам итер, эшкә урынлыштырыр әле" тигән һүҙ булырға тейеш түгел. Шул уҡ IT технологиялар өлкәһендә, нано-технологиялар өлкәһендә, ген инженерлыҡ өлкәһендә лә, бөтә өлкәлә лә донъя кимәлендәге конкурентлыҡҡа һәләтле булырға тейеш беҙҙең йәштәребеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милләтебеҙҙең төп ҡоралы - моң, ҡурай моңо, тигән һығымта ла яһалды бөгөнгө әңгәмәбеҙҙә. Бар нәмәгә битараф кешене "моңһоҙ" тиҙәр түгелме әле? Әңгәмә тәьҫиренә бирелеп, халҡыбыҙға "Моңһоҙ булмайыҡ!" тигән саҡырыу ташлағы килә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

**✓ Тамаҡты ҡабаланмай, ләззәтләнеп ашауҙы, сәй эсеүҙе бер күркәм йола итеп ҡабул итеүгә өйрәнгән Хәтирә хәҙер үҙен бәйле тотолоуҙан аҙыҡҡа ҡарһалан булып күнеккән эт итеп тойҙо.**




Талпынышып, осорға әҙерләнгәндәй ҡымйырашып алып киткән бисараларҙы һаҡсылар этә-төртә кузовҡа тейәне. Кәүҙәләрен күтәреп ынтылырға хәлдәре булмағандарҙы өҫтә торған һалдаттар елкәләренән тартып алды. Нисек тә урынлашҡас, баштарынан аша көпләп, билдәһеҙ йүнәлеш алдылар. Бында ла риза ине мәхлүктәр. Яҙмыштары ни менән барып, ни менән бөтөрөн белмәһәләр ҙә, йотлоғоп саф һауа һулайҙар, яҙ йылыһын тояла. Ярты көндәй һелкенеп барғандан һуң, машиналар ниндәйҙер бер станцияла туҡтаны һәм тағы ла сылбырға теҙеп, вагондарға индерҙеләр. Өс вагонға бүлеп-бүлеп урынлаштырҙылар.

Ағым ыңғайында алға ынтыла Хәтирә лә. Һәндерәләр шығырым тулы. Ҡайҙан да йонсоған, битараф, асыулы ҡараштар ҡаршы алып, оҙатып ҡала. Буш урын эҙләп бара торғас, аҫҡы тапчанда терәлер ер табып, туҡталып ҡалды. Ултырыусылар өндәшмәй, текәлә бирә. Баҙнатһыҙ ғына терәлде шунда. Артынан килгәндәр урын эҙләп арыраҡ үтте. Ҡуҙғалып киткәс тә шулай ҡатып ултыра бирҙе ул. Күҙ ҡарашын шылдырып ҡарлыҡ та хәл, йә теләк тапманы. Вагондарҙың көйлә бәүетеүе ыңғайына бында лә ярайһы уҡ йәнле тормош алып барыла икән. Күршелә бер нисә ҡатын ҡаты һүгенешеп, сай-сой килешеп кәрт һуға. Берәүҙәр өҫкә күтәрелеп, һуҙылып-төшөп ятып алды, кеме йоҡлай, кеме түбәгә ҡарап уйға талған. Хәтирә ҡаршыһындағы өҫкө тапчандағы ҡатын, мырш-мырш танауын тартыуына ҡарағанда, илай, ахыры. Аҫтағы икәү тәҙрә аръяғынан күҙҙәрен алмай, әйтерһең, поезд менән ҡуша йүгергән урман-тауҙар араһында бик ҡәҙерле нәмәләре күренеп ҡалырҙай. Аҫҡа ҡарағас, теҙе теҙгә тейеп тигәндәй ултырған күршеһенең аяҡтарындағы яҡшы итектәрҙе аңғарып, ирекһеҙҙән иплән кенә уның күлдәк итәгенә күтәрелеп ҡарап алды. Шығырҙап торған сәскәле крепдешиндан тегелгән ҡупшы күлдәктә, өҫтөнән дә яҡшы ғына кофтала ине ҡатын. "Бә-әй... ҡунаҡҡа барғандай кейенеп, был да төрмәгә китеп бара микән?.."

Ҡатын уның ҡарашын аңғарҙы. Бошонҡо ғына йылмайҙы. Унан боролоп ултырып ҡулын бирҙе:

- Инна Петровна. Инна тиһәң дә була.

Хәтирә, үҙҙәрендә ҡатын-ҡыҙҙың ҡул бирешеп күрешеүе булмаһа ла, бушаҡ ҡына итеп тегенең дә ҡулын ҡыҫты:

- Хәтирә...

- Ха-тир-ра... - тип "р"-ға баҫым яһап ҡат-ҡат ҡабатлап, телен шымартып уҡ алды яңы танышы. Унан тиҙ генә асылып, бөтөн хәлен һөйләп ташланы. Эсен бушатыр кеше тапмай килгән булған, ахыры.

- Башҡортостанға, атайым үлеп ҡалып, шуны ерләүгә тип килгәйнем. Былай Украинала йәшәйем. Врач мин, ирем хәрби кеше. Китеүгә юлға сығып, вокзалда аҡсамды урлаттым. Аптырап, сумаҙанымдағы кейемдәремде һатып булһа ла билетлык сығарһам, тип торғанда, милиция килеп ҡулға алды. "Спекулянт" тип ошо поезға ҡушты ла ебәрҙеләр. Поезд начальнигын күреп һөйләшеүгә өлгәштем шулай ҙа, иремә хәбәр итегеҙ, ул минең ҙур кеше, мотлаҡ хәлде асыҡлаясаҡ, тинем.

Хәтирә был хәбәргә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне. Кейеменә ҡарағанда, ысынды һөйләйҙер, ә был поезда китеп барыуына... аптырарһың.

- Ирегеҙ кем һуң?

- Ирем генерал минең. Өлкәнең хәрби комиссариаты менән етәкселек итә.

- Һы, - тиеүҙән башҡа һүҙ табылманы. Үҙенең ни сәбәптән килеп юлығыуын да, ҡайҙа юлланыуын да аңлай алмаған мәлдә, кеше ҡайғыһымы.

Алсаҡ ҡатын күршеһенең, өндәшмәһә лә, тыңларын белеп, һаман хәбәрен теҙҙе:

- Улыбыҙ ҙа, ҡыҙыбыҙ ҙа үҙ теләктәре менән фронтҡа китте. Улар өсөн борсолам. Хаттары килһә, Максим өйҙә булмаһа, туҙышып яталар микән... Иремә былай ҙа әйткәйнем әле, атайҙы ерләп киләм дә, шулай уҡ фронтҡа китәм, балаларҙың берәүһен булһа ла барып табыр инем, тип. Ул да һорай, тик ебәрмәйҙәр үҙен.

"Минең дә иремде фронтҡа ебәрмәгәйнеләр..." тип һүҙ ялғай Хәтирә лә, тик эстән генә.

Инна унан яуап та көтмәй шикелле, бәлки, русса һөйләшеүе йә аңлауына ла шикләнәләр.

- Станция һайын алаҡанлап ҡарап киләм, бына-бына Максим килеп инер кеүек тә был мәхшәрҙәр бөтөп ҡалыр кеүек.

"Минекеләр улай ғына бөтмәҫ инде..."

Күршеһе талғын ғына баҫалҡы тауыш менән атаәсәһенең Башҡортостанға ҡасандыр заводҡа эшкә килеп ҡалыуын, үҙенең дә ошонда тыуыуы, унан Мәскәүҙә медицинаға уҡыуын, ирен шунда осратып кейәүгә сығыуын һәм тағы ла әллә күпме яҡты, ҡыҙыҡлы хәтирәләр һөйләне. Уның был оҙон һәм матур йәшәйеше хаҡында тыңлап, "Ҡалай кешеләр бәхетле була ла ҡуя икән", тип уйлап килде Хәтирә. Ирекһеҙҙән үҙенең ҡыҫҡа ғына ғаилә тормошон, уның күңелһеҙ һәм гәрлек мәлдәрен иҫләп, тағы ла ныҡыраҡ эсе бошто. "Булмаҫ йәшәү булмаҫтыр инде шулай, көсләп асылған күҙ ҡараһына ни өмөт..."

Ике ҡатын ҡараңғы төшкәнсе ултырҙы. Бары береһе генә һөйләһә лә, күренеп тора, икеһе лә яҙылды, күңелдәре бушап, ҡараштары асылып ҡалды. "Отбой" иғлан ителеүгә Инна аҫҡа ятты, Хәтирә өҫкә үрмәләне.

Икенсе көндө лә текәлешеп ултырҙы улар. Йылмаяҡ урыҫ ҡатынының һөйләр хәбәре бөтмәне, йомоҡ башҡорт тыңлап ялҡманы. Бары бер хәл генә бер аҙ албырғатты уларҙы. Шулай ултырғанда күршеләгә кәрт уйнаусыларҙың берәүһе килеп, Инна алдына баҫты ла:

- Сис итегеңде, дамочка, мин һинең итегеңде отторҙом! - тине.

Инна ҡаршыһындағы битйөҙө ҡатып, йөй-яра әҙҙәре менән биҙәлеп, күҙ алмаларында осҡон заты ҡалмаған был ҡатынға артыҡ һыр бирмәне:

- Үҙеңдең итегенә уйна, ниңә минекенә хужа булаһың!

- Әйтелгән икән - сис! - тегеһе һаман ныҡышты.

- Кит бынан! Хәҙер начальникты саҡыртам! Быға саҡлы туҡмалғаның аҙ булдымы? - Хәтирә Иннаның былай ҡаты һөйләшә алғанына аптырап ултырҙы.

- Ярай-ярай... мадам... һинең дә телеңде ҡыҫҡартырбыҙ, - бәйләнсек ҡатын китә биреп, ҡайырылып ыржайған булды, - минең итектәрҙе һәртөп ултырт.

Инна үҙенән бигерәк Хәтирәне тынысландырырға була:

-Төрмәнән баштары сыҡмай йөрөп, әҙәм төҫө ҡалмаған былар. Көн дә берәйһенә бәйләнеп, һуғыш сығарып ҡына киләләр. Туҡмап торалар үҙҙәрен, аңларыҡ түгелдәрҙер, күрәһең, - тип аңлатма бирҙе лә, ҡапыл ғына, бер ни булмағандай, тағы ла иҫтәлектәренә төшөп китте.

...Төн уртаһында ҡапыл шаушыу ҡупты, сатыр-сотор килеп лампалар янды, ризаһыҙ мығырҙашҡан тауыштар геү булып үтте. Ишектәр шап-шоп ябылып-асылып, бер төркөм ҡыҙыу атлап килгән аяҡ тауыштары вагонды дер һелкетте. Хәтирә лә башын ҡалҡытты: нимә булып китте тағы?

Төркөмдөң алдынан килгән өс-дүрт хәрби ашығып йөрөп йоҡлап ятҡан ҡатындарҙы төрткөләне, биттәре ябыҡтарҙың битен асып ҡараны. Бер туҡтауһыҙ "Һеҙ Зайҙалова түгелме? Һеҙ Зайҙалова түгелме?" тигән һорауҙы бирҙе. Шулай геүләшеп килә торғас, улар тәңгәленә еттеләр. Хәрбиҙәрҙең береһе Инна Петровнаға эйелде лә "Иптәш начальник!" тип ҡысҡырып та ебәрҙе. Уның был аһына битараф була алмаған Хәтирә лә һонолоп ҡараны ла, саҡ һушын юйып ҡолап төшмәне. Инна Петровна ҡанһыраған эсен тотоп, күҙҙәре асыҡ килеш ятып ҡатҡан ине...

Килеп еткән хәрбиҙәр араһынан бер сал сәсле олпаты айырылып, үлек эргәһенә килеп сүгәләне һәм балаларса һыҙылып һыңҡылдап тороп илап ебәрҙе:

- Инна!.. Инночкам!.. Гәфү ит мине... Гәфү ит... Өлгөрә генә алманым!.. Инночкам...

Башҡалар хайран ҡалып ҡарап тик торҙо. Өҫтә Хәтирә йөҙрөгө менән ауыҙын баҫып, иргә ҡушылып һыҡраны: Инна Петровна!.. Ниңә улай? Инна...

Мәйетте алып китеүгә, итек өсөн йән алыуса теге ҡатынды ла ҡулдарын артҡа ҡайырып, туҡмай-туҡмай алып сығып киттеләр. Бер нисә минуттан шәмдәр һүндерелеп, һиллек урынлашты. Әйтерһең, әле генә берәүҙең йәне ҡыйылмаған да, әле генә ҡот осҡос хәл ҡылынмаған. Ысынында, күптәр йоҡламағандыр ҙа инде. Күптәр Хәтирә кеүек уҡ йәшһеҙ күҙҙәрен ҡараңғыға секерәйтеп, сараһыҙлыҡ упҡынына осҡандыр.

* * *

Тағы ла дүрт-биш көндәй бәүелгәндән һуң, Ҡаҙағстан менән сиктәш ерҙә урынлаштырылған лагерь ҡаласығына килеп төштөләр. Һалдаттар кеүек йүгертеп йөрөтөп тикшереү үткәрҙеләр, кейем-һалым алдырҙылар, сәстәрен ҡырҙылар... Быға ҡайғырырға ла, хатта ытырғанырға ла хис-тойғолары ҡалмағайны Хәтирәнең, көҙгөләгә үҙенең шөкәтһеҙ сағылышына ла, бала саҡтан бәпләп тәрбиәләп үҫтергән оҙон толомдарының аяҡ аҫтында йылан булып бөгәрләнеп ятыуына ла иғтибар итмәҫтән тороп сығып китте. Ашыҡтырып мунса индергәс, уңып бөткән ҡырҡ ямаулы спецовкалар кейҙереп, мал өйөрө кеүек итеп ашарға ҡыуҙылар. Әле рәт мәғәнәһен, бойороҡ-тәртип төшөнсәһен аңлап етмәгән, ҡулға алынғандан яҙалап-туҡмауҙан ҡурҡып та, шул сәбәптән аңрая биреп ҡалған ҡатын-ҡыҙ өркөтөлгән ҡаҙ көтөүе шикелле аңҡы-тиңке килде. Өйөрөлөшеп, кеме беренсе ҡайҙа ыңғайлай, башҡалары шуның артынан эркелеште. Был ҡылыҡтары өсөн әр менән йәбере әҙер: һаҡсылар ҡулындағы шыйтылдаҡ нәҙек тимер көтөүсе сыбыртҡыһы һымаҡ һауала уйнап ҡына тора.

Аныҡ ҡына нимә ашағандарын да белмәйҙәр. Бер яҡтан ул мөһимме инде? Үлмәҫкә ҡалған йәндә тотор, ҡыбырлап йөрөгән тәндә ҡолатмаҫ өсөн ауыҙға тыҡҡандың атамаһы ла, тәме лә ҡыҙыҡһындырмай. Сәйнәлгәне сәйнәлеп, сәйнәлмәгәне туралай йотола ла, балсыҡ икмәк киҫәге менән тәрилкә ялтыратылғас, ризыҡ тигән нәмәнең артынан күрәшкәләге ҡайнар һыу йыуып төшөп китә. Ҡасан ғына тамаҡты ҡабаланмай, ләззәтләнеп ашауҙы, сәй эсеүҙе бер күркәм йола итеп ҡабул итеүгә өйрәнгән Хәтирә хәҙер үҙен бәйле тотолоуҙан аҙыҡҡа ҡарһалан булып күнеккән эт итеп тойҙо. Алдындағына ҡарамай тамағына ҡойорға мәжбүр булыуынан үтә лә кәмһенде, ғәрләнде. Йыш ҡына ошо мәлдә күҙҙәренә йәш эркелде. Тик ашамай ҙа сара юҡ: йә хәл бөтөп йығылаһың, йә туҡмаҡ көтәһең. Баштағы, әле тәүге көндәрҙәге кисерештәре ине былар ҡатындың.

Тәүге көн үк начальник бүлмәһенә сиратлап индереп эшкә бүлделәр. Тегеү цехы менән ферма араһынан һыйыр һауыуҙы һайланы ул. Бәләкәйҙән белгән, таныш эш. Хатта ниндәйҙер кимәлдә күңеле лә күтәрелеп киткәндәй булғайны, ни тиһәң дә, һыйырҙар бит уға таныш, хатта яҡын кеүек. Әммә осо күренмәгән оҙон аҙбарҙағы буралай ҡаралы-алалы һәүкәштәр янына барып ингәс, уларҙың табаҡтай елендәре менән үҙенең бәләкәс устары айҡамаҫ йыуан имсәктәрен күргәс, баҙап ҡалды. Унан ул һөтө бөтмәҫ аҡ елендәргә башын терәп илаған, малҡайҙарҙың муйынын ҡосаҡлап һыҡтаған саҡтары аҙ булманы. Аслыҡтан хәлһеҙләнгән бармаҡтарҙың көсө юҡ, ә һыйырҙарҙың һөтлөлөгө! Тамсыһын ҡалдырып ҡара, артынан тикшереп, буш елендәрҙе ҡапшап килеүселәр бихисап. Күбекләнеп торған йылы һөт еҫе танауҙарҙы ҡытыҡлап, мейегә үтә лә, уныһы ҡоҫҡоно килтереп, ашҡаҙанды эшләтеп ебәрә. Тойғанын ала алмаған организм, ахырҙа, уҡшытып һары һыуын сығарта. Исмаһам, күбеген генә ялап булһасы...

Шул ас халыҡты, ваҡыты-ваҡыты менән мәшәҡәттәренән туҡтатып, ниндәйҙер оло күл буйына ҡамыш йыйҙыртырға алып сығалар. Саҡ ҡыбырлашҡан, йонсоу ҡатындарҙы этеләп-төрткөләп, ҡамышты яланғас ҡул менән һындырып йыйып, утын итеп өйҙөртәләр. Ҡамыштар ҡаты, йәш ағас ҡалынлығындай бар, һынмай, өҙөлөп сыҡмай ыҙалата. Устары ҡанға туҙып, тишек-тошоҡ аяҡ кейемдәре һалҡын һыуға иҙелеп бөтә. Тик бында берәүҙең дә эше юҡ. Аҡыралар ҙа, баҡыралар.

**(Дауамы бар).**

✓ Бөгөнгө һабантуйҙар халыҡтың күңел асыу байрамынан төрҙәрҙең күңелен астырыу сараһына әйләнде. Бөтөн әҙерлек нисәлер сәғәттә бер төркөмдөң килеп китеүенә бағышлана.



ӘҘИП ҺҮҘЕ

# ЖУРНАЛИСТ БУЛЫП...

## ижади йәндәр эшләһен



**Был юлы рубрикабыҙҙа яҙыусы, журналист, Башҡортостан Республикаһы Йәмәғәт палатаһы ағзаһы Рәсүл СӘҒИТОВ сығыш яһай. Рәсүл Хәсән улы башлыса заман журналисының ниндәй сифаттарға эйә булырға тейешлеге, матур телмәр, һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу оҫталығы һәм башҡалар тураһында фекер йөрөтә.**

- Заман журналисы күп төрлө һәм күп ҡырлы булырға тейеш. Мәҫәлән, бай эске донъялы. Асыҡ зиһенле, таҙа намыҫлы, һәр һүҙе, хатта уйы өсөн тәрән яуаплы. Талантлы бөтә яҡлап талантлы, тиҙәр бит - алтын һүҙҙәр былар. Чеховтың күркәмлек тураһында әйткәне лә мең тапҡыр дөрөҫ - тышҡы ҡиәфәте лә ыҫпай булһын һөнәрҙәшемдең - ил күҙендәге кеше бит ул. Тап - ыҫпай, бөхтә, ә модаға артыҡ ылығыу, тимәк, ниндәйҙер дәрәжәлә зауыҡһыҙ, хаттин ашыусы түгел. Ижади һөнәр эйәләренең һалбыр-һолбороғаҡ, ҡырынмайырағ йөрөүе, бәлки, ошо ижадилыҡ билдәһелер ҙә, һәм был да хөрмәткә лайыҡтыр, әммә банк хеҙмәткәре ише "текә" кейенеү ҙә һәләтте кәметеп ебәрмәй ҙәһә. Минең ижад шишмәмде көндәлек галстук, ҡаптырылған өскө төймә һис тә быумай. Кемгә нисектер, әлбиттә, ә минә был фекер дисциплинаһы бирә. Ижади тәртипһеҙлек - арыу нәмә, ләкин оҙаҡҡа китһә, сан баҫа, яңы идеялар, уның әрпешлеген күреп, танауын сирыға, сөскөрә башларға, ҡул һелтәп сығып китергә мөмкин.

Төрлө ҡыҙыҡһыныуҙары булһын журналистың. Шахмат уйнаһын, мейе өсөн һәйбәт гимнастика тиҙәр уны. Бына мин уны уйнай белмәйем. Йәнә лә журналистың киң ҡарашлы булыуы һәйбәт. Бының өсөн ваҡиғаларҙы, һәр хәлдә, үҙ йүнәлешеңдәге хәл-күренештәр, тенденцияларҙы даими күҙәтеп барырға кәрәк. Белемле булыу шәп. Бында филфакты, журфакты йәки ошо эшкә килер алдынан вуздың ҡайһылыр башҡа факультетын тамамлауҙы ғына күҙҙә тотмайым, уларҙан тыш, эш барышында үҙләштерелгән һөнәрҙәргә иҫаралайым. Миҫалға, юрислыҡҡа уҡып алыу бик арыу - ижтимағи-сәйәси мәсьәләләр менән шөғөлләнәһең икән, дәүләт ҡоролошон төптән белергә ҡәтғи бурыслыһың. Дәүләттең закондар сығарыу, башҡарма, суд хакимлығы тармаҡтары барлығын ғына йәиһә парламенттың нисә палатанан торғанын белеү генә əҙ, бында тамырғаса төшмәле асыҡ ғилем талап ителә. Шәхсән үҙемә заманында конституция хоҡуғы буйынса диплом яҡлауым әле булһа таяныс. Хәбәрҙарлыҡ ҡына ла етмәй, фараз ҡылыу бурысы ла бар журналистың, ә бының өсөн аң даирәңдең киң дә, тәрән дә, бейек тә булыуы ҡаты шарт. Социология ла, политология ла, фәлсәфә фәне лә ҙур ярҙамсы һиңә. Иҡтисадта, исмаһам, бассейндағы спортсылай йөҙмәйенсә, был тармаҡта диҡҡәтте йәлеп итерлек тапшырыу эшләрең дә, мәҡәлә яҙырың да икеле. Белгес фекерен бирә алаһың, ләкин уға йөҙ ҡыҙармаҫлыҡ һорау бирер өсөн дә, материалды йомғаҡлап ҡуйырға ла шәхси юғарылыҡ талап ителә.

Хәбәрсенең ижтимағи-сәйәси тормошта вазифауи яҡлап та үрҙәр яулауы, мәҫәлән, депутатлыҡҡа ынтылыуы насар түгел. Бығаса үҙ мәҡәләләре - тапшырыуҙарында күтәргән проблемаларҙы үҙе хәл итә башлар, һайлаусылар менән туранан-тура осрашыуҙар уға профессиональ яҡтан үҫергә ярҙам итер ине. Журналистың үҙе эш хаҡы алған киң мәғлүмәт сараһы менән генә сикләнеп ҡалмауы ла дөрөҫ, минеңсә. Бында соцмедиаһы күҙҙә тотмайым, дәүләттең рәсми тергәләгән, ҡағыҙҙа сыҡҡан, йәки интернетта донъя күргән мәғлүмәт сараларына ишаралайым. Радиола бөтә нәмәне әйтә лә алмаҫҡа мөмкинһең, быға проекттыңдың форматы тура килмәй - күберәк әңгәмәсеңде һөйләтергә тейешһең. Ә үҙеңдең фекерҙәрең, теләһәң-теләмәһәң дә, ситтә ҡала. Быны мин үҙемсә хәл итә киләм, әлбиттә, йәғни гәзит-журналдарҙы, телевидениены, Мәскәү баҫмаларын файҙаланам. Үҙемдең сикләнмәскә тырышыуымдың бер сағылышы - китаптарым. Бөтәһе алтау, ә тап журналистика тураһындағылары әлегә икеү. Өсөнсөһө әҙер, Алла бирһә, бәлки, көҙгә ҡулға ла алып ҡыуанырмын. "Имен-аман торогоҙ!" тигәне 2013 йылда "Китап" нәшриәтендә сыҡты. Быйыл шунда уҡ баҫылған "Словом красен человек" исемле икенсеһендә лә һүҙҙе данлайым. Уны мин ошолай, һүҙ Ғәли Йәнәптәре тип, ҙур хәрефтәр менән яҙам. Һәр мәҡәлә аҙағында йомғаҡлауҙар бар һәм бөтәһендә лә һүҙгә дан йырлана. Атамаларҙа ла "слово" һүҙе йыш ҡабатлана. Тәүгеһендә башлыса башҡорт телле журналистикаға, башҡорт теленә иғтибар ителгәйне, быныһы инде - ғөмүмән, тел сәнғәте хаҡында.

Әйткәндәй, журналистың төп сифаттарының береһе - телмәр оҫталығы, тел шымалығы тураһында бер нисә һүҙ. Ысын мәғәнәһендәге бөйөк яҙыусыларыбыҙҙы уҡыһаң, теләйһеңме-юҡмы, шул һәйбәт һөйләү һуҡмағына төшөп китәһең. Артыҡ бөҙрәлә, сөсө лә түгел был һуҡмаҡ, тураһы ла әйтелә, тоҙо ла етешә, ҡуйылығы ла таман, майы ла үлсәүле, ҡыҫҡаһы, барыһы ла - тап самаһы ғына. Һәм быны әйткәндә мин тәү сиратта телмәр ағышы, һөйләм ҡоролошо, халыҡҡа хас һалмаҡлыҡ, еткереп, һеңдереп әйтә белеү кеүек ҡолаҡҡа ныҡ бәрелмәгән, шуның менән бергә ғәйәт мөһим нәмәне күҙҙә тотам. Тел ғилеме өйрәнгән төрлө бүлектәрҙәге раҫлауҙар, билдәләмәләр, ҡағиҙәләр генә түгел был, яҙылмаған үҙенсәлек. Ошо донъяға инеү лексиканы ла ишәйтә, синтаксисты ла рәтләй, фонетиканы ла төҙәйтә. Тел байлығын халыҡтан да эҙләргә кәрәк, әлбиттә. Төрлө ерҙәрҙә йөрөгәндә, бигерәк тә оло-лар менән күрешкәндә тулыландырам тоғомдо. Һәүетемсә, башҡа телдәрҙе ҡушмайынса, теүәл итеп, ошо мәғәнә өсөн тейешле, тик шуға ғына килешле һүҙен табып, әйтеп бирә замандашым. Әйткәнендә ҡыл күперҙә барған һымаҡ ул минә - уңға сайҡалһа, сағылыҡ кәмей, һулға яҙа баҫһа, теүәллек бүҫкәрә. Тураға бара, ҡыйыу бара. Ҡыйыулыҡты матди нәмәләр аҫтында ҡалмаған рухи көс, ҡанындан килгән тәбиғилек бирә. Дөрөҫ телмәр шулай булырға тейеш, ти уйлайым. Ошо телде эфирға ла, интернетҡа ла, ҡағыҙға ла сығарырға тырышам. Замандың яман күренеше - телде өндәрҙән бигерәк хәрефтәр баҫып алыуынан да ҡурсалар ине әлеге халыҡ һөйләше. Шулай тигәндә, башҡорт теленең фонетик үҙенсәлектәренә иғтибар итмәйенсә, нисек яҙылған, шулай уҡылыуға, эштең һәр хәрефте айырым тигәндәй ҡарау-ҡулланыуға барып еткәнгә, йәғни яҙма телмәрҙең тере телмәрҙе ааүһыҙ боҙғанына һуҡтырам.

Сығышымды былай тип түнәрәкләп ҡуйыйым - журналист булып һөнәрҙе бөтә йөрәге менән яратҡандар, быны аҡса эшләү урыны тип кенә күрмәгәндәр, тәбиғәттән тел тойғололар, ил тойғололар, һүҙҙең бөйөклөгөн баһалағандар, әүеш-тәүеш менән генә шөғөлләнмәгәндәр, ысын мәғәнәһендә ижади йәндәр эшләһен.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...



# ҺАБАНТУЙҘАР...

## кем өсөн ойошторола һуң?

**Йәмле һабантуйҙар мәле етте. Халыҡтың көтөп алған байрамдарының береһе был. Тағы ниндәй сарала шулай ауылдар бер-береһе менән аралашып, күрешеп, уйнап-көлөп, бер-береһенең хәл-әхүәлен белеп ҡала әле!**

Ҡасандыр борон заманда йәйләүгә сыҡҡас үткәрелгән йыйындарҙың, ер эшенә тотонғас, һабан байрамы булып китеүенә лә бәйләй был сараның тамырын ғалимдар. Шулай уҡ боронғо башҡорт ырыуы булған сабандарҙың яҙғы йолаларынан ҡалған байрам, тип яҙыусылар ҙа бар. Һәр хәлдә, был беҙҙең ата-бабанан ҡалған, барыбыҙ өсөн дә таныш һәм үҙ булған сара - йола байрамы.

Әлбиттә, үҙемдең бәләкәй саҡтағы һабантуйҙар менән бөгөнгөнө сағыштырып булмай, был урынһыҙ ҙа булыр ине. Бары хәтергә генә төшөрәм. Элекке һабантуйҙарҙа халыҡты берәү ҙә ситтән килеп әүрәтмәне. Әлеге концерттар ҙа, билдәле артистар ҙа, күргәҙмәләр ҙә, сауҙа-кафелар ҙа булманы. Әммә берәү ҙә күңелһеҙләнеп ултырманы. Көрәштә малайҙарҙан алып ололарға тиклем ауылдың бөтә ир-егеттәре лә ҡатнаша ине. Сәләмәт булған ир-егеттең билен һынап ҡарамауы оят һаналғандыр, күрәһең. Йүгереүҙә лә барыһы ла әүҙемлек күрһәтә. Балалар бер нисә көн алдан төшөп, һабантуй яланында йүгерә башлай инек. Һабантуйҙан һуң өйҙә: "Ҡатнашмағас, нишләп барҙың?" - тип шелтәләп тә ҡуялар ине. Бала саҡта атайым һәм ағайҙарымдың барыһы ла көрәшә, йүгерәләр, гер күтәрәләр, атта сабышалар ине. Үҙем ауылдан сығып киткәнгә тиклем йүгереүҙә ҡатнаштым. Уйлап ҡараһаң, ярышыусыларҙың күптәре ауылдағы малсылар, урмансылар булған бит. Йомортҡа менән йүгереү, тоҡ һуғыш, һарыҡ ҡырҡыу, арҡан тартыш, сәпкә тейгеҙеү, ҡыҫҡа дистанцияға йүгереү кеүек уйындарҙа апайҙар ҙа ҡатнашты. Итәктәрен бөрөп алып йүгерешеп йөрөйҙәр һәм уларҙы берәү ҙә ғәйепләмәй ине. Йыр, ҡурай, бейеү, таҡмаҡ әйтештәрен әйтеп тораһы ла түгел.

Бөгөнгө һабантуйҙарҙа иһә халыҡ пассив, башҡаларҙы күҙәтеүсе генә. Зат-ырыу менән айырым ҡаҙан аҫып, табын ҡороп ултырыусылар ҙа һирәк. Күптәр тамаша ҡылып ҡына йөрөй, йә ашап-эсә лә, ҡайтып китә. Спорт уйындарында ла спортсыларға ғына һалынғандар. Элек бит совхоз директоры, ауыл советы рәйесе, бригадир булған ағайҙарҙың көрәштә лә, йүгереүҙә лә ҡатнашҡанын, сығып ҡурайҙа, гармунда уйнағанын хәтерләйем. Уларҙа был мәлдә түрәлектең әҫәре лә булмағандыр, күрәһең, халыҡ менән бергә эшләй ҙә, күңел аса ла белгәндәрҙер.

Быларҙы ниндәй фекергә ялғау өсөн хәтерләнем? Бөгөнгө һабантуйҙар халыҡтың күңел асыу байрамынан түрәләрҙең күңелен астырыу сараһына әйләнде. Бөтөн әҙерлек нисәлер сәғәттә бер төркөмдөң килеп китеүенә бағышлана. Мәктәптәр, мәҙәниәт үҙәктәре, балалар баҡсалары хеҙмәткәрҙәре, шәхси эшҡыуарҙар, ауыл биләмәләре етәкселәре тирмәләр ҡороп, күргәҙмәләр теҙеп, усаҡ-ҡаҙан аҫып, мажара ҡороп ҡаңғыра хәҙер... Уларға байрам да, күңел асыу ҙа юҡ. Түрәләр килеп, тирмәләргә инеп китәләр ҙә, ашап-эсеп кенә ултыралар, халыҡ араһында уларҙы (ҡотлауҙан тыш) күреп тә булмай. Шул төркөмдө ашатып-эсереп оҙатҡас иһә байрамдың төҫө лә үҙгәрә, мәжбүр итеп алып килеп ҡуйылған күргәҙмәләр һәм башҡалар ҙа юҡҡа сыға. Хатта уйындар ҙа өҙөлөп ҡала, артистар китә, музыка һүнә.

Бөтөн был күңелһеҙ күренештәр бер бөгөн генә күҙәтелмәй һәм бер бөгөн генә туктатылмаҫ та. Ҡунаҡ булышыу, әлбиттә, ғәйеп түгел, тик дәрәжәле ҡунаҡтар, хөрмәтле түрәләр халыҡ араһында булһын, байрамды тирмәлә ашап-эсеүгә генә ҡормаһын ине. Был да үҙенә күрә бер мәҙәниәт, интеллектуаль кимәл бит. Тик... Был, кем әйтмешләй, һәр кемгә лә бирелмәй, күрәһең...

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

✓ Һәр кем үҙен ошо ерҙең, урмандың, йылғаларҙың хужаһы итеп тойорға тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа кешелә ошо ер хужаһы булыу тойғоһо юҡҡа сыҡты. Шуға ла даими иҫкәртеп тороу, тәрбиәләү кәрәк халыҡты.



ИНТЕРНЕТТАН



# ТӨШТӘР НИ ҺӨЙЛӘЙ?

■ Сағыу, ҡурҡыныс төштәр күреү баш мейеһе ауырыуҙары башланыуы тураһында ла һөйләй. Торонто университеты ғалимдары билдәләүенсә, йоҡоноң тиҙ фазаһы тайпылышы мәлендә баш мейеһе нейрондарына зыян килә. Был мускулдар тартышыуына килтерә. Йоҡлап ятҡан кешенең ҡайһы саҡта хәрәкәтләнә, ҡысҡыра башлауы ихтимал. Сәләмәт кешеләр ҙә ҡурҡыныс төштәр күрә, тик уларға төштәр ул тиклем тәьҫир итмәй.

■ Суонси университеты ғалимдары ҡайһы бер кешеләрҙә интернеттан сыҡҡас та ҡан баҫымы күтәрелеп, йөрәк тибеше көсәйеүен теркәгән. Тикшеренеүҙәрҙә 144 кеше ҡатнашҡан, улар 18 йәштән 33 йәшкә тиклем булған. Кемдәр интернетһыҙ тора алмай, уларҙа шунда уҡ 3-4 процентҡа ҡан баҫымы күтәрелгән. Белгестәр тағы ла шуны асыҡлаған: уртаса һәр кем интернетта 5 сәғәт ултырған. Ҡатнашыусыларҙың 20 проценты көн һайын интернет менән 6 сәғәт ҡулланған. Интернет үҙенең ауына ир-егеттәрҙе лә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла эләктерә икән. Улар күбеһенсә социаль селтәрҙәрҙә, интернет магазиндарҙа "ултыра".

■ Йель университеты ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды профиклактикалау өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәһә, медитация бындай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

■ Хроник ҡурҡыу кисереп йәшәгән ир-егеттәр онкологик сирҙәрҙән ике тапҡыр йышыраҡ үлә, ти Кембридж ғалимдары. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың хәүеф кисереп йәшәүе был сиргә килтермәй икән. Бөгөнгә көндә планетала йәшәүсе өлкән кешеләрҙең 5 проценты даими хәүеф тойғоһо менән йәшәй. Әлегә ғалимдар яман шеш менән невроз араһында бәйләнештең сәбәбен тапмаған, әммә улар гел ҡурҡып йәшәүҙең организмдың иммун системаһын ҡаҡшатыуына ышана. Шуға ла табиптар пациенттарына иғтибарлыраҡ булырға тейеш, ти улар.

■ Норвегия ғалимдары билдәләүенсә, әүҙем сәләмәт тормош алып барыусылар, шулай уҡ юмор тойғоһона эйә булыусылар оҙағыраҡ йәшәй икән. Улар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре менән һирәгерәк ауырый. Үҙ адресына әйтелгән тәнҡитте ҡабул итә белеүселәр ҙә сәләмәтерәк була. Һынауҙарҙа 50 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Шаярта белеүселәр һәм шаярыуҙы аңлаусылар инфекцион ауырыуҙар менән һирәк ауырый, уларҙа онкология ла осрамай. Әйткәндәй, бындай һөҙөмтәләр ир-егеттәргә тулыһынса тура килмәй. Йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре хәүефен бер нәмә лә түбәнәйтә алмай, ти табиптар. Стресс гормоны ир-аттарҙа өлкәнәйгән һайын күтәрелә бара икән. Ошонан сығып, белгестәр көслө затҡа тормошҡа ыңғай яҡтан ғына ҡарарға кәңәш итә.

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

**Ошо арала ғына Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы ағзалары - Ейәнсура һәм Учалы ағинәйҙәре тарафынан ике ҙур сара ойошторолдо. Ул сараларҙың үҙенсәлеге, әһәмиәте, зарурлығы ниҙә? Улар үҙенсәлекле, сөнки бындай саралар республикала, айырым районларҙа һәм ҡалаларҙа, гәҙәттә, министрлыҡтар, ойошмалар, предприятиелар, хакимиәттәр тарафынан ҙур сығымдар түгеп атҡарыла. Ә ағинәйҙәр уны бер ниндәй түләүҙәргә һәм бүләкләүҙәргә өмөт итмәй, оло энтузиазм менән, үҙҙәренең ғаилә ҡаҙнаһына инеп, үҙ сығымдарына үткәрә. Улар әһәмиәтле, сөнки был саралар ауыл йәмғиәтенә, халыҡ йолаларына, ғәмебеҙгә, рухыбыҙға йән өрә. Улар ысынлап та зарур, сөнки һуңғы йылдарҙа халыҡ рухын уятыу, тоҡандырып ебәреү кеүек фарыз ғәмәлдәр бары тик ағинәйҙәр кеүек энтузиастар ҡулына ғына ҡалып бара. Беҙ тотонмаһаҡ, кем тотона был эштәргә, тигән сәм дәртләндерә ағинәйҙәрҙе ошондай сараларға. Ниндәй әһәмиәтле һәм зарур эштәр башҡарҙы һуң был юлы Ейәнсура һәм Учалы ағинәйҙәре?**

# ДОНЪЯБЫҘҘЫ АҠЛАУСЫЛАР БУЛАЙЫҠ -

## сираттағы саҡырыу шулай яңғыраны

### Ейәнсурала үткән сара тураһында

Экология һәм айырым һаҡлауға алынған тәбиғәт биләмәләре йылына арналған был йыйынды ойошторор алдынан Ейәнсура районы ағинәйҙәре ойошмаһы етәксеһе Нурия Ҡунысбаева ҡорҙа ҡатнашасаҡ башҡа райондар ағинәйҙәре алдына шундай бурыс ҡуйҙы: тәбиғәт-әсәбеҙҙе, торған еребеҙҙе һаҡлау сараларын нисегерәк күҙаллайһығыҙ - шул турала программа-проекттар әҙерләгеҙ. Ә ағинәйҙәрҙә ундай программа-проекттар, әлбиттә, бар, сөнки уларҙың ойошма уставы буйынса тәғәйен бер бурысы - ул тәбиғәтте ҡурсылау, шул туралағы аҡылды, йола-ҡағиҙәләрҙе халыҡ араһында таратыу, экологик өмәләр ойоштороу бит. Шуның өсөн бер нисә район ағинәйҙәре бергә йыйылғанда (ә ундай йыйындар даими булып тора) һәр береһенең үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлашыуы ғәҙәти күренеш. Был юлы ла бына райондың Сөләймән ауылы янындағы матур тәбиғәт ҡосағына йыйылып, экология өлкәһендә ниҙәр эшләнеүе һәм эшләйәсәктәре тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлашты Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы, Йылайыр, Көйөргәҙе, Мәләүез, Ишембай, Күгәрсен, Хәйбулла райондарынан, Өфө, Ырымбур, Орск, Сибай ҡалаларынан килгән ағинәйҙәр. Ә башҡарылған эштәр исемлеге шундай: ағинәйҙәр шишмәләрҙе, һыу сығанаҡтарын таҙартҡан, ағас ултыртыу акцияларында ҡатнашҡан, күмәкләп дарыу үләндәре йыйырға сыҡҡан, "Ҡарға бутҡаһы", "Кәкүк сәйе" һәм тәбиғәт менән бәйле башҡа милли байрамдар ойоштороп, ауыл халҡын ҡырға алып сыҡҡан. Ейәнсура районы ағинәйе Зәриә Рахманғолованың, мәҫәлән, Ейәнсура аграр колледжы уҡыусыларын йәлеп итеп, балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә экологик тәрбиә саралары ойоштороуҙары тураһында һөйләүе ҡыҙыҡлы тойолдо. Учалы районы ағинәйҙәре ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева ҡайһы бер тәбиғи дауалау алымдары тураһында мәғлүмәт бирҙе, экологик яҡтан таҙа кейемдәр (мәҫәлән, һарыҡ йөнөнән кейеҙләп эшләнгән кейемдәр) кейергә, буҙа, ҡорот, ҡыҙыл эремсек кеүек экологик яҡтан таҙа ризыҡтар ашарға саҡырҙы. Уның тағы бер мәғлүмәте иғтибарға лайыҡ булды: ер-һыу атамаларын рус теленә әйләндергәндә танымаҫлыҡ итеп боҙалар, шуның өсөн тау түбәләре, йылға-күлдәребеҙ тирәһенә таштарҙан булһа ла дөрөҫ атамалы яҙыуҙар яҙайыҡ, тине ул. "Беҙ донъябыҙҙы һаҡлаусы түгел, донъябыҙҙы аҡлаусылар булайыҡ",- тигән саҡырыу ташланы һүҙенең аҙағында Мәрзиә Сәғит ҡыҙы.

Артабан йыйындың ҡунаҡтары сығыш яһаны. Тәбиғәтте һаҡлау буйынса үткәрелгән бар сараларҙың да әһәмиәтен һыҙыҡ өҫтөнә алып, Ейәнсура районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рауил Ҡунаҡбаев шулай тине: "Беҙ, район етәкселәре, тәбиғәтебеҙҙең һәр мөйөшөнә күҙ-ҡолаҡ була ла алмайбыҙҙыр, был тәңгәлдә беҙгә халыҡ үҙе ярҙам итергә, һәр кем үҙен ошо ерҙең, урмандың, йылғаларҙың хужаһы итеп тойорға тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа кешелә ошо ер хужаһы булыу тойғоһо юҡҡа сыҡты. Шуға ла даими иҫкәртеп тороу, тәрбиәләү кәрәк халыҡты. Бына был юҫыҡта беҙгә ағинәйҙәребеҙ ярҙам итә, улар беҙҙең бар сараларҙың башында йөрөй. Быйылғы Экология йылында ла беҙ уларҙы үҙебеҙҙең төп ярҙамсыларыбыҙ итеп күрәбеҙ..."

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева халҡыбыҙҙың элек-электән төрлө ғалимдарҙы, тарихсыларҙы, сәйәхәтселәрҙе һоҡландырған үҙойошоу һәләтен тергеҙеү зарурлығы, ағинәйҙәрҙе генә түгел, ә ир-егеттәребеҙҙе лә йәмәғәт эштәренә йәлеп итеү кәрәклеге тураһында һөйләне. Билдәле яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева тәбиғәт менән яҡынлаштыра торған йолаларыбыҙҙың ҡиммәтен билдәләп, ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған ер-һыуҙарыбыҙҙы киләһе быуындарға саф һәм бөтөн көйөнсә ҡалдырыу буйынса эштәргә өндәне. Яҙыусы Гөлсирә Ғиззәтуллина халыҡ араһындағы яман ғәҙәт - эскелек проблемалары буйынса әсенеүен белдерҙе, ағинәйҙәргә, айыҡлыҡ өсөн көрәште лә үҙегеҙҙең төп бурысығыҙ итеп алығыҙ, тип өндәште. Өфө врачы Рәшиҙә Йосопова өлкән кешенең һаулығын һаҡлау өлкәһендәге ҡатмарлыҡтар хаҡында мәғлүмәт еткерҙе: "Оло йәш уларға медицина хеҙмәте күрһәтеүҙән баш тартыуға сәбәп була алмай, - тине Рәшиҙә Мөхәмәт ҡыҙы. - Шуның өсөн ололарға шулай уҡ сифатлы медици-



***✓ Үҙебеҙгә үҙебеҙ быяла ситлек ҡороп, һуңынан уны ысынбарлыҡ тип ҡабул итәбеҙ. Әммә улар бары тик беҙҙең инаныуҙарыбыҙ ғына. Беҙ уларға ныҡ бәйлеме?***



на хеҙмәте күрһәтелергә тейеш. Бындай хоҡуҡтарығыҙҙан файҙаланырға оялмағыҙ".

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының мәғариф мәсьәләре буйынса белгесе Рәйсә Күзбәкова ағинәйҙәргә мәғариф өлкәһендәге хәлдәр, туған тел уҡытыуҙы яҡлаған закондар менән хәбәрҙар булырға саҡырҙы. "Ысын мәғәнәһендә туған телен, туған мәҙәниәтен яратҡан, ғөрөф-ғәҙәттәрен һанлаған кеше генә тәбиғәтен дә ярата. Илһөйәр, телһөйәр булмаған кешегә һинең тәбиғәтең дә кәрәкмәй. Балаларығыҙға туған телен, тарихын өйрәтмәһәк, уларға ошо ергә һөйөү тәрбиәләп буламы ни? Әгәр ҙә балаларығыҙ ысын илһөйәр, телһөйәр икән, улар был ерҙе, тәбиғәтте бысратыуға юл ҡуймаясаҡ. Киләсәк быуын өсөн дә эшләйек", - тине ул.

Шулай итеп, Ейәнсура районы ағинәйҙәренең район хакимиәте, мәҙәниәт бүлеге хеҙмәткәрҙәре менән берлектә ойошторған сараһы "бишле"гә баһаланды. Ә инде Ырымбур башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Йәғәфәр Яманһариндың баһаһы ҡыуандырҙы ла, уйландырҙы ла: "Һуңғы йылдарҙа эскән, ярым шәрә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы күреп, шул тиклем йәнем әрнеп йөрөй инем. Әсәләр милләт тотҡаһы булыуҙан туҡталмағайы, тип көйә инем. Ә ҡатын-ҡыҙы эскән милләт бөтөүгә йөҙ тотҡан милләт бит инде ул. Был ҡорға килеп, милли күлдәктәге ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ йөҙөндәге ҡотто, яҡты сырайҙы күреп, борсолоуҙар юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Аллаға шөкөр, милләтебеҙ йәшәй былай булғас!"

## Учалыла үткән сара тураһында

Учалы ҡалаһының Ижад һарайында йыл башында старт алған "Яға" конкурсына йомғаҡ яһалды. Бәйге Учалы телевидениеһының 25 йыллыҡ юбилейы айҡанлы канал тарафынан һәм БДУ-ның Учалы вәкиллеге, райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, ҡала хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге менән берлектә ойошторолдо. Осталыҡҡа һынау районыбыҙҙың көньяғынан төньяғынаса төрлө һөнәр эйәләрен, төрлө йәш вәкилдәрен бергә йыйҙы.

"Был конкурсты үткәреү идеяһы былтыр Өфөлә үткән "Селтәр" республика бәйгеһенән һуң тыуғайны, - тип һөйләне беҙгә Учалы районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева. - Өфөнән "Был бәйгене мотлаҡ үҙебеҙҙә ойошторасаҡбыҙ!" тигән сәм менән ҡайттыҡ. Ошо сәмде күтәрмәләп алғаны һәм ең һыҙғанып уны ойоштороуға ярҙам иткәндәре өсөн урындағы телевидениеға, ҡоролтайға, мәҙәниәт бүлегенә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Ошондай хуплауҙы тойған, быға саҡлы милли кейемдәр тегеп алған район ағинәйҙәре дәррәү тотондо ла инде был эшкә..."

Шулай итеп, йыл башынан бәйгегә әҙерлек эштәре башлана. Иң тәүҙә районда осталыҡ дәрестәре үткәрелә. Унда ҡатнашыусыларға борондан һаҡланып ҡалған яғалар өлгөләре күрһәтелә, уларҙың нисә өлөштән торғаны, элементтарҙың нимә аңлатыуы тураһында мәғлүмәт бирелә. Алған белем нигеҙендә, шулай уҡ бер-береһе менән тәжрибә уртаҡлашып, ярҙамлашып, ағинәйҙәр, остабикәләр ҡул эштәренә тотона. Ә Учалы телеканалы улар тураһында тапшырыуҙар әҙерләп, район халҡына тәҡдим итә бара. Бөтәһе был дәүер эсендә 50-нән ашыу сюжет экранға сыға. Һөҙөмтәлә, баһалама ағзалары 70-кә яҡын ҡул эшен баһалай һәм бәйге финалына сығара.

- Төрлө төбәктә, төрлө ырыуҙа төрлөсә атайҙар башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының был биҙәүестәрен, шул уҡ ваҡытта "Селтәр", "Һаҡал", "Яға"ның һәр ҡайһыһының айырылып торған үҙенсәлеге бар. Мәҫәлән, Учалы, Силәбе, Ҡурған яҡтарына хас яға, әйтәйек, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы селтәр менән сағыштырғанда трапеция формаһында булыуы менән айырыла. Беҙҙең биҙәүестең үҙенә атама биргән яғаһы бар, ә селтәр муйынға бау менән бәйләп ҡуйыла. Беҙ районыбыҙ музейҙарында, шәхси ҡулдарҙа һаҡланған 50-гә яҡын яғаны эҙләп таптыҡ, өйрәндек, сағыштырҙыҡ. Иң боронғо өлгө 20-се быуат баштарына ҡайтып ҡала. Тикшереү һөҙөмтәләрен китап итеп сығарырға ниәтләйбеҙ. Үҙ ерлегебеҙҙең биҙәүесе юғалыуына, уның төп нөсхәһе үҙгәреүенә ирек ҡуймаҫҡа тейешбеҙ. Ошо маҡсатта "Яға" конкурсы ойошторолдо ла инде. Ярыштың төп шарты - биҙәүестең Учалы ерлегенә тап килеүе ине. Тәҡдим ителгән яғаларҙың өстән бер өлөшө талаптарға яуап бирҙе. Ҡалғандарға иһә эшләйһе, төҙәтәһе, өйрәнәһе бар әле, - тине баһалау комиссияһы рәйесе, БДУ-ның Учалы вәкиллеге уҡытыусыһы Азат Ғарипов.

Традицион яғаға нигеҙ итеп башлыса ҡулдан һуғылған тула алынырға тейеш. Тик конкурсанттар араһында йоланы күҙәтеүселәр бер нисәү генә булған, ә ҡалған күпселек уның урынына ҡалын драп тауар ҡулланған. Тәңкә-мәрйендәрҙе ҡулдан һуғылған тулаға теҙеүселәр (йәғни, боронғо кәсепте тергеҙеүселәр) башҡаларҙан айырмалы рәүештә 5 балға күберәк баһа алған. Шулай уҡ, баһалама ағзалары ҡул эштәренең биҙәлешенә, башҡарылыу осталығына ла етди иғтибар биргән. Мәҫәлән, боронғо яғаларҙы ҡурай йә башҡа үҫемлектәр менән биҙәү булмаған, тәңкәләр өҫтән-аҫҡа билдәле тәртиптә, бер-береһенә тығыҙ итеп баҫылған. Рәттәрҙең йәки ҡорҙарҙың һаны эйәһенең матди хәленән сығып 7-нән 13-кәсә еткән. Кендек буйы селтәр менән генә һырылған, унда ҙур булмаған буш урын йәки пәрҙә ҡалдырылған.

Бәйгене йомғаҡлау тантанаһы йыр-бейеү, йылы теләктәр, рәхмәт һүҙҙәре, иҫтәлекле бүләктәргә бай булды. Конкурсанттарҙы район хакимиәте башлығы урынбаҫары Зөһрә Гордиенко, Өфөнән килгән ҡунаҡтар - Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева, "Матурлыҡ һәм һаулыҡ" салоны директоры Зилә Аксенова (яҡташыбыҙ), "Тамыр" балалар студияһы рәссамы Сәлимә Тулыбаева, Учалы телевидениеһының баш мөхәррире Лариса Самойловская һәм башҡа ҡунаҡтар тәбрикләне. Бәйгелә ҡатнашыусыларҙың береһе лә иғтибарһыҙ ҡалманы, уларға дипломдар, Рәхмәт хаттары һәм бүләктәр тапшырылды.

Конкурстың Гран-приһына ҡаланан Альбина Ғәлиева лайыҡ булды. Еңеүсе Учалы телеканалынан теген машинаһы менән бүләкләнде. "Былтыр үҙемә башҡорт костюмы тектерҙем, - тип һөйләне ул.- Уны тулыландырып биҙәүес яһау теләге бар ине. Үҙебеҙҙә конкурс иғлан ителгәс, ҡатнашырға булдым. Иҫтамғол ауылында табылған яға өлгөһөндә башҡарҙым эшемде. Тәүҙә үҙаллы өйрәнеп, тула һуҡтым. Бисер, тәңкәләр, аҡыҡ менән тейешенсә биҙәнем. Һәр өлөшөн, элементын шартына килтереп атҡарырға тырыштым. Беҙҙең ерлектең яғаһына яҡын булыуы конкурста Гран-при алыуға ярҙам иткәндер. Аллаға шөкөр, өс ҡыҙым бар, уларҙың өсөһөнә лә яғалар эшләп бирергә ниәт итәм".

Ғөмүмән, ағинәйҙәр, остабикәләр белдереүенсә, "Яға" ярышында ҡатнашыу уларҙың һәр ҡайһыһы өсөн онотолмаҫ ваҡиға булып хәтерҙәрендә ҡаласаҡ. Һәм, әлбиттә, матурлыҡҡа битараф булмаған әсәй-өләсәйҙәр шөғөлөн, йәғни башҡорт ҡатын-ҡыҙының ҡотон башҡаларға ла "йоҡторасаҡ" әле улар.

**Гөлшат МОТАҺАРОВА.**



УҢЫШ ҠАҘАН

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Ҡулайлашырға өйрәнегеҙ!

Беҙ даими үҙгәреп торған донъяла йәшәйбеҙ. Бер миҙгелдә икенсеһе алмаштыра, инфляция кимәле йә төшә, йә күтәрелә, йә кешеләрҙе эшкә алалар, йә эштән ебәрәләр... Йыһандағы тормоштоң нигеҙ ҡануны булып тап үҙгәреште тороуын аңларға ваҡыт һымаҡ. Әммә, киреһенсә, былар беҙҙе асыуландыра ғына.

Өлкән синыфтарҙа биология дәрестәрендә тәбиғи һайлау ҡанунын өйрәндек, йәғни тәбиғи мөхиттә булған үҙгәрештәргә яраҡлашыу зарурлығын аңланыҡ. Был ҡанун йә яраҡлашаһың, йә үләһең, тигәнде аңлата. Әммә уҡытыусыларҙың береһе лә беҙгә: "Ғүмерлек һабаҡты иҫегеҙҙә тотоғоҙ - ҡулайлаша белергә кәрәк!" - тип өйрәтмәй.

Бөгөн ғәҙел булған нәмә иртәгәһенә хата булыуы ихтимал. Бөгөн файҙалы булғаны, иртәгә кәрәкмәйәсәк. Был тормошта берҙән-бер константа бар - үҙгәреүсәнлек. Ҡыҫҡаһы, бәхетле кешеләр үҙгәрештәргә әҙер һәм уны көтә! Тап шундайҙар: "Ни өсөн минең артабанғы биш йылым үткән биш йылыма оҡшарға тейеш әле", - тип уйлай. Тормош - беҙҙең инаныуҙарыбыҙ көҙгөһө. Тирә-яҡ мөхиткә ҡарата булған иң изге инаныуҙарыбыҙҙы үҙгәртеү менән тотош тормошобоҙ тейешенсә үҙгәрә башлай.

### Инаныуҙар

Үҙҙәренең инертлығын аҡлап, кешеләр: "Мин шуны-шуны эшләй алмайым, сөнки..." - ти. Бик йыш ундайҙарҙан: "Шулай булып тыуғанмын инде", - тигән һүҙҙәр ишетәбеҙ. Инаныуҙарҙың ниндәй көскә эйә икәнлеген балыҡтарҙы күҙәтеп тә асыҡларға мөмкин. Аквариумды быяла менән уртаға бүлеп, уның бер яғына барракуданы, икенсе яғына барабульканы ебәрәйек. Барракуда шунда уҡ икенсе яҡтағы балыҡҡа ташланасаҡ, әммә мороно менән быялаға барып бәреләсәк. Урап килеп, тағы ла һөжүмгә күсәсәк. Бер нисә аҙнанан һуң, барракуда моронон ауырттырып, барабулькаға һунар итеүҙән яфа икәнен аңлаясаҡ. Хәҙер инде аквариумды уртаға бүлеп торған быяланы алырға ла була. Сөнки барракуда барыбер үҙенең территорияһында ғына йөҙөп йөрөйәсәк. Ул, бер нисә сантиметр эргәһендә генә тәмле аҙыҡ булыуына ҡарамаҫтан, астан үлергә әҙер буласаҡ, сөнки мөмкинлек сиктәрен, ул яҡҡа уны бәрәү ҙә сығармаясағын яҡшы аңлаған.

Үҙегеҙҙә йәшәгән барракуда йәлме? Беҙ ҙә шулай йәшәйбеҙ бит. Әлбиттә, беҙ танауыбыҙҙы быяла бүлмәгә бәрмәйбеҙ, уның урынына тормош юлында ата-әсәләр, уҡытыусылар, дуҫтар бар. Улар беҙгә нимәгә һәләтле икәнлегебеҙҙе аңлатып ҡына тора. Әммә иң ҙур ҡаршылыҡ - ул беҙҙең инаныуҙарыбыҙ. Улар менән үҙебеҙгә сик һыҙабыҙ, ошо сиктәрҙе һаҡлайбыҙ һәм уларҙы аша атлап сығырға теләмәйбеҙ.

Үҙебеҙгә үҙебеҙ быяла ситлек ҡороп, һуңынан уны ысынбарлыҡ тип ҡабул итәбеҙ. Әммә улар бары тик беҙҙең инаныуҙарыбыҙ ғына. Беҙ уларға ныҡ бәйлеме? Ә һеҙ берәй ҡунаҡта дини йәки сәйәси темаға һүҙ башлап ҡарағыҙ!

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 12 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "А зори здесь тихие..." Худ. фильм (12+).
10.00 Новости.
10.10 "Весна на Заречной улице". Худ. фильм.
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Дорогой мой человек". Мелодрама.
14.20, 15.15 "Экипаж". 2 серии. Фильм-катастрофа (12+).
17.15 "Лучше всех!" "Рецепты воспитания".
18.20 "Голос. 5 лет".
21.00 "Время".
21.30 "Крым. Небо Родины". Док. фильм (12+).
23.15 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр.
00.25 "Главный". Драма (12+).
02.30 "Не оглядывайся назад". Худ. фильм (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.05 "Кубанские казаки". Худ. фильм.
06.25 "Наследница". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
10.20 "София". 8 серий. Историко-драматический сериал (16+).
14.00 Москва. Кремль. Церемония вручения Государственных премий Российской Федерации.
15.00 "Вести".
15.20 "София". Продолжение сериала (16+).
20.00 "Вести".
21.10 "Время России". Фильм Андрея Кондрашова (12+).
22.35 "Александр Невский".
23.30 Большой праздничный концерт ко Дню России. Трансляция с Красной площади.
01.30 "Территория". Приключения (12+).

### БСТ

**07.00 "Уфа - любимый город!" (12+).**
**07.45, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 Мультфильм.**
**09.30 "Салават Юлаев". Худ. фильм (12+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Долгое-долгое детство". Худ. фильм (6+).**
**13.00 "Енмеш", "Кровать" (12+).**
**13.45 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.15 "Семья и город, растем вместе!" Концерт ДТРС "Тамыр".**
**14.45 "Гузэлкэй" (6+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30 "Орнамент" (6+).**
**17.00 "Байкальская неделя" (12+).**
**17.45 "Бизнес проба" (12+).**
**18.00 Муз. фильм "Кружевное облако".**
**18.45 "Это мы!" (6+).**
**19.16 "Бай" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Ловец ветра". Худ. фильм (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Лик Салавата" (12+).**
**23.00 "Беглецы". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 Юджин О'Нил. "Любовь под вязами" (12+).**

## 13 ИЮНЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.30 "Время".
21.30 "Мажор". 5-я и 6-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.35 "Дело СК1". Криминальная драма (16+).
02.50, 03.05 "Домашняя работа". Худ. фильм (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Защита Полежаева". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Плюс любовь". Часть 1-я. Мелодраматический сериал (16+).
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.55 "Две зимы и три лета". Драматический сериал (12+).
03.45 "Наследники". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Криминальный роман". Сериал (16+).**
**11.00 "Следопыт" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью"**
**15.00 "Дорога к храму" (6+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Преступления и проступки". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.15 М.Мусифуллин. "Ночь, как вся жизнь" (12+).**

## 14 ИЮНЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" Брачное шоу(16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". Криминальный сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.30 "Самозванцы". Комедия (16+).
02.25, 03.05 "Потопить Бисмарк". Худ. фильм (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Плюс любовь". Часть 2-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 Торжественная церемония закрытия XXVIII кинофестиваля "Кинотавр".
02.55 "Две зимы и три лета". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Криминальный роман". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью"**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (12+).**
**17.45 Док. фильм "Вертолетчик" (12+).**
**19.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Путешествие капитана Фракасса". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.45 Д.Юлтый. "Ҡарағол" (12+).**

## 15 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
10.00 "Жить здорово!" (12+).
11.05 "Модный приговор".
12.10, 03.15 "Наедине со всеми" (16+).
12.55, 17.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Прямая линия с Владимиром Путиным.
17.00 Новости (с субтитрами).
18.00, 04.10 "Мужское/Женское" (16+).
19.00 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 9-я и 10-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.40 Ночные новости.
24.00 "Арктика. Выбор смелых" (12+).
01.0, 03.050 "История Антуана Фишера". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Вести".
14.00 Прямая линия с Владимиром Путиным.
17.00 "Вести".
19.30 "60 минут". Ток-шоу (12+).
22.00 "Плюс любовь". Часть 3. Мелодраматический сериал (12+).
23.55 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.55 "Две зимы и три лета". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Криминальный роман". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью"**
**15.00 "Неизвестный Башкортостан"**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**19.15 "Башҡорттар" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Под предварительным следствием". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.00 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.00 М.Карим. "Салават" (12+).**

## 16 ИЮНЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.05 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 11-12-я, заключительная, серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 "Фарго". Новый сезон (18+).
01.35 "Порочный круг". Боевик (16+).
05.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Товар - деньги - товар". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Попутчик". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Аншлаг и Компания" (16+).
23.35 "Москва - Лопушки". Мелодрама (12+).
01.30 "Моя любовь". Мелодрама (12+).
03.50 "Наследники". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Криминальный роман". Сериал (16+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Т.Гарипова. "Убежавшие в счастье" (12+).**
**13.45 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-сага" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Перекличка".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Моя планета Башкортостан"**
**17.15 К 95-летию образования судебной системы в РБ (12+).**
**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирма".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Интервью" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (6+).**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**23.30 "Близнец"**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 И.Дильмухаметов, А.Дильмухаметова. "Каһым түрә" (12+).**

## 17 ИЮНЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Один дома: праздничное ограбление". Худ. фильм.
06.00 Новости.
07.40 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Смешарики. Новые приключения".
08.40 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Николай Дроздов. Шесть мангустов, семь кобр и один полускорпион" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Вокруг смеха".
15.45 "Угадай мелодию" (16+).
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Точь-в-точь". Шоу перевоплощений (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Полный пансион". Комедия (16+).
00.30 "Нецелованная". Худ. фильм (16+).
02.25 "Прощай, Чарли". Худ. фильм (16+).
04.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.15 "Я или не я". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Шанс". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Так поступает женщина". Мелодрама (12+).
01.00 "Отец поневоле". Мелодрама (12+).
03.00 "Марш Турецкого-2". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30, 22.30, 01.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Битва за планету Терра" (12+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.00 "У дачи" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Бай бакса" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**17.00 Н.Гаитбаев. "Откройте, милиция!" (12+).**
**19.00, 20.00 Международный фестиваль искусств "Uf-Kurifest" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**21.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "В поисках сокровищ нибелунгов". Худ. фильм (16+).**
**02.15 А.Атнабаев. "Дети мои" (12+).**

## 18 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "2 билет на дневной сеанс". Худ. фильм.
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым(12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.10 "Теория заговора" (16+).
14.00 "Страна Советов. Забытые вожди" (16+).
16.20 "Призвание". Премия лучшим врачам России.
17.20 "Аффтар жжот" (16+).
19.25 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где Когда?" Летняя серия игр.
23.40 "Тайные общества. Код иллюминатов" (16+).
00.40 "Жюстин". Драма (16+).
02.55 "Модный приговор".
03.55 "Наедине со всеми" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Я или не я". Худ. фильм (12+).
07.00 "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.10 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
13.10 "Семейный альбом" (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Райский уголок". Мелодрама (12+).
16.15 "Мирт обыкновенный". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Война и мир Александра I. Благословенный старец. Кто он?" Док. фильм (12+).
01.25 "Облако-рай". Драма (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!"**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Колобанга".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Физра".**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Байтус" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Йәйләү" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Млечный путь" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Будьте здоровы!" (12+).**
**17.30 Б.Брехт. "Кавказский меловой круг" (12+).**
**19.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Колыбель искусства - пещера Шульган-Таш" (6+).**
**23.45 Международный фестиваль искусств "Этноночь" (12+).**
**01.30 "Повелитель иллюзий". Худ. фильм (16+).**

Халҡыбыҙҙың мәшһүр йыраусыһы, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны
**Мөхәмәтйән Абдулла улы Ҡаҙаҡбаевтың**
вафаты айҡанлы тәрән ҡайғы белдерәбеҙ һәм ғәзиз балаларының, туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

**Ишембай районынан Марс, Харис, Ғәли, Хәйҙәр, Альберт, Әхәт Шаһиевтар.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ҺӘР КЕМ...

## үҙ иленә кәрәк булһын

**"Кем ул ысын патриот?" тип һораһалар, ысын патриоттарға хас булған сифаттарҙы һанап сыҡҡандан һуң, "Бына беҙҙең Әлиә кеүек!" тип өҫтәп ҡуйыр инем. Сөнки ысын патриот - халҡының тарихын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен яҡшы белгән, гөрәф-ғәҙәттәрен тотҡан, үҙ илен һөйгән һәм уның данын күтәргән шәхес ул. Хатта тыуған иленән ситтә булһа ла. Әлиә менән Вәсил Ишдәүләтовтар - Сибай институтының 2016 йылғы сығарылыш студенттары. Уҡыуҙарын тамамлағас, йәш ғаилә алыҫ Саха Республикаһы (Яҡутия) яҡтарына юллана. Әлеге ваҡытта икеһе лә Ленск ҡалаһы мәктәбендә һөнәрҙәре буйынса эшләй: Вәсил - психолог, ә Әлиә - рус теле уҡытыусыһы һәм балалар баҡсаһында логопед. Ленск ҡала мәҙәниәт һәм йәштәр сәйәсәте идаралығы тарафынан "Йортобоҙ - Рәсәй" тип аталған милли мәҙәниәттәр конкурсында Әлиәнең Гран-при яулауын ишетеп, уның менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**➔ Сибай институтында уҡыу дәүерендә лә һин һәр сараның йәме инең. Оҫта ойоштороусы һәм алып барыусы, "Урал батыр" эпосын ятлап һөйләү бәйгеләре, төрлө кимәлдәге олимпиадалар еңеүсеһе, уҡыу алдынғыһы, тип хәтерләйбеҙ һине. Был конкурс, уның шарттары тураһында булыр беренсе һорауыбыҙ.**

- Был конкурс ҡалала беренсе тапҡыр үткәрелде. Башҡа милләт вәкилдәрен халҡыбыҙҙың мәшһүр ҡомартҡылары, гөрәф-ғәҙәттәре менән таныштыра алыу мөмкинлеге итеп ҡабул иттем уны. Был конкурста ҡатын-ҡыҙҙар ғына ҡатнаша ала ине, сөнки милли традицияларҙы һаҡлаусы һәм үҫтереүсе булараҡ, ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге статусын күтәреү ине сараның төп маҡсаты. Һайлап алыу турында талаптар ҡаты ҡуйылды, һәр кемгә тыуған телен, милли аш-һыуын, милли кейемен, йолаларын, гөрәф-ғәҙәттәрен, һүҙ сәнғәтен белеү мотлаҡ ине. Милли кейемдә сығыш яһау, милли музыка ҡоралында уйнай белеү - шулай уҡ мотлаҡ талап ине. Ҡатнашыусыларҙың төрлө йәштә һәм төрлө һөнәр эйәләре булыуы ла ярышты ҡыҙыҡлы итте. Һәр милләт вәкиле "Ҡунаҡ ҡаршылау", "Сәй эсереү, ҡунаҡ һыйлау" йолаларын күрһәтте, "Милли традицияларҙың ҡул эштәрендә сағылышы", шулай уҡ тағы бер конкурс сиктәрендә беҙ халҡыбыҙҙың йыр, бейеү һәм һүҙ сәнғәтен сағылдырырға тейеш инек. Мин "Урал батыр" эпосын башҡорт һәм рус телдәрендә һөйләп ишеттерҙем һәм ҡумыҙҙа уйнаным.

**➔ Был конкурсты ниндәйҙер кимәлдә "Һылыуҡай" конкурсы менән сағыштырып буламы?**

- "Һылыуҡай" кеүек конкурстар төп иғтибарҙы ҡыҙҙарҙың буй-һынына, йөҙ күркәмлегенә йүнәлтә. Уларҙың һәләттәре иҫәпкә алынмай ҙа тиерлек. Ә был конкурста беҙ оҫталыҡты, һүҙгә маһирлыҡта көс һынаштыҡ. Минә ҡалһа, был конкурс хатта ҡыҙығыраҡ та, ижади эшләргә мөмкинлек бар. Был конкурста мин үҙ телемдә үҙемдең халҡым тураһында һөйләй алдым.

**➔ Ленск ҡалаһында башҡорт милләтен берләштергән ойошма бармы?**

- Эйе, бында башҡорттар күп кенә. Мин әлегә мәктәп уҡытыусылары менән генә таныш, аралашып торабыҙ. Башҡорттар ойошмаһы "Башҡорт диаспораһы" тип атала. Дөрөҫөн әйткәндә, әүҙемлек юҡ тиерлек: берҙәмлек көнөндә сығыш яһаныҡ, Наурыз байрамында башҡорт халҡы исеменән ҡотланыҡ, ә айырым саралар үткәрелгәне юҡ әле. Бында ситтән килгән халыҡтар бик күп. Улар өсөн мөмкин тиклем шарттар булдыралар, йәш белгестәргә айырыуса ярҙам итергә тырышалар. Мәҫәлән, администрация тарафынан (ҡайҙа эшләүгә ҡарап) ҡуртымға фатир алыуға аҡсалата ярҙам күрһәтелә. Йәшәү, эшләү шарттары бөтәһенә лә бер былай. Шулай ҙа ситтә, үҙ мөхитеңдән алыҫта булыуы иң ауырлыҙыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Был тарафтарҙа ҡалырға уйығыҙ юҡмы?" тигәнгә "Юҡ", тип ышаныслы яуап бирә Әлиә. "Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хәҙерге ҡатмарлы заманда йәштәрҙең күбеһе ошолай ситтә эш эҙләргә мәжбүр. Шулай ҙа беҙ үҙебеҙҙең еребеҙгә үҙебеҙ хужа булырға тейешбеҙ. Матди хәлдәрен яҡшыртып алғас та, йәштәр тыуған яҡтарына юлланһын ине", - ти ул. Беҙ ҙә был фекерҙе хуплайбыҙ.**

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА,
Сибай институтының башҡорт һәм рус филологияһы кафедраһы уҡытыусыһы.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# УҠЫУ ЙОРТОНОҢ...

## тағы бер тәрбиә сараһы



**БДУ-ның Сибай институты быйыл шаулатып-гөрләтеп ун дүртенсе һабантуйын үткәрҙе. Улар үткәргән был сара йылдан-йыл сағыуыраҡ була бара. Районлар һабантуйҙарҙа алдынғы хеҙмәтсәндәрен ҙурлаһа, институт та ошо уҡ йоланы тотоп, алдынғы студенттарын күтәрмәләй, ҙурлай, бүләкләй. Бүләкләүҙәргә ҡаланың төрлө ойошмалары, предприятиелары етәкселәре лә ҡушыла.**

Сибай институтының, уҡыу-уҡытыу эштәре менән генә сикләнмәйенсә, милли мәҙәниәтте, милли спорт төрҙәрен, милли уйын-йолаларҙы үҫтереүсе һәм пропагандалаусы үҙенсәлекле үҙәк булыуы билдәле инде. Маҡсат - юғары белем биреү генә түгел, ә иң беренсе сиратта йәш быуындың рухын үҫтереү. Бары рухы сәләмәт булғандарҙың ғына белем эстәй, эшләй, тормош ауырлыҡтарына ҡаршы тора алырлыҡ шәхестәр була алырын инде үҙ тәжрибәләрендә иҫбатлаған был коллектив. Шуға ла һәр сарала институттың уҡытыусылары һәм хеҙмәткәрҙәре лә студенттар менән бергә ҡайнай. Был юлы ла улар үҙ тәжрибә өлгөһөнә тоғро ҡалды. БДУ-ның Сибай институты директоры, профессор Зиннур Йәрмөхәмәтов, коллективын һәм йәш быуынды ҡотлап, уҙған йыл эштәренә йомғаҡ яһап, киләсәккә ҡуҙаллап, һүҙ алды. Етәксе шулай уҡ иң яҡшы студенттарҙан башлап, иң яҡшы уҡытыусы, хеҙмәткәр, ГТО нормаһын тапшырыусыларҙы ла билдәләп үтте. Бер һүҙ менән әйткәндә, береү ҙә билдәләнмәйсә ҡалманы.

Йыйылған халыҡ, ҡунаҡтар студенттарҙың "Төйәләҫ" уҡыу-тәжрибә комплексында ат спорты менән шөғөлләнгән йәштәрҙең ат сабышын, биш факультет студенттары тарафынан ойошторолған флешмобты кинәнеп тамаша ҡылды. Тирмәләрҙә, уларҙың йыһаздарын, аш-һыу, ҡул эштәре күргәҙмәләрен ҡыҙыҡһынып ҡарап сыҡты. Студенттарҙың оноторла барған, артыҡ популяр булмаған, әммә шул уҡ ваҡытта мөһимлеген дә юғалтмаған йолаларҙы һөйләп йә уйнап күрһәтеүе лә күптәрҙең иғтибарын йәлеп итте. Ҡыҫҡаһы, йәштәр тамашаһы ғына булманы был байрамда, ә ойоштороусы һәм ҡатнашыусы булды. Ә был тәрбиә эшендә иң мөһиме лә инде.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 июнь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+
**15 июнь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро), әкиәт. Башлана 10.30 0+
**15 июнь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+
**16 июнь "Алтын асҡыс-remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. Башлана 10.00, 12.00 0+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 июнь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 10.30 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**10 июнь "Девочка и пришелец"** (Б. Хан) 0+
**11 июнь "Три поросенка"** (С. Михалков) 0+
Спектаклдәр 12.00, 14.00 башлана

ИҒЛАН

Башҡортостан Республикаһының дәүләт автономиялы һаулыҡ һаҡлау учреждениеһы "3-сө Балалар стоматология поликлиникаһы" (Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 16/1) ошонда теркәлгән 0 йәштән алып 18-ҙе тулмаған балалар һәм үҫмерҙәрҙе ҡабул итә.

Поликлиникала медицина хеҙмәте учреждениеның эш режимына һәм белгестәрҙең эш графигына ярашлы күрһәтелә. Эш ваҡыты: дүшәмбе - йома 8.00 - 20.00. Шәмбе - 8.00 - 16.00.

1 йәшкә тиклемге пациенттар мөрәжәғәт иткән көндә сиратһыҙ ҡабул ителә. Алдан яҙылырға кәрәкмәй. 1 йәштән өлкән балалар медицина тикшеренеүе үткәндә шулай уҡ алдан яҙылмайынса көнөндә үтә. Тиҙ ярҙам мөрәжәғәт иткән көндә күрһәтелә.

**Табипка яҙылыу өсөн:**
- www.gosuslugi.ru йәки rb.k-vrachu.ru электрон адресы аша интернет порталы;
- (347) 246-32-18 телефоны аша поликлиника регистратураһы;
- Кеҫә телефондары аша 09383 номеры, стационар телефондар өсөн 246-93-83 номеры аша (поликлиниканың коды - 173) контакт үҙәге;
- Поликлиникала урынлашҡан Инфомат аша.

Мотлаҡ медицина страховкаһы буйынса медицина ярҙамы алыу өсөн 14 йәшкә тиклем балаларға тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ, 14 йәштән өлкәндәргә РФ гражданины паспорты менән мотлаҡ медицина страховкаһы полисы кәрәк.

**Хөрмәтле пациенттар!** 3-сө Балалар стоматология поликлиникаһының эшен баһалау өсөн "Медицина ойошмаһының амбулатор шарттарҙа күрһәткән хеҙмәттәренең сифатын баһалаусы анкета"ны тултырыуығыҙҙы һорайбыҙ.

Анкетаның электрон варианты РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы сайтының **www.rosminzdrav.ru** "Медицина ойошмалары хеҙмәттәренең сифатын бойондороҡһоҙ баһалау" бүлегендә һәм поликлиниканың рәсми сайтында ufa-dsp3.ru урынлашҡан. Анкетаны поликлиника регистратураһында ла ала алаһығыҙ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Июнь (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (17) дүшәмбе | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 13 (18) шишәмбе | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 14 (19) шаршамбы | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 15 (20) кесе йома | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 16 (21) йома | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 20:53 | 23:23 |
| 17 (22) шәмбе | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 18 (23) йәкшәмбе | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**62. Фәнил Әсәновтың "Ер аҫтында ай ярым" повесы.**
**63. Ноғман Мусиндың "Мин дә ата балаһы" повесы.**
**64. Раил Байбулатовтың "Оятыңдан үлмәй тор!" повесы.**
**65. Нурислам Шәйхуловтың "Хәүефле сәфәр" китабы.**

"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһының исемлегенә бер нисә авторҙың әҫәрҙәрен тәҡдим итәм, һәр береһе уҡыған кешегә файҙалы, ҡыҙыҡлы булыр. Фәнил Әсәновтың "Ер аҫтында ай ярым" исемле мажаралы повесын балалар бик яратып уҡый. Ноғман Мусиндың "Мин дә ата балаһы" повесы ата-әсәләрҙең үҙенә лә ҡыҙыҡлы булыр, унда ир балалар тәрбиәһе буйынса аҡыллы фекерҙәр табылыр. Раил Байбулатовтың "Оятыңдан үлмәй тор!" повесын да был исемлеккә мотлаҡ индерергә кәрәк, сөнки әҫәр үҫмерҙәргә, юғары синыф уҡыусыларына тәғәйенләнгән. Әҫәрҙә автор хеҙмәт-тәрбиә колонияһына эләгеп аяныс тәҡдиргә төшкән үҫмер тормошон, ауыр уй-кисерештәрен һүрәтләй.

Нурислам Шәйхуловтың "Хәүефле сәфәр" китабы "Башҡорт китабы топ-100+" исемлегенә индерелһә ине. Был китаптың йөкмәткеһенә "Урман ҡосағында" хикәйәһен айырым билдәләп китергә кәрәк. Автобиографик планда яҙылған был әҫәрҙе йәш быуын һуғыш осоро балалары яҙмышын, күргән ыҙаларын белһен өсөн уҡырға тейеш, миненсә", - тип яҙа Өфө ҡалаһынан Әлфиә Зәбдинова.

**66. Яныбай Хамматовтың "Салауат" һәм "Һырдарья" романдары.** "Яныбай Хамматовтың һәр әҫәре китап уҡырға яратыусы кеше күңеленә хуш килерлек. Уның бер китапҡа тупланған "Салауат" һәм "Һырдарья" тарихи романдары ла башҡорт халҡының тарихи үткәне, билдәле шәхестәре тураһында белергә теләгән кеше өсөн мауыҡтырғыс буласаҡ. Салауат Юлаевтың тормошо, бригадир дәрәжәһенә күтәрелгән йәш егеттең ихтилалға ни өсөн ҡушылыуы, азатлыҡ өсөн көрәше "Салауат" романында тасуирлана. Был романды уҡып, бер аҙға булһа ла, Салауат батыр йәшәгән осорға барып эләгәһең һәм унда тап автор һүрәтләгән кеүек булғандыр, тип хис итәһең. "Һырдарья" романы башҡорт халҡының мәғрифәтсе шағиры Мифтахетдин Аҡмулланың тормош юлы тураһында. Әҫәрҙә шағир йәшәгән осор, шул заманда йәшәгән кешеләр аша уларҙы борсоған мәсьәләләр, халыҡтың көнкүреше һәм рухиәте сағылдырыла. "Салауат" һәм "Һырдарья" романдары ике төрлө осорҙа йәшәгән шәхестәр тураһында яҙылһа ла, улар икеһе лә үҙ халҡы өсөн бөтә йөрәген, күңелен һалып, хатта йәнен фиҙа ҡылырға әҙер булып хеҙмәт итеүен тасуирлай. "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһының исемлегенә индереп, киләсәктә йәш быуындарға ошо китапты уҡырға тәҡдим итеүемдең сәбәбе халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәрен иҫтән сығармау, улар тураһында мәғлүмәттәрҙе әҙәби әҫәрҙәр аша ла алыу, рухи тәрбиәгә бәйле", - тип яҙа Лилиә Дәүләтбаева.

"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иңиңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АУЫҘЫҢА КЕРГӘНДЕ...

## сәйнәргә иренмә

Кире кешенең аҡылы кермәле лә сыҡмалы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешеләр мәңге йәшәргә түгел, бер ҡасан да үлмәҫкә теләй.

**(Станислав Лем).**

Арзан урындарҙа ултырыусылар, ҡулдарығыҙҙы сабып алҡышлағыҙ. Ҡалғандарға ынйылары менән шытырҙап ултырыу ҙа рөхсәт ителә.

**(Джон Леннон).**

Йәшәү зарарлы. Шуға кешеләр үлә.

**(Станислав Ежи Лец).**

Бәлки, иң күп эшләгәндәр иң күп хыялланаларҙыр.

**(Стивен Ликок).**

Ҡарағыҙ әле миңә. Ике йөҙлө булһам, ошо йөҙөмдө йөрөтөр инемме икән?

**(Авраам Линкольн).**

Башҡаларҙы үҙгәртергә теләгән кеше, әгәр ҙә иң тәүҙә үҙен үҙгәртмәһә, бушҡа тырыша.

**(Игнатий Лойола).**

Миненсә, сәйәсмән һуңғы көнөнә хәтлем халыҡтың уны яратмағанына ышана алмай.

**(Юрий Лужков).**

Эргәндәге кешенең бәхетһеҙлеге үҙеңдең бәхетһеҙлектәреңдән йыуата.

**(Лукиан).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Нобунага исемле бөйөк япон һуғышсыһы дошманын ҡыйратырға теләгән, ләкин дошмандары ун тапҡырға күберәк булған. Ул еңеүенә ысын күңелдән ышанһа ла, һуғышсылары быға икеләнгән.**

**Юлда барғанда Нобунага изге бер урында туҡтаған һәм кешеләренә шулай тигән:**

**- Хәҙер мин тәңкә ташлаясаҡмын. Әгәр ҙә бөркөт төшһә - беҙ еңәсәкбеҙ, решка төшһә - еңеләсәкбеҙ.**

**Шулай итеп, Нобунага тәңкә ташлаған һәм бөркөт өҫкә төшкән. Һуңыраҡ уның һалдаттары шул тиклем яҡшы, батырҙарса һуғышҡан һәм яуҙа еңеп сыҡҡан.**

**- Киләсәкте бер кем дә үҙгәртә алмай, нисек булырға тейеш, шулай була инде ул, - тигән еңеүҙән һуң Нобунаганың ярҙамсыһы, был уңышты яҙмышҡа япһарырға теләп.**

**- Шулай шул, - тигән Нобунага, ике яғында ла бөркөт төшөрөлгән тәңкәгә күрһәтеп".**

*ВИКТОРИНА*

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР



**Был юлы яҙыусы, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Айгиз Баймөхәмәтовтың ижады буйынса викторина тәҡдим итәбеҙ.**

**1. "Ҡалдырма, әсәй!" повесы ҡайһы телгә тәржемә ителмәгән?**
а) ҡаҙаҡ;
б) әзербайжан;
в) сыуаш;
г) инглиз.

**2. Башҡортостандан тыш тағы ҡайһы республикала "Ҡалдырма, әсәй!" китабы буйынса спектакль ҡуйылды?**
а) Бүрәт Республикаһы;
б) Татарстан;
в) Сыуашстан;
г) Яҡутстан.

**3. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Ҡалдырма, әсәй!" буйынса ҡуйылған "Хыялға ҡаршы" спектакленең режиссеры кем?**
а) Олег Ханов;
б) Илсур Ҡаҙаҡбаев;
в) Айрат Абушахманов;
г) Рөстәм Хәкимов.

**4. Әҫәрҙәге төп герой Ильястың яҡын дуҫының исеме кем?**
а) Даян;
б) Динар;
в) Фәрит;
г) Руслан.

Ҡәҙерле дуҫтар! 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйткән тәүге өс уҡыусыбыҙ Айгиз Баймөхәмәтовтың автографы ҡуйылған "Ҡалдырма, әсәй!" һәм "Әкиәтһеҙ бала саҡ" китаптарын алып һөйөнәсәк. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Рәсүл Сәғитовтың "Словом красен человек" китабын Бөрйән районы Яңы Монасип ауылынан Гөлүзә Ҡыуандыҡова отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?

**Рубриканы Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

*ХУШЛАШЫУ ҺҮҘЕ*

# МӘШҺҮР ЙЫРАУСЫ КИТТЕ...



Уралтауыбыҙҙың мәғрур бер ҡаяһы ҡоланы. Ҡотолғоһоҙ әжәл арабыҙҙан аҫыл затыбыҙҙы тартып алды. Милләтебеҙҙең йөҙөк ҡашы, мәшһүр йыраусыһы, рухи Аҡмуллаһы, ырыуының аҡһаҡалы, затының ҡанбабаһы, башҡорт халҡының йыр классикаһын яҡшы белеүсе һәм башҡарыусы, шулай уҡ ҡанбабалар һәм ҡаңбабалар тәрбиәһе традицияларын һаҡлаусы, "Мәғри", "Силәбе", "Ғәзизәкәй", "Сәхипъямал", "Ирмәк", "Ынйы", "Вәхит", "Шафиҡ", "Кәмәлек", "Мәҙинәкәй", "Һыр" кеүек йырҙарҙы ҡабатланмаҫлыҡ итеп башҡарыусы, "Наполеон Бонапарт", "Муса Мортазин" кеүек уникаль марштарҙы, бихисап мөнәжәттәрҙе, боронғо китаптарҙы үҙ көйө менән көйләп уҡыусы, Аҡмулла, Бабич, Туҡай әҫәрҙәрен улар йәшәгән дәүерҙәгесә, йәнле рәүештә башҡарыу өлгөләрен беҙҙең көндәргә килтереп еткереүсе һуғыш һәм хеҙмәт ветераны **Абдулла улы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев** 94 йәшендә мәңгелек донъяһына күсте.

"Бөтә донъяны урап сыҡҡан этномузыковед - япон профессоры Танимото Кадзуйуки Мөхәмәтйән ағайҙы тыңланы ла иланы. Ғүмере буйы эҙләгәнен ул Һаҡмар бүреһе ауылында тапты, ул көнөн ғүмеренең иң бәхетле мәле тип һананы",- ти билдәле ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов. Халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәрен, моң хазиналарын йөрәгендә йөрөтөүсе затыбыҙ боронғолоҡ менән хәҙергене тоташтырып йәшәне, хәҙер инде ошо булмышын мәңгелек менән тоташтырҙы. Киләсәктә ул ҡалдырған йыр-мондар яңғыраһа, ул тапшырған рухи ҡомартҡылар, йола-традициялар һаҡланһа, халҡыбыҙ ҙа мәңгелектә йәшәйәсәк! Иншалла!

Йәнең йәннәттә булһын, олуғ затыбыҙ!

Мөхәмәтйән ағайҙы ололаусы барлыҡ уҡыусыларыбыҙ исеменән уның балаларының һәм туғандарының тәрән ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**"Киске Өфө"ләр.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 1164/06